ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

5-11 март (буранай) 2022

№9 (999)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тукталкалар...** түләүлегә әйләнә 5




**Ярыштылар, енделәр...** 6



**Береһе һуңһә, икенсеһе яна:** ҡырҡ сыраҡлы ҡатын-ҡыҙ шуға ла һынмай 8-9



**Атта ла, тәртәлә лә,** йәки Көслө заттың көсһөҙ булыуы хаҡында фәлсәфә 12-13



**ТВ-программа** 14

*Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2022 йылдың икенсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә төрлө ярты йыллыҡтағы хаҡтар менән - 739 һум 98 тингә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Был мәғлүмәтте йәнәшәгеҙҙәге дуҫ-иштәрегеҙгә, туғандарығыҙға ла еткерһәгеҙ ине. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*

ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТ

## ДОНЪЯҒА БАЛА ТЫУА...

Яҡты донъяға тыуыр алдынан Бала Аллаһы Тәғәләнән һораған:

- Иртәгә мине Ергә ебәрәһең икән тип ишеттем. Мин бит бик бәләкәймен, унда нисек йәшәрмен һуң?

- Яҡлап, ҡурсалап йөрөтөргә һиңә фәрештә бүләк итәсәкмен, - тип яуап биргән Хаҡ Тәғәлә.

- Минең бында бәхет өсөн барыһы ла бар. Йырлайым, көләм...

- Фәрештәң дә йылмайыр, йырлар. Һин уның һөйөүен, наҙын тоясаҡһың һәм мотлаҡ бәхетле буласаҡһың.

- Ә ул ниндәй телдә һөйләшә, уның менән нисек аңлашырмын? Һиңә мөрәжәғәт итергә теләһәм, нимә эшләргә?

- Фәрештәң ҡулдарыңды бергә ҡуйып, доға уҡырға өйрәтер.

- Ерҙә яуызлыҡ барлығы хаҡында ишеткәнем бар...

- Фәрештәң унан яҡлаясаҡ. Үҙенең ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып булһа ла...

- Һине башҡа күрә алмауымды аңлайым һәм ошо тойғонан тағы ла күңелһеҙерәк булып китә.

- Фәрештәң минең хаҡта барыһын да һөйләр һәм миңә табан юлды өйрәтер. Мин һәр ваҡыт һинең янында буласаҡмын.

...Шул ваҡыт Ерҙән тауыштар ишетелә башлай. Бала ашығып ҡына һуңғы һорауын бирә:

- Минең фәрештәнең исеме кем һуң? Уға нисек өндәшергә?

- Исеме бер нәмә лә аңлатмай әле һиңә. Һин уны "Әсәй" тип йөрөтәсәкһең...

БАЙРАМ МЕНӘН!




ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Минең тормошомдағы ҡәҙерле ҡатын-ҡыҙ" тигәндә, һеҙ кемде күҙ уңында тотаһығыҙ? Ҡатын-ҡыҙ һеҙгә ниндәй сифаттары менән ҡәҙерле?

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Көйөргәҙе районы:*** Ошондай йәки уға оҡшаш һорауҙы ишетһәм, бер көләмәс иҫкә төшә. Бер бәләкәй генә ҡыҙ атаһына әйтә ти: "Атай, ҙурайғас, мин һиңә оҡшап матур буласаҡмын". Атаһы аптырап: "Ҡыҙым, бәлки, әсәйеңә оҡшап матур булырһың?" - тиеүенә, ҡыҙы: "Юҡ, ул иртән йыуынғас битенә крем, ирененә помада һөртә, ҡашын, керпеген буяй, хушбуй һибә, ә һин йоҡонан уянып, битеңде йыуаһың һәм шунда уҡ матур булаһың", - тип яуаплай. Ысынлап та, тағы ла матурыраҡ булып күренер өсөн битенә-күҙенә ҡалын-ҡалын буяуҙар һөрткән, пластик операциялар яһатҡан ҡатын-ҡыҙға тәү күреүҙән үк ихтирамым бөтә. Ҡатын-ҡыҙҙы тәбиғәт былай ҙа бөтөн яҡтан камил итеп яралтҡан, шул матурлыҡ менән ғорурланырға, уны ҡулынан килгәнсә һаҡлар урынға әллә ни ҡыла ҡайһы бер гүзәл зат.

Тышҡы ҡиәфәтенә ҡарағанда, әлбиттә, иң беренсе, ҡатын-ҡыҙҙың эске донъяһы минең иғтибарҙы йәлеп итә. Тирә-яҡта барған хәлдәргә ҡарашы, мөнәсәбәте лә мөһим роль уйнай, сөнки уның, тәү сиратта, минең фекерҙәш булыуы, уңыштарыма шатлана белеүе, уңышһыҙлыҡтарымды уртаҡлашыуы шарт. Дини ҡанундарҙы белгән, халҡымдың ғөрәф-ғәҙәттәрен тотҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙы ихтирам итәм, әммә ҡайһы берҙәренең Ҡөрьәндең йөкмәткеһе менән танышмай, шәриғәт ҡағиҙәләрен белмәй тороп, ир-атҡа аҡыл өйрәтә башлауын өнәмәйем. Ҡунаҡта ултырғанда иренә һүҙ бирмәй, шарҡылдап көлөп ултырғандарға ла ихтирамым юҡ минең. Итәғәтлек төшөнсәһе, тәү сиратта, ҡатын-ҡыҙ енесенә бәйле. Ул ни тиклем тотанаҡлы, шул тиклем һөйкөмлө.

Бына шулай, ҡатын-ҡыҙҙың ҡайһы бер оҡшаған, хөрмәт итмәгән кире яҡтарын атағандан һуң, уларҙағы мин ихтирам иткән матур сифаттарҙы ла атап үтәйем. Уларҙың күркәм холҡон, әлбиттә, шағирҙар нисәмә быуат данлаған, ләкин данлауҙан туҡтамаған. Ысынында, һәр ир-егет үҙенсә баһалай инде үҙенең ҡатын-ҡыҙын. Минең ҡатын-ҡыҙға бағышланған иң яратҡан шиғырым - Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан күренекле шағир Константин Симоновтың "Жди меня" шиғыры. Уҙған быуаттың етмешенсе йылдарында Совет Армияһы сафтарында хеҙмәт иткәндә һеңлем Нәсимә хат эсенә берәр шиғыр күсереп ебәрә ине. Мин уларҙы блокнотыма туплап барҙым. Улар араһында үрҙә атап үтелгән әҫәрҙең башҡортса тәржемәһе лә бар ине, әйтерһең дә, ул ике йылға тыуған йортонан ситтә ауыр һалдат бурысын үтәгән егеттең һөйгәненә яҙған һүҙҙәре ине. Шиғырҙы ҡырҡ биш йыл буйы һаҡлап йөрөттөм, уның йөкмәткеһе генә түгел, ә тәржемәһе лә һоҡландырҙы мине. Минеңсә, уның башҡортса варианты төп нөсхәһенән дә матурыраҡ, күркәмерәк. Бындай хәл тормошта бик һирәк күренештер. Баҡтиһәң, ул Рәми Ғариповтың тәржемәһе икән.

Үрҙә бирелгән һорауға һәр кем "Минең иң яратҡан ҡатын-ҡыҙым - әсәйем" тип яуап бирәсәк. Минең дә яуабым шулай. Әсәйемде ниндәй сифаттары өсөн хөрмәт итәмме? Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ғына хас баҫалҡылығы, тәҡүәлелеге, иплелеге, шул уҡ ваҡытта кәрәк ваҡытта үҙенең аҡыллы һүҙен әйтә белеүе менән ҡәҙерле ул. Унан башҡа бергә тормош көткән ҡатыным, ҡыҙым һәм уның өс ҡыҙы - Илгенә, Айһылыу, Әҙилә минең иң ҡәҙерлеләрем. Уларҙың да үҙҙәренә генә хас һәйбәт яҡтары ла, етешһеҙлектәре лә бар. Тик ул турала мин үҙем генә беләм. Төп тормош кредом - икәү белгәнде башҡалар белергә тейеш түгел.

12+

*✓ Еләк-емеш йыйырға туғайға, урманға барғанда ла матур кейенеп йөрөнө. Әсәйем әйтеүенсә, ул ҡапыл, хәбәрһеҙ-ниһеҙ ире ҡайтып төшөр, тип көтөп, әҙерләнеп йәшәгән.*

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ЙӨН ИЛӘП...



**Һалҡын ҡыштың ел-буранлы һыуығына тышта өшөп ҡайтып аяҡҡа йылы ғына йөн ойоҡ кейеп ебәрһәң, арыуың да, өшөүең дә ҡул менән һыпырып алғандай була! Элегерәк һәр өйҙә аҡлы-ҡаралы, төрлө биҙәкле һәм биҙәкһеҙ, оҙон һәм ҡыҫҡа ҡунысլы йөн ойоҡтар булды. Хәҙер һарыҡ йөнөнән бәйләнгән ойоҡтар юҡ тиерлек, барыһы ла магазиндың синтетик йөн носкиҙарына күсеп бөттө. "Әллә уларҙың күҙ яуын алып торорлоҡ биҙәкле булыуы шулай күңелдәрен арбай кешенең, әллә осһоҙ һәм ныҡ булыуы, иллә мәгәр үҙебеҙ һарыҡ йөнөнән бәйләп алған ойоҡтарҙы ҡыҫырыҡлап сығарҙы был носкиҙар", тиһәм, ҡыҙым "Һуң, әсәй, йөн иләүселәр юҡ та инде хәҙер", тип яуап бирҙе.**

Ысынлап та, беҙҙең өләсәй-әсәйҙәр һәр кис ваҡыт табып, ҡулдарына тиҙ генә йә орсоҡтарын, йә бәйләмен алыр ине. Һарыҡ ҡырҡыу миҙгеленән һуң йөндө эшкәртеп алыу үҙе ҙур бер эш булыр ине. Сүп-сарҙан таҙартылып, матур итеп тетелгән, болоттай йөн гәзиткә урап бәйләп ҡолғаға ҡуйылғандан һуң ҡулда орсоҡтар әйләнә башлар ине. Был эш йыл әйләнәһенә барҙы, ләкин ҡышҡы кистәрҙә үтә лә әүҙемләшер ине. Миңә лә әсәйем йөндө эшкәртергә өйрәтте. Таҙалау, тетеү, иләү, сиратыу, йыуыу, унан һеңле-ҡустыларҙың ҡулына кейҙереп йомғаҡтар яһау - үҙе бер ғәйәт һәләт һәм тырышлыҡ талап иткән икән тип уйлайым хәҙер. Ошоларҙың барыһын да иҫкә төшөрҙөм дә бер кис йөн иләргә ултырҙым. Ейәндәр аптырай, орсоҡтоң әйләнеүенә иҫтәре китеп ҡарай, йөндән нәҙек кенә еп килеп сығыуына бөтөнләй ғәжәп булдылар. Ҡул да, күңел дә һағынған булған был шөғөлдө, бармаҡтарҙы бер аҙ өйрәтеп алғас, ике йомғаҡлыҡ йөндө иләп тә ҡуйҙым.

Ҡыҙым бөтә эш барышын видеоға төшөрөп, һуңынан монтаж эшләп, уға музыка һалып, интернет селтәренә ҡуйғайны, бик күп ҡарауҙар йыйҙы был видео. Унан тыш, йөн иләп биреүҙе һорап хат яҙа башланылар. Оҙаҡ та уйламайынса ризалаштым, сөнки хаҡлы ялға сыҡҡас, ваҡыт та күп, ҡышҡы оҙон кистәр ҙә ҡул эше менән тиҙерәк үтә, пенсияға өҫтәмә килем дә килә. Хәҙер үҙемдең даими һатып алыусыларым да бар. Һарыҡ йөнөнән бәйләнгән ойоҡ, магазиндыҡынан айырмалы рәүештә, туҙа, тишелә, ә хәҙер кеше ямау менән булышмай, яңыһын бәйләүҙе хуп күрә. Вахта ысулы менән эшләгән ир-егеттәр бик күп, алыҫ Себер тарафтарында аяҡтары йылы йөрөһөн өсөн иң яҡшы кейем - йөн ойоҡ. Шуны күҙ уңында тотоп, кәләштәре, әсәләре йөн иләүгә заказ йыш бирәләр. Шуға күрә эш етерлек миңә. Бейәләй, күкрәксәләр өсөн йөндө төрлө төҫкә буяй башларға кәрәк, тип уйлап торам.

Хаҡын яҙып тормайым. Һәр кем үҙенең эшен нисек баһалай инде. Мәҫәлән, район үҙәгендәге баҙарҙа 100 грамм йөндө 100 һумға һатҡандарын күргәйнем. Хәҙер алып-һатыуҙы интернет аша алып барырға була. Элек кенә ул яҡында ҙур ҡаланың булмауы бәкәлгә һуға ине, бөгөн ундай проблема юҡ. Шуға күрә оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙарҙы минең кеүек йөн иләп һатырға саҡырам. Аҡсаһы аҡмаһа ла, тамып тора.

**Хәлимә ӘСӘҘУЛЛИНА.**
**Белорет районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? "Минең тормошомдағы ҡәҙерле ҡатын-ҡыҙ" тигәндә, һеҙ кемде күҙ уңында тотаһығыҙ? Ҡатын-ҡыҙ һеҙгә ниндәй сифаттары менән ҡәҙерле?

***Сәлим ҠУНАҠБАЕВ, Ейәнсура районы:*** Ҡатын-ҡыҙҙарҙың барыһын да Аллаһы Тәғәлә бик матур итеп яратҡан. Күренекле шағир Рафаэль Сафин ҡатыны, мәшһүр актриса Гөлли Мөбәрәковаға бағышлаған ошо шиғыр күптәргә таныштыр:

"Хоҙай, ахыры, һине шулай
Һоҡланһындар өсөн яратҡан.
Яратҡан да, ситтән ҡарап тороп
Һоҡланғандыр үҙе аҙаҡтан".

Ә мин ҡатын-ҡыҙ башҡалар һоҡланһын өсөн генә түгел, ә был донъяны матурлар өсөн дә яратылған, тип әйтер инем.

Идеаль кеше булмай, тиһәләр ҙә, мин үҙемдең өләсәйемде, әсәйемдең әсәһен, иң күркәм, иң камил кеше тип яраттым. 1909 йылғы ине ул. Тыуҡһан йәшкә тиклем йәшәне. Әле булһа күҙ алдында: ҡартайғансы күлдәкте аҡ ситсанан балитәкләп үҙе тегеп кейҙе. Ниндәй генә миҙгел булһа ла, еләнен дә өҫтөнән төшөрмәне. Башында ла һәр ваҡыт аҡ яулыҡ булды. Берәй эш эшләгәндә күлдәк тышынан йә халат, йә алдын-артын ябып торған алъяпҡыс кейә торғайны. Еләк-емеш йыйырға туғайға, урманға барғанда ла матур кейенеп йөрөнө. Әсәйем әйтеүенсә, ул ҡапыл, хәбәрһеҙ-ниһеҙ ире ҡайтып төшөр, тип көтөп, әҙерләнеп йәшәгән. Ҡара ҡағыҙы килһә лә, Бөйөк Ватан һуғышы башланғас та фронтҡа киткән олатайымды ғүмер буйы көткән. 33 йәштә генә ике бала менән тол ҡалһа ла, башҡаса тормошҡа сыҡмаған. Төҫкә бик матур ине ул. Ҡартайғансы һоратыусылар ҙа, димләүселәр ҙә булды. Ололарҙан ишетеүемсә, олатайҙан ҡара ҡағыҙ килеү менән матур кейенергә яратҡан өләсәйем аҡ, сағыу төҫлө күлдәктәрен, яулыҡтарын ҡара-һоро төҫкә алмаштырған. Ситяттар күҙ һалмаһын тип, үҙен шулай ҡурсалаған. Һаҡланып ҡалған фотоларҙан күренеүенсә, 50-55 йәштәргә тиклем ҡара яулыҡ ябынып йөрөгән. Әсәйем әйтеүенсә, өләсәй булып, ҡулына тәүге ейәнен алғас ҡына ҡара кейемдәрен усаҡ тамағына ырғытып, аҡ күлдәк, аҡ яулыҡ ябына башлаған. Минең хәтерҙә лә ул аҡ күлдәкле, аҡ күңелле ағинәй булып ҡалған. Аҙ һүҙле, бик сабыр кеше ине. Бер ҡасан да уның тауыш күтәреп һөйләшкәнен ишетмәнем. Бала ғына булһаҡ та, һеҙ ир кеше бит, тип, беҙҙең алдан сығып, юл ҡыйманы. Аңлата торғанын яйлап ҡына аңлатты, эшләгәндә ипләп кенә ярҙам итте. Студент саҡта ауылға ялға ҡайтһаҡ, әсәй-атайҙан йәшереп кенә аҡса бирә лә, мин олоғайғас, атлай алмай башлағас, күтәреп йөрөтөрһөң, тигән була торғайны. Хәҙерге күҙлектән уйлайым да, өләсәйем ҡайһылай аҡыллы булған, тип ҡуям. Ул беҙҙе ҡулланыусы ғына итеп тәрбиәләмәҫ өсөн, дөрөҫөрәге, беҙҙе яуаплы булып үҫһен өсөн шулай тигән. Шөкөр, ғүмеренең аҙағынаса йүгереп йөрөнө. Береһенә лә ауырлыҡ һалманы, аҡылы ла теүәл булды.

Мин үҙем һуң өйләндем. Күңелем әсәйем, өләсәйем кеүек ҡыҙ-ҡатын затын оҙаҡ эҙләне. Хатта яҡындарым, өйләнмәҫ инде был, тип ваз кисеп бөттөләр. Эҙләгәнемде тапҡас ҡына уны өйөмә алып ҡайттым. Уны, балаларымдың әсәһен, ейәндәремдең өләсәһен бөгөн, өләсәйем һәм әсәйемдән ҡала, иң ҡәҙерле кешем, тип әйтә алам. Ул гүзәл затҡа тейешле бөтә күркәм сифаттарға эйә. Ышаныслы, тоғро, ипле, сабыр. Өләсәйем кеүек, үҙенең ғәҙел һәм дөрөҫ һүҙен генә әйтә. Бер ҡасан да береһенең дә йөҙөн йыртып, ауыр һүҙ әйтмәй. Ниндәй ҙә булһа ғәҙелһеҙлеккә, хаяһыҙлыҡҡа осраһа, Аллаһы Тәғәләгә һыйына, минән башҡа Хоҙай бар бит, ул күрә, ул кешене иртәме-һуңмы урынына ултырта, тип кенә ҡуя. Хас та өләсәйем инде.

Шуға күрә кәләш алырға йәки кейәүгә сығырға ваҡыт тип кенә өйләнергә йәки кейәүгә сығырға ярамай. Был донъяла Күктәр инселәгән үҙеңдең яртың бар, шуны тапҡансы ғаилә ҡорорға ашыҡма, тип кәңәш итәм мин яңғыҙ йөрөгәндәргә.

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ҒӘФҮ ИТ, ТАНЫМАНЫМ...



Урта йәштәрҙәге бер ҡатынға инфаркт булған. Операция өҫтәлендә табиптар уның ғүмере өсөн көрәшкән ваҡытта ул Аллаһты күргән.

- Үләмме? - тип һораған ҡатын.

- Юҡ, - тигән Аллаһы Тәғәлә. - Әле һинең 40 йыл да өс көн, 8 сәғәт ғүмерең бар.

Ҡатын наркоздан уянғас, дауаханала ятыуын иҫәпкә алып, табиптан битендәге йыйырсыҡтарын бөтөрөүен һораған. Бер ыңғайҙан түштәрен ҙурайтыуын, билендәге майҙарын кәметеүен дә үтенгән. Дауахананан сығыр алдынан яңы халәтенән ҡыуанған ҡатын парикмахер саҡыртып, сәстәрен һары төҫкә буятҡан, уға маникюр, педикюр яһағандар.

Әммә донъянан шул тиклем дә ҡәнәғәт булған ҡатын дауахананан ҡабаланып сығып килгәндә машина аҫтында ҡалған. Һәм тағы ла Аллаһ алдына баҫҡан.

- Эй, Аллам! - тип ҡысҡырған ҡатын, - Һин бит минең 40 йыл ғүмерем бар тинең!

- Ғәфү ит, таныманым, - тигән тауыш ишетелгән...

Шулай итеп...

Кинәйә - ишара ғына, уның аҙағын беҙ үҙебеҙ фекерләп бөтөрөргә тейешбеҙ. Ҡатын-ҡыҙҙар асыуланмаһын, кинәйәнең мәғәнәһен енескә айырып ҡарарға кәрәкмәй. Бында һаулыҡ һәм уға ҡарата беҙҙең мөнәсәбәтебеҙ нисек булыуы тураһында һүҙ бара...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика хөкүмәте, ҡала һәм район хакимиәттәре башлыҡтары менән кәңәшмә үткәрҙе. Унда Көнбайыш санкциялары шарттарында төбәкте социаль-иҡтисади үҫтереү буйынса фекер алышынды. Кәңәшмәлә иҡтисад, төҙөлөш комплексы, ауыл хужалығы, торлаҡ баҙарының тотороҡлоғон тәьмин итеү һәм бюджетты үтәү мәсьәләләре ҡаралды. Радий Хәбиров башлыҡтар менән санитар-эпидемиологик хәлде һәм ковидҡа ҡаршы көрәш сараларын тикшерҙе.

✓Башҡортостан Башлығы олимпиадала ҡатнашыусы спортсылар менән осрашыуҙа физик культураны һәм юғары ҡаҙанышлы спортты үҫтереүгә өҫтәмә аҡса йүнәлтеү өсөн республика ҡаҙнаһына төҙәтмәләр әҙерләнә, тип хәбәр итте. Осрашыу һуңында Радий Хәбиров олимпиясыларҙы һәм уларҙың тренерҙарын дәүләт наградалары, аҡсаға сертификаттар менән бүләкләне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостан Башлығының 2020 йылдың 28 октябрендәге указына ярашлы, Олимпия уйындары еңеүселәрен һәм призерҙарын матди дәртләндереү суммаһы арттырылды.

✓Башҡортостан шифаханалары мотлаҡ ПЦР-тест тураһында талапты бөтөрҙө. Йәмәғәт урындарына ингән урында QR-кодтар системаһын ғәмәлдән сығарыу тураһында һорауға аңлатма биреп, республикала эпидемиологик процестың тотороҡланыуы күҙәтелә, тип билдәләне һаулыҡ һаҡлау министры М. Забелин. Был талап шифаханаларға ла ҡағыла, тип өҫтәне министр. Хәҙер шифаханаға урынлашҡанда ял итеүселәргә QR-код кәрәкмәй. ПЦР-тест та талап ителмәй.

✓Рәсәй тимер юлдары Рәсәйҙең көньяҡ ҡалаларынан өҫтәмә поездар тәғәйенләй, тип хәбәр итте компания. "Әлеге ваҡытта Рәсәй тимер юлдары Адлерҙан, Анапа, Новороссийск, Сочи һәм Рәсәйҙең башҡа көньяҡ ҡалаларынан өҫтәмә поездар тәғәйенләү буйынса эш алып бара. Шулай уҡ ғәмәлдәге составтарға өҫтәмә вагондар тағыла. Һорауҙың артыуы пассажирҙар өсөн юл хаҡына йоғонто яһамаһын өсөн билетҡа билдәле бер хаҡ ҡуйыла", - тиелә Рәсәй тимер юлдары компанияһының рәсми белдереүендә.

✓Владимир Путин 2 марттан Рәсәйҙән 10 мең долларҙан ашыу ҡулаҡса валютаһын сит илгә алып сығыуҙы тыйҙы. Бынан алдараҡ Рәсәйҙән 10 мең долларҙан ашыуыраҡ суммала ҡулаҡса валютаһын алып сыҡҡанда аҡсаға декларация бирергә кәрәк ине.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? "Минең тормошомдағы ҡәҙерле ҡатын-ҡыҙ" тигәндә, һеҙ кемде күҙ уңында тотаһығыҙ? Ҡатын-ҡыҙ һеҙгә ниндәй сифаттары менән ҡәҙерле?



***Камил ФӘТТӘХОВ, Мәләүез ҡалаһы:*** Ҡатын-ҡыҙҙы бөгөн иҡтисадтың ниндәй генә өлкәһендә осратмайһың! Уҡытыусы ла ул, тәрбиәсе лә, хоҡуҡ һаҡсыһы ла, инженер ҙа, водитель дә, сәйәсмән дә. Космосҡа ла оса, ҡулына ҡорал алып, Ватанын һаҡларға ла әҙер. Һөйөклө ҡатын да, хәстәрлекле әсә лә була белә. Әммә, минеңсә, ошо һуңғы ике статусы булғанда ғына улар ысын ҡатын-ҡыҙ исемен лайыҡлы йөрөтә ала! Сөнки Аллаһы Тәғәлә гүзәл затты, иң беренсе, ошо ике бурыс өсөн яралтҡан. Шул ваҡытта ғына уларҙың дәрәжәһе оло һәм абруйлы. Шундай Хәҙис-шәриф тә бар: "Балаһы булмаған сибәр ҡатынға ҡарағанда күп балалы ҡатын Аллаһ ҡаршыһында һөйкөмлөрәк".

Һуңғы ваҡытта ир-егеттең ғаилә ҡорорға ашыҡмауын йыш ҡына уларҙың йомшаҡлығына, аҡсаһы, фатиры, дәрәжәһе булмауына япһармаҡсылар. Был фекерҙе, әлбиттә, күберәк гүзәл заттарҙан ишетергә тура килә. Йәнәһе лә, өйләнерлек аҡсаһы, кәләшен алып ҡайтырға ҡыйығы юҡ. Минеңсә, киреһенсә, бөгөн ҡатын-ҡыҙ кейәүгә сығып, ғаиләле булып йәшәргә теләмәй. "Үҙем өсөн генә бала табам да йәки таптым да..." тигәнгә хәҙер бер кем дә аптырамай. "Үҙҙәре өсөн генә" тип табалар ҙа, Әсәлек капиталынмы йәки яңғыҙ әсәләргә, аҙ килемле ғаиләләргә тигән башҡа түләүҙәрҙе алалар ҙа, өҫтәүенә ДНК-анализдар тапшырып, баланың атаһын алиментҡа бирәләр ҙә, бына тигән йәшәп тик яталар. Уларға, ысынлап та, ир кәрәкмәй хәҙер. "Үҙем - ир, үҙем -ҡатын" тип маҡтанғандарын ишетһәм, йәнем көйә. Салбарҙы систереп алдылар, кәпәсте һалдырҙылар, машина ла йөрөтәләр. Йорттағы ир-егет эштәрен башҡарырға хәҙер "муж на час, мастер на час" хеҙмәттәре бар.

Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө алдынан, әлбиттә, мин гүзәл заттарға тел тейҙерергә теләмәйем. Бар ул милләтемдең бына тигән ҡатындары, бына тигән әсәләре, ҡыҙҙары! Бына бөгөн генә машинамда уртаса йәштәрҙәге ир менән ҡатынды Өфөгә ҡыҙҙарына алып килдем. Бына тигән ғаилә! Дүрт улға ғүмер биргәндәр, икәүһен уҡытып, өйләндергәндәр, икәүһе - студент, баш ҡалабыҙҙың абруйлы юғары уҡыу йорттарының береһендә уҡыйҙар. Юл буйы балаларын, ейәнейәнсәрҙәрен хәстәрләп барҙылар. Һоҡланыуымдың сиге булманы һәм үҙем ҡабатларға яратҡан ошо Хәҙисшәриф тап уларға әйтелгән кеүек хис иттем: "Ирҙәр менән ҡатындар бер-береһенә мөхәббәт күҙе менән ҡараһа, уларға Аллаһы Тәғәлә үҙенең рәхмәт күҙе менән ҡарар. Әгәр ҙә ир ҡатынының ҡулынан тотһа, бармаҡ араларынан уның барлыҡ гонаһтары ҡойолор". Был күркәм хололо ҡатын менән йәшәгән ирҙең бер гонаһы ла юҡтыр кеүек тойолдо, сөнки ул юл буйы хәләл ефетенең ҡулын ысҡындырманы...

Минең дә иң матур сифаттарға эйә булған ҡатыным бар ине. Тәү күреүҙән тышҡы матурлығы ғына түгел, эске донъяһы менән дә әсир итте ул. Төҫөм дә, буйым да, юғары белемем дә юҡ, әммә артынан йөрөүселәр күп булһа ла, ул мине һайланы. Республика ҡалаларының береһендә мин төҙөлөш ойошмаһында водитель, ул дауаханала врач булып эшләне. Минең алда бер ғәйебе булмаһа ла, күңеле саф икәнен белһәм дә, көнләштем, нахаҡҡа рәнйеттем. Ул бер ҡасан да аҡланып, илап, үҙенең ғәйепле түгеллеген иҫбатламаны. Тик көндән-көн һулыны, кипте, алһыуланып торған йөҙө һарғайҙы, ҡояштай нурланып торған күҙҙәре һүнде...

Интернетта бер бәләкәй генә видеофильм йөрөнө. Бәлки, күптәрегеҙ күргәне лә булғандыр. Ул хас та минең тормошомдан алынған кеүек. Нисә ҡараһам да илайым. Унда бер ҡатын иренең һөйәркәһенә күсергә йыйынғанын белгәс, үҙенең шартын ҡуя: бер ай буйы иртәнге сәйгә балаһы алдында кухняға үҙен күтәреп алып сығыуын үтенә. Ваҡыт үтеү менән ир сығып китергә тигән уйынан ваз кисә, хәләл ефетенә яңынан һөйөү хистәре менән ҡарай башлай. Тик һуң була... Ҡаты ауырыуға дусар ҡатыны үлер алдынан үҙенең улына атаһы өлгөһөндә ысын ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙы бына шулай күтәреп кенә йөрөтөүен күрһәтергә, аңлатырға теләгән генә булған...

Минең ҡатыным да бер нәмә тураһында ғына: бала алдында тауышланмаҫҡа, талашмаҫҡа, ә, киреһенсә, яһалма булһа ла яратыуымды белдереүемде, ҡәҙер-хөрмәт итеүемде ялбарҙы. Үҙе һатып алған сәскәләрҙе улыбыҙға мин алып ҡайтты тиер ине. Алдашыуының сәбәбен бик һуңлап аңланым: ете йыл яман сир менән яңғыҙы ғына көрәшкән ҡатыным улыбыҙға мине яҡшы ир һәм атай итеп күрһәтергә тырышҡан...

Башҡаса өйләнмәнем. Улымды яңғыҙым үҫтерҙем. Хәҙер олатаймын инде. Ейәнсәрем - ҡәҙерле ҡатынымдың күсермәһе. Баҫалҡы, иманлы, тәртипле, сибәр, һүҙендә тора белә. Ҡулынан килмәгән эше юҡ. Врач булырға хыяллана. Бөгөнгө көндә ошо ейәнсәремде иң ҡәҙерле, иң матур һәм иң һөйкөмлө кеше, Аллаһы Тәғәләнең бүләге тип ҡабул итәм. Барлыҡ гүзәл заттарҙы Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө менән ҡотлайым, ә ир-егеттәргә уларҙы һаҡлайыҡ, ҡурсыйыҡ, хәстәрләйек, яратайыҡ тип әйтергә теләйем!

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

ӨС ДӘЛИЛ: АБВ

# ҠАНУН - ТАЙГАМЫ,

## ҡатын-ҡыҙ айыумы?



**Беҙ, ир-ат, йыш ҡына: "Ҡатын-ҡыҙҙар беҙҙең салбарҙы һалдырып кейгән кеүек, бар хоҡуҡтарыбыҙҙы тартып алды, руль артына ла ултырҙы. Уларға ир кәрәк тә түгел хәҙер. Бала табалар ҙа, ирҙәрен урамға ҡыуып сығаралар, машинаһы булған нескә затҡа ир кәрәкмәй", - тип зарланырға яратабыҙ. Шулай уҡ микән был йәһәттән хәлдәр? Ошо хаҡта фекер йөрөтәйек, мәсьәләгә өс күҙлектән ҡарайыҡ.**

**А** Күптән һөйләнелгән көләмәс. Бер ваҡыт ике дуҫ кеше һунарға барған. Йөрөгән-йөрөгәндәр ҙә, ҡайһылыр арала ике яҡҡа айырылып китеп йөрөгәндәрендә береһе: "Дуҫҡай, кил бында минең янға, айыу тоттом", - тип ҡысҡырған, ти. "Тотҡасың, алып кил һуң айыуыңды бында", - тигән икенсеһе. "Алып барыр инем дә, ебәрмәй шул", - тигән тегеһе.

Тап шуның кеүек, ир-аттың ҡатын-ҡыҙға ҡарата белдергән дәғүәһе тап ошо ике һунарсының хәләтен хәтерләтә. Һунарсының үҙен тотҡан өсөн айыу ғәйепле түгел дәһә. Ир-ат салбарын да, рулен дә, барлыҡ хоҡуҡтарын да ҡатын-ҡыҙға үҙе үк биреп ҡуйған икән, айыуҙы дуҫы янына алып бара алмаған һунарсы хәлендә көлкөгә ҡала инде.

Әлбиттә, ҡатын-ҡыҙ менән айыуҙы сағыштырып булмай. Әммә хоҡуҡты сағыштырырға мөмкин. Юҡҡа ғына "Ҡанун - тайга, айыу - хужа" тимәйҙәр. Һәр ир-ат үҙ йортонда, ғаиләһендә урмандағы айыу кеүек булһа, бар мәсьәләләр ҙә үҙ урынына ултырыр ине.

**Б** Был дәлил хаҡында яҙғаным да бар. Тәбиғәттә, йәмғиәттә һәм милләттә "көслө кеше" тигән вакантлы урын-бурыс бар. Көслө йән эйәһе ана шул урында үҙенең бурысын атҡармаһа, тәбиғәт тә, йәмғиәт тә, милләт тә юҡҡа сыға. Тәбиғәттә был ҡанун бар тулылығында үтәлә: бүреләр йә булмаһа үҙебеҙгә яҡыныраҡ булған аттар тормошон ғына алайыҡ. Уларҙа ата бүре менән айғыр бер ваҡытта ла үҙ урындарын инә бүрегә йә бейәгә тапшырып ҡуймай. Әгәр ҙә был хәл була ҡалһа, бүреләр һәм аттар зат булараҡ күптән юҡҡа сығыр ине.

Кешеләр тормошонда инде хәлдәр башҡасараҡ: "көслө кеше" вакантлы урыны саҡ ҡына бушай башлаһа, йәмғиәткә һәм милләткә тарҡалыу, юҡҡа сығыу ҡурҡынысы янай башлай. Тап шул саҡта ҡатын-ҡыҙ, ирекһеҙҙең көнөнән, ирҙәр үҙ бурысын үтәүҙән баш тартҡан урынды яуларға мәжбүр. Беҙ был осраҡта ҡатын-ҡыҙға "Беҙҙең урынды тартып алдылар" тип әйтеү урынына "Алайҙа улар бар!" тип әйтергә тейешбеҙҙер.

**В** "Электән был хәл шулай килгән, ана, "Ай тотолған төндә"ге Тәңкәбикәнең генә бейбаштаҡлығын алайыҡ", тиер кемдер берәү. Эйе, беҙҙең халыҡта ҡатын-ҡыҙ, әсә культы боронғо замандарҙан алып килә. Әммә уның нигеҙендә ир-аттың оҙайлы ваҡытҡа илен, ерен һаҡлауға бәйле яу сабып, йорттан айырылып тороу сәбәбе ята.

Мәктәпте тамамлап, колхозда эшләгән саҡта санаға ат егеп, бер ағайға ярҙам итешеп, урманға утынға барырға тура килгәйне. Шунда йөгөн һөйрәргә көсө етмәгән бейәнең ғәрлегенән илағанын күреп, тетрәнеүем хәтерҙә. "Ат башым менән һөйрәй алманым", тип ғәрләндеме икән малҡай? Тормош йөгөн һөйрәгән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың күҙ йәшен күргәндә һәр ваҡыт шул ваҡиға иҫемә төшә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәйҙә ир-егеттәр командалары араһында волейбол буйынса донъя чемпионаты уҙғарылмай. Был хаҡта Халыҡ-ара волейбол федерацияһының (FIVB) рәсми сайтында хәбәр ителә. "Уны ҡабул иткән илдәр һуңыраҡ иғлан ителә", - тиелә хәбәрҙә. Чемпионатты күсереүҙең төп сәбәбе - Украиналағы хәл. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, волейбол буйынса донъя чемпионаты 2022 йылдың август аҙағында Рәсәйҙең ун ҡалаһында, шул иҫәптән Өфөлә үтергә тейеш ине.

✓Рәсәйҙәргә йәмәғәт урындарында социаль дистанцияны һаҡламаҫҡа рөхсәт ителде. Роспотребнадзорҙың яңы эпидемиологик тәҡдимдәренән күренеүенсә, хәҙер битлек кейеү һәм көсәйтелгән дезинфекция режимы ғына ғәмәлдә.

✓Социаль ярҙам саралары, шул иҫәптән пенсиялар, пособиелар, бер тапҡыр бирелә торған түләүҙәр ваҡытында һәм тулы күләмдә ғәмәлгә ашырыла, тип хәбәр итте Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы. Пенсия фондында пенсия түләү өсөн кәрәкле аҡса һәм башҡа социаль ярҙам саралары ҡаралған. Социаль страховка фондында ла ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса пособиеларҙы ваҡытында түләргә аҡса етерлек.

✓Федераль һауа транспорты агентлығы илдең үҙәк өлөшөндәге һәм көньяғындағы 11 аэропортҡа осоуҙы тыйҙы. Ваҡытлыса сикләү режимы 2022 йылдың 8 мартына тиклем оҙайтылды, тип хәбәр итте ведомство. Йәғни Анапа, Белгород, Брянск, Воронеж, Геленджик, Краснодар, Курск, Липецк, Дондағы Ростов, Симферополь, Элиста аэропорттарына осоштар сикләнде.

✓Бөгөнгө көндә ике тиҫтәгә яҡын ил үҙ күгендә Рәсәй самолеттарының осоуын тыйҙы. Улар араһында Бөйөк Британия, Чехия, Польша, Болгария, Эстония, Латвия, Румыния, Литва, Финляндия, Австрия, Дания, Исландия, Германия, Швеция, Франция, Канада, Испания, Төньяҡ Македония бар.

✓Мәскәүҙә Global Model of the World - 2022" Халыҡ-ара гүзәллек конкурсы уҙҙы. Конкурста утыҙ ҡыҙ үҙ көсөн һынаны, шулай уҡ улар үҙ төбәге йәки иле менән таныштырҙы. Башҡортостан исеменән сығыш яһаған Эльмира Шәйехова "Беренсе вице-мисс" исеменә лайыҡ булды. Һылыуҡай затлы таж, халыҡ-ара матурлыҡ конкурсына саҡырыу, бүләктәр һәм "Останкино" медиа-мәктәбендә уҡыу мөмкинлеген алды. Эльмираға 22 йәш, ул "Башҡортостан Республикаһы һылыуҡайы - 2018" титулына эйә.

ҠЫҪҠАСА

# СӘЙӘХӘТКӘ СЫҠМАЙ ТОР!

✓ Ростуризм Рәсәйгә ҡаршы санкциялар индергән илдәргә бармай торорға кәңәш бирә. Ростуризм туроператорҙарға Рәсәйгә ҡаршы санкциялар иғлан иткән илдәргә турҙар һатыуҙы туҡтатырға ҡушты. Бынан тыш, Евросоюз һәм Канаданың ябыҡ һауа киңлеге аша осорға кәрәк булған Кариб бассейны илдәренә турҙар һатыуҙы туҡтатырға тәҡдим ителә. Мәҫәлән, Евросоюз һәм Канаданың һауа киңлеген сикләүгә бәйле Рәсәй туристары Куба, Доминикана, Мексика һәм Венесуэла кеүек илдәргә бара алмай. Туристик сәфәрҙәр өсөн асыҡ илдәр иҫәбендә - Төркиә, Мысыр, Тунис, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәре, Ҡытай, Һиндостан, Вьетнам һәм башҡа дәүләттәр. Ведомство шулай уҡ Рәсәйҙең Сит ил эштәре министрлығы, Федераль туризм агентлығы һәм Федераль һауа транспорты агентлығының актуаль туристик йүнәлештәр статусының үҙгәреүе тураһында мәғлүмәтен иғтибар менән күҙәтеп барыуҙы һорай.

✓ Башҡортостанда өлкәндәрҙе һәм балаларҙы диспансерлаштырыу тергеҙелде. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, ул Covid-19 буйынса хәлдең тотороҡһоҙ булыуына бәйле туҡтатылғайны. Был граждандарҙың айырым категорияларын диспансерлаштырыу, шулай уҡ көндөҙгө стационар шарттарында медицина ярҙамы күрһәтеүгә лә ҡағыла. Ҡарар коронавирус инфекцияһының таралыуына юл ҡуймау буйынса Радий Хәбиров етәкселегендәге республика оператив штабы ултырышында ҡабул ителде. Диспансерлаштырыу 18-39 йәшлектәргә - өс йылға бер тапҡыр, 40 йәштән өлкәндәргә йыл һайын уҙғарыла. Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, 2022 йылда 18, 21, 24, 27, 30, 33, 36 йәки 39 йәше тулғандар, шулай уҡ ковид менән сирләгәндәр тикшереү үтергә тейеш. Тикшереүгә, диспансерлаштырыуға йәки профессиональ тикшереүгә Дәүләт хеҙмәттәре, 122 телефоны аша йәки поликлиникаға шылтыратып, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһы докторы Берҙәм медицина порталында яҙылырға мөмкин.

✓ 14 мартҡа тиклем республикала "Ҡағыҙ тапшыр - ағасты ҡотҡар!" девизы аҫтында экомарафон үтә. Экомарафонда ҡатнашырға төбәктең барлыҡ ҡала-ауылдарынан уҡыу йорттары, йәмәғәт ойошмалары, предприятиелар, компаниялар һәм башҡа ойошмалар саҡырыла. Бының өсөн 300 килограмдан ашыу (алыҫ районлар өсөн 500-1000 килограмм) кәрәкмәгән ҡағыҙ йыйырға һәм акцияның сдай-бумагу.рф йәки www.Sdai-Bumagu.com сайтында заявка ҡалдырырға кәрәк. Акция Башҡортостан район-ҡалалары араһында ярыш рәүешендә үтә. Экомарафон һөҙөмтәләре буйынса муниципалитеттарҙың йәшел рейтингы төҙөләсәк. Акция йомғаҡтары буйынса барлыҡ ҡатнашыусылар ҙа рәхмәт ҡағыҙҙары аласаҡ, ә иң һөҙөмтәлеләр аҡсалата премияға лайыҡ буласаҡ. Әгәр төбәктә дөйөм һөҙөмтә 70 тонна булһа, финалға сығыусыларға ҡиммәтле приздар бирелә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# СТАРОСТАЛАРҒА...

**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары беренсе уҡыуҙа "Башҡортостан Республикаһында ауыл старосталары тураһында" Башҡортостан Республикаһы Законының 5-се һәм 6-сы статьяларына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын хупланы.**

"Старосталар урындағы үҙидара органдарына уларҙың ҡайһы бер йүнәлештәр буйынса ғәмәли эшмәкәрлегендә булышлыҡ итергә һәм урындағы әһәмиәттәге мәсьәләләрҙе хәл итеү буйынса тәкдимдәр индерергә тейеш. Ауыл биләмәһе, ҡала округы вәкиллекле органының ауыл мәнфәғәттәренә ҡағылышлы мәсьәләләр тикшерелгән ултырыштарында старосталар кәңәшләшеү тауышы хоҡуғы менән ҡатнаша", - тине республика парламенты спикеры Константин Толкачев. "Старосталар институтының барлыҡҡа килеүе һәм үҫеше алыҫ үткәндәргә барып тоташа, ә республикабыҙҙа тейешле хоҡуҡи нигеҙҙе 2019 йылда ҡабул ителгән закон булдырҙы. Ауыл халҡы араһында мөһим мәсьәләләрҙе хәл итергә әҙер булған әүҙем кешеләр бар, ләкин бының өсөн уларҙың етерлек вәкәләттәре юҡ. Староста статусы уларға шундай хоҡуҡ бирә. Тәҡдим ителгән закон проекты урындағы әһәмиәттәге мәсьәләләрҙе һөҙөмтәлерәк хәл итеү өсөн ошо институтты үҫтереүгә йүнәлтелгән", - тине Толкачев.

# ИНВЕСТОР БАШ ТАРТТЫ...

**Билдәле булыуынса, Ишембай районында экспортҡа башҡорт балы етештереү буйынса инвестиция проектының презентацияһы булырға тейеш ине. Май айында уны ебәреү өсөн "БиХеппи" компанияһы ("Бәхетле бал ҡорто") теркәлгәйне һәм юл картаһы булдырылғайны. Француз инвесторы Патрик Хоффман ("Отрада" компаниялар төркөмө) геосәйәси көсөргәнешкә бәйле инвестпроектын туҡтатыуы тураһында хәбәр итте.**

"Бөгөнгө хәл-торош проекттың иҡтисади аспекттарында һәм уны финанслауҙа үҙгәрештәргә килтерәсәк. Евросоюздан импорт ҡорамалдарҙы килеһе бал миҙгеленә ваҡытында килтереп еткереү мөмкин түгел. Шул уҡ ваҡытта мин проекттан тулыһынса баш тартырға теләмәйем һәм уға бер йылдан, сәйәсәт икенсе планға күскәс, сауҙа-иҡтисади, инвестиция бәйләнештәре тергеҙелгәс, яңынан тотонорға уйлайым", - тине Патрик Хоффман.

Инвестор әйтеүенсә, "Би Хеппи" компанияһы 5 мартҡа тәғәйенләнгән 14 урман участкаһын ҡуртымға алыу аукционында ҡатнашмаясаҡ. "Был урындағы умартасыларҙы тынысландырыр тип уйлайым. Проектты яңынан ебәрергә уйлағанда үҙ-ара килешеп эшләү өсөн улар менән ентекле диалог ҡорасаҡбыҙ. Үҙем унда булдырылған йөҙәрләгән эш урынына хәүеф янамауына инаныр өсөн Липецкиға ҡайтам. Хатта ҡатыныдың һәм ғаиләмдә күрер өсөн дә Рәсәйҙе ташлап китмәйәсәкмен", - ти Патрик Хоффман.

Француз эшҡыуары Рәсәйҙә 20 йыл эшләүен, матур тәбиғәтле, изге күңелле кешеләре һәм яҡшы инвестиция мөхите булған Башҡортостанды иһә үҙе өсөн яңы асыуын билдәләне. "Уның брендтарының береһе - башҡорт балы, әммә ҙур потенциалы булһа ла, уны әлегә сит илдә бик аҙ беләләр. Сифатлы йүкә балы донъя баҙарында Яңы Зеландияның "Манука" балы менән ярыша алыуына ышанам. Киләсәктә проектыбыҙҙы бойомға ашырыуыбыҙға һәм башҡорт балын донъя брендына әйләндереүебеҙгә өмөтләнәм", - ти Патрик Хоффман.

Азат ҒИЗЗӘТУЛЛИН.

# ХӘҮЕФҺЕҘ БУЛҺЫН ЮЛДАР

**Башҡортостанда 2024 йылда "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" милли проекты сиктәрендә интеллектуаль транспорт системалары (ИТС) индерелә. Был эш быйыл башлана.**

Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған кәңәшмәлә ошо мәсьәлә тикшерелде. Сараларҙы тормошҡа ашырыуға 1,1 миллиард һумдан ашыу йүнәлтелә. Шуның 850 миллион һумдан ашыуы - федераль аҡса. 2022 йылда проектты финанслау өсөн федераль һәм республика ҡаҙнаһынан 409 миллион һум бүленә. Башҡортостандың Транспорт дирекцияһы етәксеһе Мансаф Низакаев хәбәр итеүенсә, проект Өфө агломерацияһында тормошҡа ашырыла башлай. Федераль үҙәк Стәрлетамаҡ агломерацияһында системаны индереүҙе лә хупланы. "Тәүге этапта Өфөләге светофорҙарҙы яңыртабыҙ, - тип һөйләне Мансаф Низакаев. - Программа 134 интеллектуаль комплекс, махсус программа тәьминәте, мәғлүмәт таблолары, фотовидеотеркәү камералары, аҡыллы туҡталыштар, экологик метеостанциялар ҡуйыуҙы, юл карталарын цифрлаштырыуҙы үҙ эсенә ала. Ситуация үҙәген булдырыу планлаштырыла, уның белгестәре юлдарҙағы хәлде күҙәтеп барырға тейеш. Шулай уҡ оператив мәғлүмәттәрҙе Республикаға идара итеү үҙәгенә тапшырыу күҙ уңында тотола". Башҡортостан Башлығы республикала интеллектуаль транспорт системаларын индереүҙең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Был проект юл хәрәкәте менән идара итеү процестарын автоматлаштырырға, шуның һөҙөмтәһе булараҡ, республика юлдарында хәүефһеҙлекте арттырырға мөмкинлек бирергә тейеш", - тине Радий Хәбиров.

# ТУРИСТАРҒА ЯРҘАМ

**Әлеге ваҡытта һауа киңлеген өлөшләтә ябыуға, шулай уҡ Рәсәйҙең ҡайһы бер аэропорттарында ғәмәлгә индерелгән сикләүҙәргә бәйле сит илдәге ватандаштарыбыҙҙы өйҙәренә ҡайтарыу йәһәтенән ҡатмарлыҡтар килеп тыуыуы ихтимал.**

Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты мәғлүмәте буйынса, хәҙерге көндә Башҡортостандан 1800-ҙән ашыу турист сит илдә. Улар урындағы туроператорҙарҙан юллама һатып алған. Төп йүнәлештәр араһында - Мысыр, Төркиә, Доминикана. Уларҙан тыш, үҙаллы туристар ҙа бар, уларға ярҙам талап ителеүе ихтимал. Туристарға туроператор менән бәйләнештә торорға һәм мотлаҡ Рәсәй Сит ил эштәре министрлығының "Сит ил Ярҙамсыһы" мобиль ҡушымтаһында (iOS, Android) теркәлергә кәңәш ителә. Рәсәй граждандарын Европа дәүләттәренән сығарыуҙы ойоштороу эшен Федераль һауа транспорты агентлығы Рәсәйҙең Сит ил эштәре министрлығы һәм Федераль туризм агентлығы менән берлектә алып бара. Рәсәй авиакомпаниялары пассажирҙар алдындағы бурыстарын үтәргә һәм уларҙы өйҙәренә алып ҡайтырға әҙер. Рәсәй, шул иҫәптән Башҡортостан граждандары килеп тыуған проблема хаҡында түбәндәге элемтә каналдарына хәбәр итергә мөмкин: Сит ил эштәре министрлығының тәүлек әйләнәһенә эшләгән ҡыҙыу линияһына шылтыратырға: +7 495 695 45 45. Башҡортостан туристары ситуация үҙәгенә лә мөрәжәғәт итә ала: +7 347 218 19 19 (иртәнге 8-ҙән киске 8-гә ҡәҙәр, Өфө ваҡыты).

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөнөң 450 йыллығына ҡарата иң яҡшы стиль өсөн конкурс еңеүсеһе билдәле булды. Баһалама ағзаларының баһалары һәм интернет аша тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса еңеүсе итеп "Банан" студияһының конкурс эше танылды. Икенсе урынды дизайнер Мария Чиненова, өсөнсө урынды дизайнер Анна Сотникова эштәре яуланы. Конкурс эшенең фирма стилемә дөйөм концепция, фирмалы төҫ һәм шрифт, график элементтар, логотип, маскот (персонаж) кеүек элементтар инә. Конкурс еңеүсеһенең эше Өфө ҡала хакимиәтенә тапшырыласаҡ.

✓Өфөлә "Торатау" конгресс-холлында, "Башҡортостан" лайфстайл-үҙәгендә һәм "Планета" сауҙа үҙәгендә эшләгән вакцинация пунктлары ябыла. Баш ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, прививкаларҙы ҡала поликлиникаларында яһатырға мөмкин. Дәүләт хеҙмәттәре порталында, колл-үҙәктең берҙәм 122 телефонына йәки регистратураға шылтыратып яҙылырға мөмкин. Поликлиникаларҙың прививка кабинеттары иртәнге сәғәт 8-ҙән киске 8-гә тиклем асыҡ. Тәнәфес һәм ял көндәре юҡ.

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында Семён Елистратов исемендәге шорт-трек үҙәгендә спортсы, олимпия чемпионы һәм ике тапҡыр Олимпия уйындарының бронза призеры музейын булдырырға тәҡдим ителде. Былдай башланғыс менән шорт-трек мәктәбе директоры Евгений Мельчаков сығыш яһаны. Өфө мэры вазифаһын башҡарыусы Ратмир Мәүлиев һүҙҙәренсә, ҡала хакимиәте был идеяны күтәреп алды һәм Елистратов музейын ойоштороуҙа ҡулдан килгәнсә ярҙам күрһәтергә вәғәҙә бирҙе.

✓10 мартта көндөҙгө сәғәт 2-нән 4-кә тиклем Рәсәй Федерацияһы Президентының Башҡортостан Республикаһындағы ҡабул итеү бүлмәһендә республиканың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы вәкилдәре ҡатнашлығында тура телефон бәйләнеше ойоштороло. Бәйләнеш өсөн телефон: 8 (3472) 29-74-76, 8 (3472) 29-74-58.

✓Башҡортостанда һауа температураһы нормадан юғарыраҡ булыуы мөмкин. Рәсәй Гидрометүҙәге мәғлүмәттәре буйынса, мартта Башҡортостан уртаса айлыҡ һауа температураһының нормаға ярашлы һәм бер градусҡа юғарыраҡ булыуы көтөлә (март өсөн норма - 7,1 градус). Яуым-төшөм дә күп була, тип фаразлай синоптиктар (норма 20-40 миллиметр).

БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ТУКТАЛҠАЛАР...

## түләүлегә әйләнә




**Башҡортостаныбыҙ баш ҡалаһында берҙәм тукталҡа биләмәһе булдырыу күҙаллана. Ҡала биләмәләрен төҙөкләндереү йәһәтенән булдырыласаҡ тәүге түләүле тукталҡалар быйыл 1 июндән үк эшләй башлаясаҡ.**

ЮХХДИ мәғлүмәттәре буйынса, Өфөлә бөгөнгө көндә 500 мең автомобиль иҫәпләнә, йәғни, статистика буйынса, Өфөлә йәшәүсе һәр икенсе кешегә бер машина тура килә, тигән һүҙ (теркәлмәгән, сит ҡалаларҙан килеүселәрҙең транспорт сараларын индермәгән хәлдә). Эксперттар фекеренсә, түләүле тукталҡалар тәртибен индереү ҡаланың үҙәк урамдарын машиналарҙан бушатып, тәртип булдырасаҡ. Ил буйынса берҙәм тукталҡалар биләмәһе проекты эштәре тамамланып, уның тәүге этабын ғәмәлгә ашырыу башлана. Һәҙәмтәлә түләүле тукталҡалар зонаһының Аксаков, Революцион, Әй, Салауат проспекты һәм Зәки Вәлиди урамдарын үҙ эсенә алған сиктәре билдәләнде. Был зонаға ҡаланың тарихи үҙәгендә урынлашҡан 20-нән ашыу урам инә, сөнки тап ошо урындарҙа тукталыусы машиналар бик күп туплана, хатта тыйыу билдәләре лә һанға һуғылмай. Бына улар: Зәки Вәлиди, Пушкин, Свердлов, Октябрь революцияһы, Коммунистик, Чернышевский, Красин, Киров, Достоевский, Революцион, Яңы күпер, Цюрупа, Совет, Мостай Кәрим, Маркс, Гоголь, Крупская, Кустарный, Минһажев, Пархоменко, Ветошников, Әй, Амур, Крәстиән урамдары. Һынау зонаһында 3 700 машина-урын булдырыу ҡарала.

Проект буйынса эштәр бының өсөн уңайлы һауа шарттары тыуыуға ҡарап, апрелдә башланасаҡ, уға тиклем иһә һәр төрлө әҙерлек, шул иҫәптән норматив-хоҡуҡ документтарын булдырыу эштәре алып барыласаҡ. Тукталҡа хаҡтары хаҡында һорауҙарға яуап биреп, бөтөн булған иҫәпләүҙәрҙән һуң ул әлегә сәғәтенә 40 һумдан билдәләнә, ләкин киләсәктә эш барышында уның үҙгәреп китеүе лә ихтимал. Шуға күрә тукталыу урындары тулыуға ҡарап, үҙгәреүсән тариф индереү ҙә ҡарала.

Түләүле тукталҡалар Рәсәйҙең бөтөн эре ҡалаларында ла ғәмәлгә индерелде. Шуларҙың миҫалында түләргә теләмәгән водителдәрҙең күп булыуы, ошо йәһәттән ниндәй саралар ҡаралыуы менән ҡыҙыҡһыныусыларға яуап: түләүле парковкаларҙың эше тукталыуҙы йөрөп торасаҡ патруль машиналар, видеокамералар, шул уҡ ваҡытта планшет һәм күҙәтеү камералары файҙаланыусы тикшереүсе-контролерҙар бригадалары тарафынан тәьмин ителәсәк. Түләүле тукталҡаларҙан алынған килем ошо биләмәләрҙе тотоу һәм ҡарау өсөн файҙаланыласаҡ. Ҡайһы берәүҙәр түләүҙән ҡасып, машиналарын ситкә, мәсәлән, яҡындағы торлаҡ йорттар ихатаһына ҡуя башламаҫмы, тигән һорау урынлы. Бындай осраҡтарҙы иҫкәртеү ҡала планлаштырыу хеҙмәтенең системалы эшенә бәйле буласаҡ. Хәҙер бигүк уңайлы булмаған урындарҙа күп кимәлле паркингтар асыу буйынса ла проекттар эшләнә. Шул уҡ ваҡытта ҡала үҙәгендә эшләй башлаған, ләкин яртылаш ҡына тулы бушлай паркингтар ҙа бар. Ихаталарға килгәндә, унда йәшәүселәр үҙ йорттары янына машиналарын бушлай ҡуя, әлбиттә. Үкенескә күрә, башҡа ҡалаларҙан айырмалы, Өфөнөң йорт ихаталары биләмәләре өсөн йорт милекселәре яуаплылыҡ алмаған. Бының өсөн йорт территорияһына межалау үткәреп, уны кадастр иҫәбенә ҡуйғанда, был биләмәләргә машина ҡуйыу ҙа, тәбиғи, түләүлегә әйләнәсәк. Һәр хәлдә муниципалитет күп фатирлы йорттар милекселәренә ихаталарын кәртәләп алып, шлагбаум ҡуйырға ярҙам итергә һәр саҡ әҙер.

Әйткәндәй, БР юл хәрәкәтен ойоштороу тураһында законға ярашлы, тукталыу урынын бушлай 20 минуттан да артыҡ биләргә рөхсәт ителмәй. Машина ҡуйыу урындары иртәнге сәғәт 7-нән киске 9-ға тиклем түләүле буласаҡ. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, инвалидтар һәм уларҙы оҙатып йөрөүселәр, махсус (янғын һағы, полиция, тиҙ ярҙам) хеҙмәт машиналары, күп балалы ғаиләләр һәм электромобилдәр өсөн тукталҡа түләүһеҙ.

ҠЫҪҠАСА

# СӘСКӘ ҮҪТЕРЕРГӘ ӨЙРӘТӘЛӘР

✓ Баш ҡала һөнәр һайлау буйынса беренсе тәжрибә майҙансығы барлыҡҡа килде. Унда уҡыусылар заманса технологиялар ярҙамында үҫемлек һәм сәскә үҫтерергә өйрәнә. Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы гранты конкурсы еңеүсеһе булған был проект "Йәшел лаборатория" тәрбиә-белем биреү кинлеге" проекты сиктәрендә эшләй. Грант иҫәбенә лаборатория өсөн кәрәкле йыһаздар, компьютер программаһы, заманса ҡоралдар, шулай уҡ заманса һәм интеллектуаль плантациялар һатып алына. Гидропоника - ул үҫемлектәрҙе тупраҡһыҙ үҫтереү ысулы. Үҫемлектәр барлыҡ кәрәкле матдәләрҙе һығарыу аша ала. Был ысул яңы түгел, әммә ул - аграр сәнәғәттең киләсәге. Грант ярҙамында уҡыусылар үҫемлектәрҙе үҫтереү өлкәһендә үҙҙәренең тикшеренеүҙәрен тәрәнерәк итеп үткәреү мөмкинлегенә эйә. Проектта баш ҡаланың 7-10-сы синыфтарынан 100 уҡыусы ҡатнаша. Улар хеҙмәт баҙарында абруйлы һаналған, лайыҡлы баһаланған ландшафт дизайнеры һөнәре менән ғәмәлдә таныша. Ойоштороусылар уҡыусыларҙы лаборатория эшендә түбәндәге адрес буйынса ҡатнашырға саҡыра: Өфө ҡалаһы, Р. Зорге урамы, 17/3.

✓ Һикһәндән ашыу сабый Өфөнөң яңы тыуған балалар өсөн ковид-госпитале табиптары аша үткән. Бөгөн клиникала 40 сирле дауалана. 17-се ҡала клиник дауаханаһының баш табибы урынбаҫары Регина Фёдорова һүҙҙәренсә, дауахана ҡарамағындағы яңы тыуған сабыйҙар өсөн инфекция бүлеге 2021 йылдың августында асылған. "Йәй аҙағында "дельта" штамы тарала башлағас, республикабыҙҙа балалар, шул иҫәптән яңы тыуған сабыйҙар араһында коронавирус инфекцияһы менән ауырыуҙың артыуы күҙәтелде, - тип һөйләне Регина Фёдорова. - Балалар күп осраҡта ғаиләлә йоҡтора, һәр кем сирҙе төрлөсә үткәрә. Шуныһы ҡыуаныслы: йөш сабыйҙар араһында ковидтан бер үлем осрағы ла юҡ". Ошо көндәрҙә дауахана Рәсәй Хөкүмәте бойороғо һәм Башҡортостан Башлығы Указы сиктәрендә яңы медицина ҡоралдары: үпкәне яһалма елләтеү аппараттары, инфузоматтар, Omron небулайзерҙары, һауа дымландырғыстар алды.

✓ Евразия китапханаһы быйыл августа төҙөлә башлаясаҡ. Был хаҡта республиканың капиталь төҙөлөш идаралығы етәксеһе Руслан Цагельник белдерҙе. Башҡорт тирмәһе рәүешендәге бина Аҡ йорт һәм Һуғыш ветерандары госпитале араһында урынлашасаҡ. "Евразия китапханаһы күп функциялы объект, республика масштабындағы вәкиллекле сараларҙы үткәреү урыны, Өфөнөң бер биҙәге булырға тейеш, - ти Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Фасадтың төҫөн, бина витраждарын һәм уның биҙәлешен уйларға кәрәк". Бынан тыш, подрядсыға яңы китапхана эргәһендәге Зыя Нурыев исемендәге скверҙы төҙөкләндерергә лә кәрәк буласаҡ. Майҙа иһә Спорт көрәше үҙәге төҙөлә башлаясаҡ. Ул федераль һәм донъя кимәлендәге бералыштар үткәреүҙән тыш, башҡа спорт төрҙәре буйынса турнирҙар үткәреү өсөн дә майҙансыҡ булырға тейеш.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ЯҢЫРТЫЛА...



**Өфөнөң Дим районында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шәхси пассажир ташыусы "Автомиг" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең эше менән танышты. Компания майҙансығында "Лотос" маркалы ҙур класлы иҙәне түбән урынлашҡан ҡала автобусы презентацияланды.**

Был автобустарҙы "РариТЕК" холдингы етештерә. LOTOS 105 тәбиғи газда эшләй, экономиялы һәм һөҙөмтәле двигателгә һәм ныҡлы шассиға эйә, корпусы дизайн һәм эргономика тармағында перспективалы технологиялар һәм алдынғы йүнәлештәрҙе иҫәпкә алып эшләнгән. Һыйҙырышлылығы - 92 пассажирға тиклем. Яңы автобустар USB-розеткалар, йылытҡыстар, климатты контролдә тотоу системаһы менән йыһазландырылған, хәрәкәте сикле категория өсөн майҙансығы бар. 2021 йылдың декабренән 258-се "Дим - Инорс" маршруты буйынса 35 автобус йөрөй. 14 февралдән тағы ла 35 яңы автобус Өфө юлдарына сыҡты.

Өфө юлдарынан иҫке ПАЗиктарҙы алыу тураһында ҡарар күп шау-шыу һәм бәхәстәр тыуҙырғанын барыһы ла хәтерләйҙер. "Өфөбөҙ, ысынлап та, урамдары буйлап йөрөгән автобустар паркының яңы һәм заманса булыуына лайыҡлы, тип иҫәпләйем. Йыл аҙағына тиклем "Башавтотранс" тағы ла 77 ҙур автобусҡа эйә буласаҡ, яңы техниканы шәхси хужалар һатып аласаҡ, - тине республика Башлығы. - Беҙ Башҡортостанда транспорт реформаһының сираттағы мөһим этабын башланыҡ - пассажирҙарҙы ташыу графигын үтәү, хәрәкәт интервалын боҙмау, ҡулаҡсаһыҙ түләү формаларын ҡабул итеү, дөйөм алғанда пассажирҙарҙы әҙәпле һәм заманса хеҙмәтләндереү".

Төбәк башлығы водителдәрҙең хеҙмәт шарттары һәм уларҙың эш хаҡы менән ҡыҙыҡһынды. Компания вәкилдәре әйтеүенсә, һәр автобусҡа ике водитель беркетелгән, улар айына уртаса 50-60 мең һум ала. "Яңы автобустар "Башҡортостан транспорты" тип тамғалана. Әгәр яҙыу зәбәржәт төҫөндә булһа - шәхси ташыусы, әгәр зәңгәр булһа - дәүләт автобусы, - тине Радий Хәбиров. - Беҙ быны халыҡ транспорттың хужаһын белеп торһон өсөн эшләнек".

**Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Таҙарыныу

❖ Организмды таҙартыу өсөн бер ус ҡайын алҡаһын ваҡлап, 0,5 литр араҡы ҡойорға һәм 7 көн төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәне көнөнә 1-әр ҡалаҡ эсергә (иртәнсәк һәм киском). Был рәүешле төнәтмә бөткәнсе дауаланырға. Ул бөтә организмды таҙарта, бигерәк тә ҡурылдай, үпкә, быуындар һәм ҡан тамырҙарын.

❖ Был үләндәр төнәтмәһе организмды витаминдар менән туйындыра һәм көс өҫтәй. Уны әҙерләү өсөн тигеҙ өлөштә шифалы ромашка, меңъяпраҡ, шиңмәсгөл һәм ҡайын бөрөләре кәрәк. Килеп сыҡҡан йыйылманың 2 ҡалағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға һәм 20 минут парҙа тоторға. Шунан һыуынғансы төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәгә 2 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға. Был төнәтмәне 1 ай дауамында ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә.

### Ҡан баҫымы

❖ Ҡан баҫымы түбән булһа, уны күтәреү өсөн 1 лимонды йыуып, әрсемәйсә ит турағыста ваҡларға. Шунда уҡ 400 грамм күрәгә үткәрергә. Ҡатышмаға 3-4 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға. Был дауаны көнөнә бер нисә тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

### Ҡабаҡ

❖ Ҡабаҡ (тыква) бик файҙалы йәшелсә. Унда калий, баҡыр, фтор, фосфор, тимер, цинк, каротин кеүек организмға бик файҙалы матдәләр бар. Ҡабаҡтан бутҡа, ҡоймаҡ бешерергә, кәтлиткә ҡушырға, бал һәм һут ҡайнатырға мөмкин. Орлоҡтарын да ташламаҫҡа: телевизор ҡарағандан йәки компьютерҙа эшләгәндән талған күҙҙәр өсөн файҙалы кәнфит эшләргә була. Бының өсөн ярты килограмм таҙартылған ҡабаҡ орлоғон ит турағыста ваҡларға. 1 стакан ҡуйы бал ҡушырға, яҡшылап болғарға һәм әстерхан сәтләүегә ҙурлығындағы кәнфиттәр әүәләп, һыуытҡысҡа ҡуйырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашағандан һуң 1-әр кәнфит менән һыйланырға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙӨН ТАП!*



# ЙОРТ ЙЫҺАЗДАРЫ

Башҡорт ауылдарында боронғо өлгөләр буйынса йорт йыһаздары эшләгән балта оҫталарын XX быуаттың 50-60-сы йылдарында ла осратырға мөмкин булған. 1960 йылда Татарстандың Мөслим районындағы Тамъян башҡорт ауылында беҙ ағас оҫтаһы Минһажев өйөндә һырланған өҫтәл артында ултырҙыҡ. Уның ҡыҫанында ғына түгел, тояҡтарындағы семәре лә ҡулдан эшләнгән ине. Һырлау боронғо ысулға нигеҙләнеп, бөтә ерлек буйлап ҡабарынҡы биҙәк семәрләнгән. Ҡыяҡ япраҡтар ике яҡтан уйылып киткән.

Ағас карауаттарҙы ла яҡынса шул стилдә - ҡабарынҡы, скульптура биҙәк менән матурлағандар. Улар тәү сиратта йәш кейәү-кәләш өсөн тәғәйенләнгән. Карауаттарҙы артыҡ бейек итмәй, баштарын семәрле итеп эшләгәндәр. Көндөҙ түшәк йыйып алынған, таҡта түшәменә балаҫ ябып ҡуйғандар, ә баштарын (спинка) кеше күрерлек итеп асыҡ ҡалдырғандар.

XIX быуат урталарында йәшәгән тикшеренеүсе А.П. Архипов нуғайҙарҙың "ғаилә карауатын" (орындыҡ) һүрәтләгәндә уның үҙенсәлектәрен дә телгә ала: "тояҡтары тәпәш, оҙон таяуҙарының йомро баштары һарланған; өс яҡтан рәшәткә һәм бәләкәй яңдауырҙар йәки тар баштар һәм шундай уҡ ике арҡыры таҡта".

Боронғо башҡорт карауаттары тураһында мәғлүмәттәр аҙ. XX быуаттағы өйҙәрҙәге бейек карауаттарҙың ҡайһы бер деталдәре (баштары тәпәш, семәрле булыуы, рәшәткәле бүлгеләре) элекке форманан ҡалған, тип фаразларға урын бар. Шундай боронғоларына 1971 йылда Бөрйән районы Әбделмәмбәт ауылында осраҡкан карауат бик оҡшаған. Уның ҡыҫаны ауыр, түшәм таҡталары ырмауға индереп һалынған. Карауат баштары (спинки) үҙ-ара ике арҡыры таяҡ менән тоташтырылған дүрткел бурсаларҙан тора, улар араһында дүрт ҡалын һырланған таҡта ҡағылған. Карауат баштарының мөйөштәрҙәге остары горизонталь уйымдар менән өс ҡатҡа бүленгән һәм түбәһе ҡырҡылған пирамида рәүешендә осланған.



*Ағас карауат. Бөрйән районының Әбделмәмбәт ауылы, 1971 й. Р.М. Солтанов фотоһы*

Татарстан территорияһына ингән Тамъян ауылында (төньяҡ-көнбайыш башҡорттары) карауат баштары ҡатмарлы һәм юғары сәнғәт кимәлендәге семәрле үрнәктәр бар. Киҫелеше түңәрәк йәки шаҡмаҡ булған терәү таяуҙары бында бормалы һырҙар менән биҙәлгән. Терәү таяуҙары буйлап бер киңәйеп, бер тарайып китә һәм тура мөйөшкә йәки киреһенсә түңәрәк формаға күсә. Түңәрәк таяуҙар шаҡмаҡ "ҡапҡас" менән осланған, ә тура мөйөшләләре баштүбән әйләнгән киҫелгән бәләкәй пирамида һәм ярым түңәрәк формаһында. Карауат баштарының арҡыры таҡталары зауыҡлы итеп биҙәлгән. Уның йөҙөндә ярым түңәрәк-көмбәҙҙәр рәүешендәге ҡабарынҡы биҙәктәр рәте һуҙылған. Ярымтүңәрәктәр араһында икенсе ҡат барлыҡҡа килтереп дүрт япраҡлы ыҡсым ғына һабаҡтар һәм ялпаҡ түңәрәктәр урынлашҡан. Карауат баштарының рәшәткәһе бер осраҡта ҡулсаларҙан, икенсе осраҡта бергә ҡушылған яртылаш сәскәләрҙән торған. Уның ерлеге зәңгәр, биҙәге ҡара төҫкә буялған. Ҡабарынҡы биҙәк, рәшәткә деталдәре һәм һырлы таяу баштары төҫ менән айырып ҡуйылған.



*Һырлы карауат башы. Татарстандың Мөслим районы Тамъян ауылы. 1960 й. Г. И. Мөхәмәтшин фотоһы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*АФАРИН!*

# ЯРЫШТЫЛАР, ЕҢДЕЛӘР...



**Яҙҙың беренсе көнөндә баш ҡала педагогтарының һөнәри оҫталыҡ конкурстарына йомғаҡ яһалды. Ҡала мәҙәниәт һарайы сәхнәһенә был юлы Өфөнөң иң алдынғы 69 уҡытыусыһы күтәрелде. Уларҙы баш ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Ратмир Мәүлиев тәбрикләне.**

Ун һигеҙенсе тапҡыр уҙғарылған "Башҡортостандың баш ҡалаһының башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы - 2022" конкурсында быйыл 10 педагог ҡатнашҡан. Баһалама ағзалары билдәләүенсә, баш ҡала уҡытыусылары йылдағыса бик юғары һөнәри оҫталыҡ күрһәткән. Улар араһынан "Смарт" 2-се Республика полилингваль күп профилле гимназияһынан Ләйсән Сафиуллина, 107-се лицейҙан Мирас Ишдәүләтов, 119-сы мәктәптән Гөлнур Кашапова, Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһынан Динара Латипова һәм 122-се Башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы Гөлшат Лоҡманова конкурстың лауреаттары тип танылды. Ә бына Башҡортостан кимәлендә Өфө ҡалаһы намыҫын Мирас Ишдәүләтов яҡлаясаҡ, сөнки тап ул абсолют еңеүсе исеменә лайыҡ булды. Ул баш ҡаланың 107-се лицейында 2-9-сы синыф уҡыусыларына башҡорт дәүләт телен өйрәтә һәм башланғыс синыфтарҙа туған тел булараҡ уҡыта. "Был конкурста тәүге тапҡыр ҡатнашыуым һәм бында ысынлап та бик тәжрибәле, үҙ көсөнә ышанған педагогтар үҙ-ара һынау тотто, - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты Мирас Рәшит улы. - Методик оҫтахана, таныш булмаған синыфта дәрес биреү, оҫталыҡ дәресе кеүек һынауҙар тоттоҡ. Һуңғыһында мин тел, мәҙәниәт һәм тарих араһындағы бәйләнештәрҙе күҙ уңында тотоп, тәжрибәм менән уртаҡлаштым".

Ә бына егерме бишенсе тапҡыр уҙғарылған "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы - 2022" конкурсында быйыл барлығы 40 уҡытыусы ҡатнашҡан. Улар араһында абсолют чемпион исемен 39-сы гимназияның инглиз теле уҡытыусыһы Вера Серавкина яуланы. Конкурс сиктәрендәге башҡа төрлө номинацияларҙа ла еңеүселәр билдәләнде. Тәү сиратта "Башҡортостандың баш ҡалаһының йыл уҡытыусыһы" конкурсында 27-се мәктәптең тарих һәм йәмғиәтте өйрәнеү уҡытыусыһы Люция Вәхитова беренсе урын алды. "Педагогик дебют" номинацияһында 112-се мәктәптең башланғыс синыф уҡытыусыһы Анастасия Ногина, "Башҡортостандың баш ҡалаһының рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" - М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы уҡытыусыһы Эльмира Тазиева билдәләнде.

Өҫтәмә белем биреү педагогтары араһында үткәрелгән "Йөрәгемде балаларға бирәм" конкурсында Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, күренекле бейеүсе Урал Мортазин "Глобус" балалар ижады үҙәге"ндәге эш тәжрибәһен уртаҡлашып, өсөнсө урынды яуланы. "Мин өҫтәмә дәрестәр алып барған үҙәк баш ҡаланың Совет районында урынлашҡан, унда бына инде 4-се йыл "Төньяҡ амурҙары" тигән берләшмәне етәкләйем һәм балаларҙы милли яндан уҡ атырға өйрәтәм. Был бик үҙенсәлекле шөғөл, сөнки ул спорт та, милләтеңде яратыу, тарихыңды белеү ҙә һәм шуны балаларға тапшырыу ҙа. Беҙҙең түңәрәктә Өфөлә йәшәгән бик күп милләт балалары ихлас шөғөлләнә. Һәр кемде нәҡ уның ата-бабаларының тарихы, мәҙәниәте менән таныштырырға тырышам. Балалар тәү сиратта үҙ милли кейемдәрен тегеп кейә һәм башҡорттарҙың боронғо оҫталыҡ нигеҙҙәренә төшөнә башлай. Бына ошо юҫыҡтағы эш тәжрибәм, балаларҙы халҡыбыҙҙың милли яндан уҡ атыу кеүек боронғо шөғөлөнә ылыҡтырыу серҙәре менән уртаҡлаштым да инде был конкурста. Әлеге көндә дәрестәргә 10-дан 18 йәшкә тиклемге 45-кә яҡын бала йөрөй һәм ярайһы ғына уңыштарға өлгәшеп, ярыштарға сығырға әҙерләнә", - ти Урал Хәйрулла улы.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*БӘЙГЕЛӘР*

# БАШҠОРТ ҒАИЛӘҺЕ



**Баш ҡалала "Етегән" республика байрамы сиктәрендә ойошторолған "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе - 2022" асыҡ республика конкурсының финал этабы һәм еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы үтте. Өс этаптан торған конкурстың һайлау турҙары республиканың ете төбәгендә уҙғарылды, уларҙа республикала һәм Рәсәйҙең субъекттарында йәшәгән башҡорт ғаиләләре ҡатнашты.**

Ғаилә институты абруйын нығытыуға, халыҡты республиканың мәҙәни мөхитенә йәлеп итеүгә, әхлаҡи-эстетик нигеҙ булдырыуға, башҡорт фольклорын һаҡлау һәм үҫтереүгә, ғаилә ҡиммәттәрен популярлаштырыуға йүнәлтелгән проект финалында "Ғаилә ҡиммәттәре", "Ғаилә кәсебе", "Ғаилә ижады" номинациялары буйынса республиканың төрлө район-ҡалаларынан, Ҡурған өлкәһенән, Ханты-Манси автономиялы округы-Югранан бөтәһе 23 ғаилә көс һынашты. Сара халҡыбыҙҙың рухлы, уңған һәм маҡсатлы ғаиләләре күп булыуын тағы бер иҫбатланы. Бөтә еңеүселәр ҙә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының дипломдары һәм ҡиммәтле бүләктәр менән билдәләнде. Ә гран-призы Күгәрсен районында йәшәгән Хөснуллиндар ғаиләһе яуланы һәм 100 мең һум аҡсаға лайыҡ булды. Ғаилә башлығы Урал Хөснуллин - шәхси эшҡыуар, музыкаль уйын ҡоралдары эшләй, ҡурай, думбыра яһай. Маҡсаты - милли музыка ҡоралдарыбыҙҙы мөмкин тиклем халыҡҡа күберәк таратыу. Әйткәндәй, Уралдың атаһы - республикала исеме киң билдәле оҫта Рәмил Хөснуллин. Уны Күгәрсен районында ағас оҫтаһы тип кенә түгел, ҡурай, думбыра эшләгән уникаль шәхес итеп беләләр. Урал Рәмил улы атаһының эшен дауам итә, улар бергәләп халыҡ уйын ҡоралдарын эшләйҙәр.

"Ғаилә ҡиммәттәре" номинацияһында беренсе урынды - Нефтекаманан Шәрәфетдиновтар, икенсене - Салауат ҡалаһынан Ғәйнуллиндар, өсөнсө урынды Сибайҙан Хәсәновтар яуланы. "Ғаилә ижады" номинацияһында беренсе урынды Ишембай районынан Әҙелбаевтар, икенсе урынды - Туймазы ҡалаһынан Ибраһимовтар, өсөнсө урынды Ҡурған өлкәһенән Ғәлиевтар яуланы. Әйткәндәй, күрше өлкәнең Сафаҡул районында йәшәгән Роза һәм Нәркис Ғәлиевтарҙы урындағы халыҡ яҡшы белә, улар - сәхнә йондоҙҙары, халыҡҡа йыр-моң таратыусылар. Дүрт балаға ғүмер бүләк иткәндәр. Улдары Салауат, Рауил, Марат, Уралға ла ата-әсәһенән йыр-моңға һөйөү күскән. Ҡурған өлкәһендә йәшәгән Ғәлиевтар йырҙар ижад итә, төрлө сәхнәләрҙә сығыш яһай, иң мөһиме - өлгөлө башҡорт ғаиләһе туған телен, моңон һаҡлап йәшәй. "Ғаилә кәсебе" номинацияһында иһә беренселекте Стәрлетамаҡтан Сөләймәновтар, икенсе урынды - Өфөнән Лоҡмановтар, өсөнсөнө Ҡариҙел районынан килгән Ғәлинуровтар алды.

Төп урындарҙан тыш, республиканың өлгөлө ғаиләләре "Бейеүсе ғаилә", "Моңло ғаилә", "Һөләтле ғаилә", "Мираҫлы ғаилә", "Егәрле ғаилә", "Маһир ғаилә", "Татыу ғаилә" һәм башҡа күркәм номинацияларҙа билдәләнде, бер кем дә иғтибарҙан ситтә ҡалманы. Уларҙың һәммәһен уртаҡ һыҙаттар - туған телгә, мәҙәниәткә, халҡыбыҙҙың тарихына тоғролоҡ, рухи нигеҙҙәренең ныҡлығы, маҡсатлылыҡ берләштерә.

**Гүзәлиә БАЛТАБАЕВА.**

*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# КҮБӘЛӘКТӘР, ТИЛӘҮҘӘР, ҠЫУАҠАНДАР -

## көнсығыш башҡорттары булабыҙ

Тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында көн иткән 12 башҡорт ырыуы исеменән 1733 йылда батшабикә Анна Иоанновна исеменә ебәрелгән үтенес хатында Әйле, Дыуан, Һарт, Һыҙғы, Өпәй, Һырҙы, Мырҙалар, Ҡаратаулы, Тырнаҡлы улустары менән бер ҡатар Түбәләҫ, Йылайыр, Алыс (писарь хаталы яҙмаған хәлдә, ошо исемдәге улустың ҡайһы ырыу башҡорттарыныҡы булыуын аныҡлауы ҡыйын) улустары ла күрһәтелә. Бында шуға иғтибар итеү фарыз: төньяҡ һәм көнсығыш башҡорт ырыуҙары һәр заманда ла бер-береһе менән тығыҙ бәйләнештә йәшәп, сәйәси-иҡтисади мәсьәләләрҙе бергәләшеп хәл итергә тырышҡан. Йәнә иғтибарға лайыҡ бер күренеш: урта быуаттарҙа Көньяҡ Уралдың көнсығыш яғы территорияһында атамалары монгол ҡәбиләләрендә лә һаҡланып ҡалған ҡыуаҡан, салйоғот (салъют), ҡуңрат, йылайыр (джалаир) һәм түбәләҫ ырыуҙары төркөмө ерләшә. Улар иҫәбенә Ҡатай түбәһенә ҡараған Ойрат (Уйрат) аймағы башҡорттарын да индерергә була.



Этногенетик тикшеренеүҙәр ҡыуаҡан башҡорттарында N1c1-M178 гаплотөркөмө өҫтөнлөк итеүен асыҡланы. Күбәләктәрҙең бер өлөшөнөң ошо уҡ генетик төркөмгә ҡарауы хаҡында алдараҡ яҙылғайны. Ошо гаплотөркөм кешеләренең тәү төйәге Байкал күле аръяғында, тарихи Монголия сиктәрендәге ерҙәрҙә булған. Шул уҡ гаплотөркөм яҡут-сахаларҙа, монголдарҙа, ҡаҙаҡтарҙа, венгрҙарҙа, башҡорттарҙың йәнәй һәм мең ырыуҙарында ла осрай.

Ҡыуаҡан ырыуы хәҙерге ваҡытта тамам тарҡалып бөтөп барған этнотөркөмдәрҙән һанала, ошо ырыуға ҡараған башҡорттар күрше ырыуҙар ауылдарына (йәиһә ҡалаларға) күсеп китеп, ата-бабалары нигеҙ һалған ауылдарының күбеһе юҡҡа сыҡҡан. Ҡыуаҡан ауылдары исемлеге: Шәрип (Әүәз, Аҙнаш) - 2010 йылда 30 кеше йәшәгән, Байһаҡал - был ауыл юҡ инде, Буранғол - 2010 йылда 67 кеше теркәлгән, Иҡсан (Яңы Хөсәйен) -2010 йылда 2 кеше генә йәшәй, Күкәй - юҡҡа сыҡҡан, Ҡотоҡ (Ҡарағужа) - 230 кеше теркәлгән, Һөйтөмбәт (Аҙнаш, Шәрип) - 11 кеше Аҙнашта, Татлымбәт (Биксура) - 22 кеше, Ялсығол (Иҫергән) - 75 кеше, Ясин - был ауыл да XIX быуат урталарында юҡҡа сыҡҡан. Әлеге ваҡытта Ҡурған өлкәһенең Сафакүл районында Бикбирҙе (Ҡыуаҡан) ауылы бар, 2010 йылда унда 241 кеше иҫәптә тора. 1795 йылғы V ревизия материалдарында Ырымбур губернаһы Троицк өйәҙендә (хәҙерге Силәбе өлкәһенең Уй районы) ҡыуаҡандарҙың Мостай, Ҡарағужа, Килмәк (Төрмәт), Һөйөндөк, Һөләймән, Йоманғол ауылдары иҫәпкә алына, улар ҙа XIX быуатта юҡҡа сыға. Шуға ҡарамаҫтан, XX быуат башындағы Рәсәй революцияһынан һуң - Башҡортостан автономияһы барлыҡҡа килеп, күп ваҡыт та үтмәйенсә - телебеҙҙең төньяҡ-көнсығыш диалектының ҡыуаҡан һөйләше башҡорт әҙәби теленә нигеҙ итеп алына.

Күбәләк, ҡыуаҡан һәм тиләү ырыуы башҡорттары халҡыбыҙ мәҙәниәтен, мәғарифын, сәнғәтен, республикабыҙ иҡтисадын үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе, улар araһынан бик күп күренекле шәхестәр танылыу тапты.

Күбәләк ырыуы башҡорттарының арҙаҡлылары: Әхмәр Аҙнабаев - филолог, дәүләт эшмәкәре, Абдулла Солтанов - йырсы, Башҡортостандың халыҡ артисы, Марат Минһажетдинов - ғалим-фольклорсы, Роза Аҡкучукова - Башҡортостандың халыҡ артисы, Яңыбай Әхмәтйәнов - Социалистик Хеҙмәт Геройы, Әфтәхетдинов Әхмәдин - яҙыусы, Ҡадир Мәғәфүров - ауыл хужалығы фәндәре докторы, профессор, Мәүлит Ямалетдинов - шағир, яҙыусы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Мөҡмин Фазлетдинов - Башҡортостандың атҡаҙанған агрономы, СССР Юғары Советы депутаты, Кәбир Ғүмәр (Вил Ғүмәров) - шағир, публицист, драматург, Әнүрә Миңлебаева - Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Урал Аҡкучуков - МВД ветераны, полковник, Роза Моратова - Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Наил Ғабдуллин - медицина фәндәре кандидаты, БР-ҙың һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған медицина хеҙмәткәре һәм башҡалар.

Тиләү ырыуының күренекле шәхестәре: Муса Мортазин - Ә.-З. Вәлидовтың арҡадашы, комбриг, Шәүрә Мортазина - театр режиссеры, РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ишмөхәмәт Ғәләүетдинов - филология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр Академияһының ағза-корреспонденты, Салауат Низаметдинов - композитор, Рәсәйҙең атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Әхәт Мортазин - Башҡортостан телевидениеһы һәм радиоһы дикторы, БР-ҙың атҡаҙанған артисы, Салауат Нухов - филология фәндәре докторы, БДУ профессоры, Нажия Аллаярова - йырсы, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ артисkaһы, Абрар Ғабдрахманов - композитор, БР-ҙың халыҡ артисы, Рәшиҙә Солтанова - дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Юлай Янбаев - биология фәндәре докторы, генетик, профессор, Лилиә Ғүмәрова - дәүләт эшмәкәре, Морат Лоҡманов - журналист, дин мәсьәләләре буйынса тапшырыуҙар алып барыусы, Луиза Фархшатова - тележурналист, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Муса Билалов - дәүләт эшмәкәре һәм башҡалар.

Ҡыуаҡан ырыуының арҙаҡлы заттары: Зәйнулла ишан Рәсүлев - бөйөк суфый шәйехе, билдәле дин әһеле, Абдрахман Рәсүлев - 1936 - 1950 йылдарҙа СССР-ҙың Европа өлөшө һәм Себер мосолмандарының Диниә назараты мөфтөйө, Хәйрулла Мортазин - физика-математика фәндәре докторы, БДУ профессоры, Ғәшүрә Ғәлимова - Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы, Риза Байгилдин - философия фәндәре кандидаты, хакимиәт эшмәкәре, Ринат Төлкөбаев - физика-математика фәндәре кандидаты, Урал Мортазин - профессиональ башҡорт бейеүсеһе, хореограф.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 6, 8-се һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

16-сы гв. атлы дивизияһынан һулдараҡ 15-се гв. атлы дивизияһы яугирҙары хәрәкәт итә, улар менән бәйләнеште өҙмәҫкә ҡушыла. Комдив патрондарҙы һаҡлап тотонорға, дошман һөжүм иткәндә, уға яҡынайып, ҡул һуғышына инергә бойора. Командирҙар, ҡар өҫтөндә йоҡлап ятҡан һуғышсыларын уятып, һуңғы алышҡа әйҙәй. Дөйөм ҡуҙғалыш башлана.

Ошо урында дивизияның хәрби табибы Александр Сарыгиндың алдараҡ иҫкә алынған хатынан өҙөк килтерәйек:

"Томан эсенән ҡышҡы һоро таң беленә башланы, көн болоҡһоу, йонсоу, болотло буласаҡ. Юлда яңыраҡ ҡына үтеп киткән автомашиналар эҙе күренеп ята. Юлды киҫеп сығып, саҡрым ярым самаһы үткәс, 400 - 500 метрҙар тирәһе алдараҡ, уң яҡта дошмандың 6 - 7 автомашинаһынан торған төркөмөн барыбыҙ ҙа күреп ҡалдыҡ. Машиналар тирәһендә кешеләр тиҙ-тиҙ йүгерешә башланы, ошо юҫыҡтан трассалы пулялар менән көслө пулемёт һәм автомат уты асылды. Шуның артынса уҡ колоннаның алғы яғында ла көслө пулемёт уты ишетелде, һул яҡтан орудиелар ата башланы, артта һәм уңдараҡ миналар һыҙғырышты. Кешеләр һәм аттар буталышты. Дошман беҙҙе бик яҡын аранан утҡа тотто, ул колоннала иң күп аттар һәм кешеләр тупланған урындарҙы һайлап тороп ата башланы. Трассалы пулялар боҙ ямғырылай яуҙы. Атлыларҙың күбеһе, ялан буйлап һибелеп китеп, артҡа боролдо, ә бәләкәйерәк бер төркөмө һулға табан, орудиелар атып торған, урман менән ҡапланған балкаға табан сабып китте. Мин, яраланған бер һалдаттың яраһын бәйләргә тип, атымдан төштөм.

Минең янымда аттар менән коноводым ғына тороп ҡалды, аҙаҡ беленеүенсә, аттарыбыҙҙың береһе лә ауыр яраланған ине. 1,5 - 2 минуттан тирә-яҡта, хәрәкәтһеҙ ҡалған кәүҙәләрҙән һәм ялан буйлап сабышып йөрөгән аттарҙан башҡа, бер ни ҙә ҡалманы. Мин дә, коноводым һәм яраланған һалдат менән, артҡа боролған атлылар артынан китергә ашыҡтым. Һулға табан айырылып киткән төркөм күҙҙән юғалды. Ул төркөмдә, уйлауымса, генерал-майор Шайморатов та булырға тейеш ине. 10 - 15 минутлап ваҡыт үтеүгә, мин артҡа боролған төркөмдө ҡыуып еттем, ул дивизия һәм корпус штабтары, штаб подразделениелары ҡалдыҡтарынан тора ине. Юлда булғанда дивизия штабы начальнигы, полковник Голенев һәм оператив бүлек начальнигы, майор Черников килеп етте. Генерал-майор Шайморатов яҙмышы хаҡында бер кем бер нәмә лә белмәй ине. Уның менән бергә уның адъютанты һәм һаҡсы взводы юғалды. Шулай итеп, корпус командиры генерал Борисовтың енәйәтсел күрһәтмәһе арҡаһында бик шәп кешеләр маҡсатҡа ярашһыҙ һәләк булды, матди часть, обоздар юғалтылды, башҡорт халҡының данлы улы, һөйөклө дивизия командиры, һоҡланғыс полководец, генерал-майор Шайморатов һәләк булды. Беҙҙең дивизиябыҙ өсөн ошондай ҙур юғалтыу айҡанлы уны аҙ ғына булһа ла белгән, ихлас көйөнмәгән бер генә лә һалдат һәм офицер булманы".

Күрәһең, хәрби табип А.А. Сарыгин Штеровка йүнәлешендә барған колоннаның артҡы яғындараҡ булған, улай булмаһа, ул үҙе лә һәләк булып ҡалыр ине. Ә бына политбүлек начальнигы урынбаҫары Сабир Рәхим улы Ҡадиров атлылар колоннаһының иң алдында барған комдив М.М. Шайморатов төркөмөнән бер аҙ арттараҡ ҡалған була ошо хәтәр мәлдә. Ул үҙенең хәтирәләр китабында шайморатовсыларҙың һуңғы үлемесле алышын бына ошолай тасуирлай:

"...Дошман фронтының алғы сиге - беҙҙән өс саҡрымдар самаһында. Артиллерияның артта ҡалыуы, һәр һуғышсыла ярты дисҡынан да артыҡ патрон булмауы генералды борсоно. Ләкин приказ алынған - уны үтәргә кәрәк. Разведчиктәр дошман ғәскәренең беҙҙе уратып алыу өсөн арттан ҡыҙыу хәрәкәт башлауын хәбәр итте. Гитлерсыларҙың беҙҙән алдараҡ оборонала ятыусы фронт частары ла беҙҙең бында икәнде яҡшы белә, нисек тә беҙҙән ҡотолоу яғын ҡарай, тимәк, ҡыҫҡыс араһында ҡалыу ҡурҡынысы көслө ине. Генерал штаб начальнигы И. И. Голеневҡа дивизияны ике колоннаға бүлергә әмер бирҙе. "Ивановка яҡлап йәйәүле колоннаны гвардия подполковнигы Фондеранцев, Петровский заводы, Штеревка яҡлап һул колоннаны Голенев үҙе алып бара, улар хәҙер үк хәрәкәт башлай. Штаб махсус ваҡ эскадрондары менән уртанан төшә. Беҙҙең һул яҡтан 15-се гвардия дивизияһы һөжүм итәсәк, корпус штабы беҙҙең колоннала бара, Фондеранцев - Ивановка ауылына, Голенев Николаевкаға сыға. Дошман ут асмай тороп, ут асмаҫҡа. Дошманға нисек тә яҡынараҡ барырға, беҙҙең бөтә көс - штык, приклад, ҡылыс", - тип ҡаты иҫкәртте.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы

**Әңгәмәсем кешеләрҙе ике төркөмгә бүлеүен белдерҙе: ҡыҙыҡ һәм ҡыҙыҡ булмаған кешеләр. Миңә ҡалһа, улар тағы ла кеше фекере буйынса һәм үҙ фекере менән йәшәүселәргә бүленә. Кеше фекерен тыңлаусылар "Кеше нимә әйтер, кеше нимә уйлар, насар уйлап ҡуймаһындар" һәм башҡа шундай тышҡы йогонто ауында сәбәләнә, ә үҙ фекере булғандарҙың үҙ донъяһы - улар бар гәмәлдәрендә лә ихлас, уларҙың күңелендә һаман да самими бала йәшәй, ул ихлас ҡыуана, илай, ҡайғыра, бөгөлөп төшә... һәм ҡабат һынын турайтып, ҡараштарын алға төбәп, сираттағы аҙымын яһай. Редакциябыҙ ҡунағы шағирә, журналист, яҙыусы, драматург, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре һәм өс егет әсәһе Тәнзилә ДӘҮЛӘТБИРҘИНА менән уның эске донъяһына, күңел кисерештәренә бәләкәй генә сәфәр ҡылабыҙ.**

# БЕРЕҺЕ ҺҮНҺӘ,

## ҡырҡ сыраҡлы ҡатын-ҡыҙ

**Һеҙҙе хисле, нескә күңелле ижад кешеһе тип беләбеҙ. Һәм ошо беҙ белгән ханым хаҡлы ялға сыҡҡас, ҡапыл социаль селтәрҙәрҙә ҡырыҫ Себер тарафтарынан Башҡортостанына сәләмдәр юллай башланы...**

- Аптыраған өйрәк арты менән һыуға сума, тиҙәр бит, аптыраған көндән ҡабул ителгән ҡарар ҙа булғандыр, яҙмышыма ла шулай яҙылғандыр, тип уйлайым, сөнки ғүмеремдә лә Себергә барырмын, унда эшләргә һаулығым да етер тип уйлап та ҡараманым. Ни тиһәң дә, йәш тә бара. Ә сығып китергә аварияға осраууым сәбәп булды. Машинаны ремонтларға күп аҡса талап итеплә ине, шуға уны ремонтлап торманым, ҡабаттан өр-яңы машина һатып алдым. Һуынан ғына уйлана башланым: барлыҡ аҡсам кредитҡа китеп торһа, артабан нисек йәшәргә? Шул саҡ башыма "Себергә барып эшләп ҡайтаймыммы икән?" тигән уй төштө. Үҙем ҡурҡам. "Себерҙә эшләүе нисек ул?" тип белешеп, кәңәш һорап, ауылдағы һеңлемә шылтыратҡайным, ул: "Һин бит ауыл ҡыҙы, эштән ҡурҡмайһың, уңғанһың, барып ҡара, оҡшатмаһаң, кире ҡайтырһың", - тигәс, тәүәккәлләп сыҡтым да киттем. Беренсе тапҡыр барғанда, башҡа һөнәрем булмағас, ашханала эшләнем.

Тәү тапҡырҙан һуң, башҡаса Себергә бармайым, тип ҡайттым. Әммә ҡулға мул аҡса эләгеүе лә оҡшап ҡалды. Унда бер айҙа эшләгән сумма өсөн бында ярты йыл тир түгергә кәрәк. Ҡабат сығып киттем. Былтыр йәйгеһен танышлыҡ буйынса диспетчер эшенә эләктем. Танышлыҡ менән барып эләктем, тигәс тә, тәүҙә укып, диплом алдым, шунан ғына эшләй башланым. Был һөнәр бик ҡатмарлы, бик ауыр, аҡыл да, өлгөрлөк тә, оҫталыҡ та, игтибар ҙа талап итә, сөнки елкәңдә барлыҡ транспорт маршруты өсөн яуаплылыҡ ята, "путевой лист"арҙа хата булырға тейеш түгел. Әммә минең был вазифала эшкә тотоноуым күңелһеҙ ваҡиғанан башланды. Тәүге эш урынымда ғәҙәттән тыш хәл булды: нефть ташыған цистерна эсендә бер егет шартланы, шуға был объекты япытылар. Ул ябылғас, икенсе урынға барып, шунда ике айҙан артыҡ эшләп ҡайттым. Уҡытыусы булыуым да ярҙам итә был эшемдә. Ир-егеттәргә уҡытыусы һымаҡмын. Ике "ялҡау" уҡыусым булды, чечен егеттәре. Путевка тултырғанда гел хаталы яҙалар. Ә бындай хаталы путевкалар бухгалтериянан кире ҡайтарыла. Документ тап-таҙа булырға тейеш. Хаталарын төҙәтеп, дөрөҫ яҙырға өйрәтеп тә ултырам. Йән көйһә лә, "опять двойка" тип, уйынға әйләндерергә тырышам. Уларға былай ҙа ҡыйын икәнен аңлап торам. Ҡыҫҡаһы, диспетчер дипломым булғас, хәҙер теләгән урында эшләй алам, эш табыу проблема түгел. Шуға әле уйлайым: ҡабат Себергә барырғамы, Мәскәү-Ҡазан юлы төҙөлөшөнә һәм Ленинград өлкәһенә саҡырҙылар - унда барырғамы...

**Хәҙер һин дә мин һөйләп ултыраһағыҙ ҙа, беренсе тапҡыр сығып киткәндә ҡурҡыткандыр бит?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, үҙем дә аңламай ҡалдым. Хәҙер иһә романтика артынан ҡыуыу булды инде был, тип әйтә алам. Бигерәк тә яҙыусы кешегә бындай тәжрибә кәрәк ул. Күп кеше менән дуҫлаштым, шундай матур, ихлас кешеләрҙе осраттым. Уларҙың һәр берене үҙе бер характер, үҙе бер персонаж. Уларҙы күҙәтеү, өйрәнеү ҡыҙыҡ.

Иң беренсе тапҡыр барғанда оялыу, ғәрләнеү тойғолары бар ине. Яҙыусы, дәүләт премияһы лауреаты булып Себергә сығып китеүемде ныҡ түбәнселек һананым. Шунан уйлайым: барыбыҙ ҙа кеше бит, барыбыҙҙың да лайыҡлы йәшәгеһе, ашағыһы, кейенгеһе, балаларға ярҙам иткеһе килә. Эштең ни ояты, ни ғәрлеге бар? Аҡсаң етмәйме ни, тип әйтеүселәр булды ул. Аҡса кемгә етһен? Эшкә килгәндә, дөрөҫөн әйтәм, эш ныҡ ауыр, йонсота, електе һура. Ҡайһы саҡта илап та алаһың...

**Ғөмүмән, тормошта йыш илайһығыҙмы?**

- Юҡ, йыш түгел. Илап ултырырға ваҡыт та юҡ. Себерҙә һағыныуҙан илата. Илаһаң да кешегә һиҙҙермәй, сер бирмәй йөрөйһең инде ул. Нимә генә тиһәң дә, барыбер һыҡ ҡыйын саҡтар була. Йоҡлар алдынан ғына күҙ йәштәренә ирек биреп алаһың. Әгәр һөйләшергә кеше булһа, еңелерәк. Ярай әле, ашнаҡсы ҡыҙҙар һәйбәт булды, ваҡыт булғанда улар менән аралаштым. Урамда дүрт эт бар ине, шулар менән рәхәтләнеп шаярып, һөйләшеп ала торғайным.

**Себер тиһәң, күптәр, шаяртыпмы, ысынлапмы, Башҡортостан халҡының яртыһы Себерҙә эшләй инде ул, ти. Был ысынлап та шулаймы? Улар ниндәй эштәрҙә эшләй, ғөмүмән, Себерҙә эшләүсе башҡорттарҙың дөйөм портреты ниндәй?**

- Тәүге эш урынымда - Арктикала ашханала күберәк башҡорт ҡатын-ҡыҙы эшләне. Улар хаҡында социаль селтәрҙәрҙә яҙҙым инде. Унда водителдәр Омск немецтары һәм татарҙар ине, әле эшләп ҡайтҡан еремдә башҡорттар күп. Шулай уҡ чечендар, дағстандар бар.

Себерҙә эшләүселәрҙең дөйөм портретына килгәндә - улар абруйлы, үҙҙәренең баһаһын белгән кешеләр. Үҙҙәрен тотоштары ла, ҡиәфәттәре лә башҡа. Беҙҙең башҡорт егеттәрен ныҡ ихтирам итәләр. Буйҙары бәләкәй генә булғандары ла бер ваҡытта ла үҙҙәрен дә ҡыйырһыттырмай, башҡаларҙы ҡыйырһытырға ла юл ҡуймай. Чечендар ҙа беҙҙең халыҡҡа ныҡ ихтирамлы. Дағстандар менән бер аҙ мөнәсәбәттәре көсөргәнешлерәк тойолдо, шулай ҙа дуҫлыҡ мөнәсәбәтен һаҡлайҙар. Хатта ниндәйҙер кимәлдә үҙеңде элекке Советтар Союзына эләккән кеүек хис итәһең, сөнки халыҡ-ара дуҫлыҡ ныҡ тойола. Ни тиһәң дә, Рәсәйҙә булһаҡ та, барыһы ла үҙенең тыуған еренән ситтә, шуға бер-береһенә ихтирамлы булып, ярҙам итергә генә торалар.

**Ни тиһәк тә, һеҙ - барыбер ижад кешеһе, ә илһам һинең ҡайҙа йөрөүеңдә, кем булып эшләүеңдә, бушағаныңды көтөп тормай...**

- Себерҙә эшләгәндә илһам килмәй. Бер илаҡ шиғыр яҙып ҡына Бәйләнештә селтәренә һалдым. Ҡырыҫ шарттарҙа илһам ҡайғыһы юҡ. Унда тере ҡалыу ҡайғыһы, йәшәү өсөн көрәш меһим. Ашхана-йәшәү вагонсығы-диспетчер вагонсығы өсмөйөшөндә тик йөрөйһөң. Ситкә китергә ярамай - хәүефле зона, йәшәгән территория кәртәләнеп алынған. Һыу насар, уны ҡырҙан килтерәләр. Һыу етеңкерәмәй. Ҡайсаҡ һыу юҡлыҡтан мунса ла инеп булмай. Мунса бар, ҡыҙҙарға айырым, егеттәргә айырым. Мунса тигәс тә, ул да шул вагонсыҡ инде. Тубыҡҡа тиклем һыуыҡ, аяҡтар өшөп тора. Арыта, йоҡо юҡ. Ике айҙан ашыу эшләнем, көнөнә 4-5 сәғәт кенә йоҡо эләгә.

Механик менән һөйләшеп китәбеҙ ҙә, уф, арыным, хәҙер ҡайтам да ятам да тормайым, тиһәм, "Тәнзилә, сабыр итегеҙ, концлагерҙарҙа ла бит түҙгәндәр, сыҙамағандар шунда уҡ бирешкән, үлгән", - ти. Шунан ғына ла Себерҙә ниндәй шарттар икәнен аңларға була, йәғни кеше үҙе теләп һөргөнгә бара. Бер көн дә ял юҡ. Элек тә Байкал-Амур магистрале кеүек төҙөлөштәр барған, әммә уларҙа шарттар күпкә яҡшы булған, сөнки уларҙы дәүләт финанслаған. Хәҙер бөтә нәмә бизнес ҡулына күсеп бөттө, улар бик күп нәмәлә экономия яһай. Тәүге эш урынымдағы ятаҡтың йыуыныу бүлмәһендәге көҙгөләр көлкө булмәһен хәтерләтә торғайны - брак менән яһалған салыш көҙгөләр. Хатта шунда ла экономия эшләп, списать ителгән көҙгөләр ҡуйғандар.

**Һеҙ бына тигән өс малай тәрбиәләп үҫтерҙегеҙ, башлыҡүҙле иттегеҙ. Улар әсәләренең ситкә сығып китеүен нисек ҡабул итте?**

- Улдарыма ҡарағанда килендәрем ауырыраҡ ҡабул итте быны, минең өсөн борсолдо. Малайҙарым, бигерәк тә иң кесеһе, әлбиттә, йәлләйҙәр, әммә минең холҡомдо белгәс, артыҡ аптырамайҙар ҙа, "Һин көслө кеше, әсәй, һин булдыраһың, тимәк, һиңә шулай кәрәк", ти ҙә ҡуялар. Әгәр тәүәккәлләп Себергә сығып китмәһәм, күп нәмә юғалтыр инем, тормоштоң күп яҡтарын белмәҫ инем, тип ҡуям. Әле 60-лаған кеше менән эшләнем, барыһы ла ир-ат. Мин ғүмер буйы ирҙәр араһында йәшәнем, ғаиләлә - атайымағайым, ирем, өс улым. Ағайым менән бергә үҫкәс, холҡом да егеттәрсә. Әгәр миндә ҡатын-ҡыҙ холҡо, нескәлек, нәфислек күберәк булһа, Себерҙә түҙмәҫ инем. Бында бары тик шул үҙемдең сыҙамлылығым, ҡаратаға йөрөүем ярҙам итә. Себерҙә бөтөнләй хәлең бөткән саҡтар була - шул ваҡытта эске резервыңды тотона башлайһың. Йөрәктең хәле бөтә башлаһа - сығып йүгерәһең, үҙеңде аямайынса гимнастика эшләйһең, сөнки хәрәкәт кәрәк. Әгәр шунда хәлем бөттө тип ятһаң, артыңа тибеп ҡайтарып та ебәрәләр. Унда үҙеңде йәлләргә, ауырырға ярамай. Диспетчер урыны - тәгәрмәсле вагонсыҡ, ултырғанда ла аҫтан ел бәреп тора. Шуға, мыжып, үҙемә пенопласт таптырҙым, сөнки пенопластың кәрәк икәнен Арктикала (тәүге эш урыны) уҡ аңлағайным инде. Пенопластһыҙ йоҡлап булмай, матрас аҫтына пенопласт һалмаһаң - туңаһың, инвалид булып ҡайтаһың. Үҙенде-үҙең хәстәрләмәһәң, берәү ҙә һине хәстәрләмәй. Ауырыһаң, үҙең алып барған дарыуҙарҙан башҡа бер ниндәй дарыу юҡ, ябай тонометр ҙа, табиптар ҙа юҡ. Дарыуҙарыңды тейәп барһаң да, сабырлыҡ, түҙемлек кәрәк. Бер көн дә тормай ҡайтып китеүселәр ҙә бар. Миңә ҡайтырға өс көн ҡалғас, бер егет килде. Барыһы ла һәйбәт, мин барыһын да беләм, тип ултыра. Иртән эшкә йоҡлап ҡалды. Туғыҙҙан 12-гә тиклем эшләне лә, ялҡты. Кадрҙар бүлегенә шылтыратты ла, мин ҡалмайым, таңғы алтынан киске 10-ға тиклем эшләй алмайым, тип ҡайтып китте.

Эшләгән егеттәр ҙә ныҡ сыҙамлы, һыуыҡтарҙа машина ремонтлап, уның аҫтында яталар. Иртән етенсе яртынан вахта автобусы менән эшкә китәләр. Ҡайһы саҡ автобус кисен һуңлап алып ҡайта. Рәхәтлектән йөрөмәй инде береһе лә, балаларын үҫтерергә, кемгә фатир ипотекаһын түләргә, һәм башҡа мохтажлыҡты ябырға аҡса кәрәк.

**Йәш коллегаларым менән һөйләшеп, шундай фекерҙә туҡталдыҡ: беҙгә рухыбыҙҙы нығытырға кәрәк, шул саҡта матди хәлебеҙ ҙә яҡшырыр, сәләмәт тә булырбыҙ. Бөгөн тәүге урында матди яҡ тора, рухиәтте бөтөнләй онотабыҙ, аҡса эшләйбеҙ тип сәләмәтлегебеҙҙе юғалтабыҙ... Ошо хаҡта һеҙҙең фекер?**

- Әгәр рухиәтте үҫтерһәләр, затлы заттарыбыҙ - яҙыусыларыбыҙ, йырсыларыбыҙ, ҡурайсыларыбыҙ һәм башҡалар Себерҙә йөрөмәҫ ине. Һәр хәлдә рухиәт кешенең үҙенән генә тормай, уны етәкселек тә аңларға тейеш. Рухиәтле кешеләр халыҡ араһында булып, халыҡты тағы ла нығыраҡ көслөрәк итер ине. Ниндәй генә милләт булмаһын, Себерҙә тик Аллаһы Тәғәләгә генә таяналар. Чечен, Дағстан егеттәре көн һайын намаҙ уҡый, етәкселек менән шулай килешелгән. Әллә ниндәй графиктар, режимдар төҙөп маташҡайны түрәләр, егеттәр, эшебеҙҙе ваҡытында эшләп өлгөрәбеҙ, беҙ намаҙыбыҙҙы боҙмайбыҙ, тине. Шуға күрә лә улар бик көслө, берҙәм. Таңдан тороп йоҡлап киткәнсе бер Аллаға һыйынаһың, белгән доғаларыңды уҡып йөрөйһөң. Шунһыҙ унда йәшәүе мөмкин түгел, сөнки ауыр юлдар, бәлә-ҡаза һағалап ҡына

тора. Барыһын да Аллаға тапшырып сығып китәм, тыныс күңел менән йөрөп ҡайтам, тормошома шөкөр итәм.

**Бер туктамай бер нисә ай эшләп ҡайттығыҙ, тыуған яҡҡа ҡайтҡас, арыуығыҙ ҡул менән һыпырып алғандай булдымы, әллә шул сыҙамлығығыҙ менән йөрөйһөгөҙмө?**

- Мин аҙ ғына эшләп, ныҡ арып ҡайттым, кемдер бит йылдар буйы эшләй. Бер ҡыҙ әйтә: ҡайтам да, бер кем менән дә һөйләшмәйем, телефондарҙы һүндереп ҡуям, сөнки әҙәм рәтенә кергәнсе ныҡ ауыр, ти. Климат та башҡа, режим да үҙгәрә. Шунда механиктың бер һүҙе гелән хәтергә килә - "усталость металла". Арыныҡ, тиһәң, ул, әлбиттә, хатта тимер ҙә арый, ти торғайны.

**Юҡҡа ғына, тормош - ул сәйәхәт, тимәйҙәр. Шулай уҡ аҡыллы кешеләр үҙҙәренең йәшәүен тойор өсөн күберәк** мыштары ла ҡыҙыҡ, үҙҙәре лә ҡыҙыҡтар, ҡалғандары ғәҙәти, бер типтағы кешеләр: тормошо һәүетемсә бара, аҡса эшләргә килгән, ғаиләһендә барыһы ла яҡшы. Ә ҡайһы берҙәре шул тиклем ҡатмарлы яҙмышлы. Бер гаишник бар ине, ул гаишниктарҙың психологияһын, бар нескәлектәрен һөйләне. Уныһы үҙе бер хикәйә. Уның һөйләгәндәрен тыңламаһам, мин уларҙы аңламаҫ инем.

Хәҙер минең бындағы тормошта ла, Себер менән дә бәйле үҙ геройҙарым, персонаждарым бар, мин уларҙы ситтән күҙәтәм, уларҙың яҙмышын өйрәнәм. Сер итеп кенә әйткәндә, романға материал әҙерләйем. Вахта тормошон һәр күҙәнәгем менән тойоп яҙғым килә, яҙыуы ла енелерәк буласаҡ, тип уйлайым.

**Һеҙҙең дә яҙмышығыҙ ҡыҙыклы һәм күптәрҙең иғтибар үҙәгендә булды. Шунан һуң да йөрьәт итеп, сит-ят ерҙә,** нән йәшәүе ауыр. Һөҙөмтәлә балаларға ауыр күңел йәрәхәте һалдылар. Балаларҙы ҡотҡарам тип тә айырылыштым. Айыуҙан ҡасҡан - бүрегә, тигән һымаҡ килеп сыкты икенсе никахым. Шуға ҡарамаҫтан, барлыҡ ир-атты ла бер иш тип баһаламайым. Ир-атҡа ихтирамым ҙур, сөнки бик абруйлы ғаиләлә үҫтем. Атайым менән әсәйем 67 йыл бергә йәшәне, үҙемдең ағайҙарым тәртипле, тәрбиәле, иманлы булғас, донъяла ир-ат араһында ла аҡыллы, абруйлы, ҡатын-ҡыҙҙы хөрмәт иткән, ғаиләһе өсөн йән атып торған кешеләрҙең күберәк булыуына инанам. Әммә рухи йәһәттән ҡатын-ҡыҙ көслөрәк икәнен аңланым.

**Йыш ғашиҡ булаһығыҙмы? Әллә мөхәббәт берәү генә буламы?**

- Юҡ, йыш ғашиҡ булмайым. Әммә мөхәббәт берәү генә була, тигәндәре менән дә килешмәйем. Яҙмышына тын-ҡыҙ мөнәсәбәте генә түгел бит, ул киң ҡырлы. Хатта ир-егеткә ғашиҡ булғанда ла үҙенде юғалтырға тейеш түгелһең. Әңгәмә башында хатта эттәр тураһында һөйләгәндә лә илай яҙҙым бит инде. Һағындыралар, уларҙы йөрәк ялы, тип ярата торғайным.

**Улайһа, эттәр тураһында ла һөйләшәйек: ситтә булған күптәрҙән шундай фекер ишетергә тура килгәне бар: ситтә хатта ауылыңдың эте лә һағындыра. Ә бит күптәр беҙҙең кесе дуҫтарыбыҙҙы бик яратып бармай...**

- Мин бәләкәйҙән мал-тыуарҙы ныҡ яраттым. Хатта дрессировщик булғым килә торғайны. Быҙау, бәрәстәрҙе, башҡа хайуандарҙы өйрәтеп, әйәләштереп йөрөнөм. Өйҙә ҡап-ҡара ғына бесәйем бар, уны һағынып һыҙланым. Себерҙә берәй ҡара әйбер ятһа, күҙемә ул бесәйем булып күренә лә ҡуя. Урамға сыҡһам, дүрт эт ян-яҡтан килеп һыры-

**Тормош - театр, беҙ унда актерҙар, тигән билдәләмә менән килешәһегеҙме?**

- Себерҙә классиктың хаҡлы икәнлеген аңланым. Мин унда үҙемә ситтән ҡарарға өйрәндем. Унда мин - мин түгел. Ниндәйҙер уйын бара, театр һәм мин шунда актриса, үҙ ролемде башҡарып йөрөйөм кеүек. Төрлө хәл-торош килеп сыға, һәм мин уларҙы йырып сығырға тейешмен. Бында минең дипломат булыуым, конфликтҡа инмәүем, тормошто ыңғай ҡабул итеүем ныҡ ярҙам итә. Ә Башҡортостанға ҡайтһам, мин ҡабат үҙемә әйләнәм. Әйтеүемсә, Себерҙә һинең маршрутың да бер үк, аралашҡан кешеләрең дә бер үк. Бында таныштарың, туғандарың, күрше-күләнең программаңды, нисектер, үҙгәртеп, яңыртып ебәрә, һинең тормошоң менән үрелеп бара. Ә ситтә һин бер үҙең, бер кемең дә юҡ, шуға ирекһеҙҙән үҙенә ситтән ҡарай башлайһың.

# ИКЕНСЕҺЕ ЯНА:

## шуға ла һынмай



**сәйәхәт итергә тырыша. Бәлки, һеҙҙең был Себер эпопеяһы тормоштағы сәйәхәтегеҙҙең дауамылыр?**

- Бәлки... Дөрөҫөн әйткәндә, йәш саҡта мин Себергә бара алмаҫ инем: кейәүгә сыктым, балалар таптым, уларҙы аяҡҡа баҫтырҙым. Хәҙер миңә Аллаһы Тәғәлә мөмкинлек бирҙе, сөнки мин унда түл йыям, шул тиклем күп мәғлүмәт алам. Өфөлә ятып, бындай мәғлүмәт туплай алмаҫ инем. Әлегә яҙмай тороуым да шул түл йыйыуға бәйлелер - ваҡыты еткәс, ул йырып килеп сығасаҡ. Шельма тигән бер көсөк йөрөп ята, уның тураһында балалар өсөн хикәйә яҙыуҙы күҙаллайым.

***Яҙыусы, журналист, драматург булараҡ, миңә барыһы ла ҡыҙыҡ. Әллә журналист икәнем маңлайыма яҙылғанмы икән, тип аптырап та ҡуям. Кеше ултыра ла миңә яҙмышын һөйләй башлай. Хәҙер минең бындағы тормошта ла, Себер менән дә бәйле үҙ геройҙарым, персонаждарым да бар, мин уларҙы ситтән күҙәтәм, уларҙың яҙмышын өйрәнәм. Сер итеп кенә әйткәндә, романға материал әҙерләйем. Вахта тормошон һәр күҙәнәгем менән тойоп яҙғым килә, яҙыуы ла еңелерәк буласаҡ, тип уйлайым.***

ла. Бер-береһенән көнләшәләр, һуғышып китәләр, береһен яратһаң, икенсеһе үпкәләй... Шәп дуҫ-иптәш булды улар миңә. Егеттәр хатта аптыраны, баҡтиһәң, эттәр ҡатын-ҡыҙҙы бик яратып бөтмәй икән. Бер дагстанлы, нисек ул эттәр һеҙҙе ярата, улар ҡатын-ҡыҙға бик иғтибар итмәй, күберәк ир-егеттәргә ылыға, ти. Нишләптер хайуандарҙы ныҡ яратам, үлеп яратам, улар ҙа минең яратыуымды тойоп, мине ярата. Моғайын, үҙемдең ихласлығың, асыҡлығың, йылылығың, энергетикан уларға барып етәлер, улар шуны аңлап, үҙҙәре лә шулай яуап бирәләр.

Яҙыусы, журналист, драматург булараҡ, миңә барыһы ла ҡыҙыҡ. Әллә журналист икәнем маңлайыма яҙылғанмы икән, тип аптырап та ҡуям. Кеше ултыра ла миңә яҙмышын һөйләй башлай. Сит кеше менән икенсе тапҡыр әллә осрашаһың, әллә юҡ, тип, күңелдәрен бушаталармы, эс-серҙәрен һөйләп бөтәләр. Хәҙер кешеләрҙә ҡыҙыҡ һәм ҡыҙыҡ булмаған кешегә бүләм. 60 кешенең 3-4-е генә ҡыҙыҡ, яҙ-

**ир-ат араһында эшләргә сығып киткәнһегеҙ. Ғөмүмән, ир-атҡа күңелегеҙ ҡатманымы, ышанысығыҙ бөтмәнеме?**

- Юҡ, сөнки үҙем дә өс малайға әсәй бит. Ир-атты, ғөмүмән, бала тип ҡабул итәм. Тәртипле балалар була, тәртипһеҙ балалар була. Үҙемдең ирҙәрҙән унмауымдың сәбәбе әскелек булды бит инде. Әскелек бер ваҡытта ла яҡшыға алып бармай. Эскән кеше мерә яҙылған булмаһа, уны әллә күпме һаҡларға маташ - булмаһа, булмай ҙа ҡуя, мөхәббәтең юғала. Яҙған булһа, унан ҡасып та ҡотолоп булмай: ул ауырлыҡтарға ла бирешмәй, ара алыҫлығына ла ҡарамай. Бик йыш ғашиҡ булмаһам да, күңелемә ятҡан кеше бар икән... шиғыр яҙам инде. Күңелең еткәндә был донъялағы бөтөн нәмәгә ғашиҡ булырға була, мөхәббәт төшөнсәһе ир-егет менән ҡа-

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Тәнзилә Сәлихйән ҡыҙы, үҙенең һүҙҙәре менән әйткәндә, ҡыҙыҡ һәм үҙ фекере менән үҙенсә йәшәгән шәхес. Уның һәр ваҡыт шат күңелле, ихлас, мөләйем булыуын күреп, хатта, был ҡатындың тормошонда барыһы ла яҡшылыр, тип һығымта яһарға ла мөмкин. Әммә, ғәҙәттә, көслө кешеләр генә ауыр ваҡытта ла йылмайырға үҙендә көс таба. "Тормошоғоҙҙа ныҡ үкенгән, кирегә бороп булһа, икенселәй эшләр, үҙгәртер инем, тигән мәлегеҙ бармы?" - тип һорағанда, шағирәнең йөҙөнә һағыш күләгәһе төшөүен көткәйнем, әммә ул асылына тоғро ҡалып, ихлас итеп йылмайып, йырлап ебәрҙе лә, түбәндәгесә яуапланы: "Бар. Һуңғы биш йылда был турала йыш ҡабатлайым - сәнғәт юлынан китеп, йырсы булмағаныма ныҡ үкенәм. Сәнғәт училищеһының вокал бүлегенә һайлап алғандар, ике тапҡыр телеграмма ебәрҙеләр - мин шәп кеше Башҡорт дәүләт университетына киттем, шағирә булам, тип... Сәнғәт юлынан китһәм, опера йырсыһы булыр инем. Тормошомда иң ҙур үкенесем, ғүмеремдә ҙур хатам ошо булды. Шул тиклем сәхнәне, халыҡ алдында сығыш яһауҙы, кешеләрҙе ныҡ яратам. Ҡайһы саҡ хыялланып алам, әллә сәхнәгә сығырғамы, йырлай башларғамы икән, тип. Халыҡ йырҙарын барыһын да тиерлек беләм, әммә бер ваҡытта ла сәхнәлә йырлағаным юҡ. Сәхнәгә сыҡһам, үҙемде бөтөнләй икенсе төрлө тоям - ҡанаттар үҫкәндәй була..."**

**Хыялдарҙы тормошҡа ашырырға бер ваҡытта ла һуң түгел. Себер һалҡындары ҡанаттарын ғына тундырмаһын, Алла бойорһа, берәй ваҡыт йырсы Тәнзилә Дәүләтбирҙина менән дә әңгәмә ҡороробоҙ әле. Юҡҡа ғына ҡатын-ҡыҙҙың сырағы ҡырҡ, тимәйҙәр бит: береһе һүнә, береһе яна...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**




4

Түрә кешегә маҡтау ҡағыҙы артынан ҡыуыу тәҫ түгел. Ялтыр сабаҡты, ана, малай-шалай ярҙан ҡармаҡлаһын. Ә ул оҫта балыҡсы, йәшәгән суртандарҙы йылға сөмбәйенән кәмәлә йөҙөп аулаясаҡ.

- Улым, ваҡыты етте, өс йылдан ашыу мәғариф бүлеген етәкләйһең, ҡағыҙ ебәрергә кәрәк, - тине әсәһе лә.

Юлын өйрәтте. Тыуған ҡалаһы быйыл юбилейын билдәләй. Тимәк, сәбәп бар. Исемлеккә инеп өлгөрөргә генә кәрәк.

Идеал тәүҙә ҡала башлығы урынбаҫарының ҡылын тартып ҡараны:

- Йомош бар ине, - тине бик кеселекле, ипле генә. - Юбилей бит... Бүләкләүҙәр, наградалар өсөн ҡулай мәл...

- Дөрөҫ... Лайыҡлы уҡытыусыларҙың исемлеген әҙерләргә кәрәк алдан, - тип хупланы ҙур хужа уның һүҙҙәрен.

- Кәрәк, кәрәк... Эйе, уҡытыусылар... Мин үҙем дә...

- Үҙегеҙ лә онотма шул. Күптән билдәләгәнебеҙ юҡ, - һөйләшеү тамамланғанын белдереп, ҡағыҙҙарына үрелде, сәғәткә күҙ ташланы урынбаҫар.

- Суҡынғыр, аныҡлап әйтә алманым. Хәҙер ни ҡылырға инде? - тип үҙен һүкте Идеал кабинеттан сыҡҡас. - Үҙегеҙ лә, тине лә баһа. Шул еткән, хупланы була әйтте бит. Һүҙе сыҡты. Башты йүләргә һалып, документтарҙы тотам да башлыҡҡа инәм, урынбаҫарҙың ризалығы бар тим дә ҡуям, - мәғариф бүлеге начальнигы бөҫлә исем юллау эшен шулай хәл итеү планын ҡорҙо.

- Идеал Салютович, был исемгә һеҙ әллә ҡасан лайыҡлы. Юлламанамәгә урынбаҫар, ризалығын белдереп, имзаһын ҡуйһын да, әйҙә, Өфөгә!.. - мәктәптәге маҡтау ҡағыҙҙарының бай тупламаһы ҡала башлығының күҙе алдында әле лә тора ине, күрәһең.

- Атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре?.. Мин ҡала хакимиәтенең маҡтау ҡағыҙын күҙ уңында тотҡайным. Исемгә башҡа лайыҡлылар бихисап. Иртәрәк һеҙгә, Идеал Салютович, йәшһегеҙ әле, - урынбаҫар отоо ҡаршы төштө Идеалдың әрһеҙләшеүенә.

- Башлыҡ риза...

- Минән аша һикереп, хужаға инеп йөрөүең ярамаған эш түгел!..

- Һеҙ бит, үҙегеҙ лә исемлеккә индер, тинегеҙ...

- Һүҙ республика наградаһы тураһында барманы!..

- Ҡаланыҡылар миндә кәбән ҡойорлоҡ. Башлыҡ, лайыҡлыһың, тигәйне...

- Ну, Хәбөтдинов, ҡара уны! Баштан аша һикерәһең, - урынбаҫар янап алды, бик теләмәй генә ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйҙы.

"Арты менән боролор инде был ҡартлас. Үҙ кешеһен үткәрергә булғандыр инде. Балдыҙы текә баҫып йөрөй, бәлки, уның өлөшөнә төштөм. Ярай, исемен алһам, теше үтмәҫ әле. Йылап онотор ҙа", - тип бер үртәләнде, бер йыуанды.

Исемде алды. Урынбаҫар ҙа унын тарихын иҫләп торманы. Тағы бер йылдан Хәбөтдинов "Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыусы ҡаҙаныштары өсөн" ведомство миҙалы менән бүләкләнде. Уны ла алдан хәстәрләп йөрөнө. Иҫәп алыу комиссияһы рәйесенең алдына ла, артына ла сыҡты. Ул арала Рәсәй Мәғариф министрлығының Ушинский миҙалы менән тәүләп бүләкләй башланылар. Өҫтән бер кандидатура һоранылар. Урынбаҫарҙың отпускыла булыуынан файҙаланып, башлыҡҡа тура инде Идеал. Бигерәк эт ҡайышланаһың, тип әйтмәһен өсөн, үҙенекенә ҡушып, тағы ике фамилия яҙҙы.

- Тәүләп тапшырыла тиһеңме? Элек тә, Совет осоронда ла бар ине түгелме был миҙал? - башлыҡ нишләптер шик белдерҙе.

- Туҡтап торғайны ил тарҡалғас. Яңы положение ҡабул ителде. Яңыса ул хәҙер, - теманы сурытып торманы Идеал да.

- Янынан булғас, иң элек начальник алырға тейештер, моғайын, уны. Нисек уйлайһығыҙ, Идеал Салютович? - Хәйләгә барып, һынап ҡарарға булды был, тип ҡабул итте Идеал хужаның кинәйәле һүҙҙәрен.

- Лайыҡлылар байтаҡ ҡала мәктәптәрендә... Икәүһен күрһәттем исемлектә, - теше араһынан саҡ һығып сығарҙы быны Идеал. Ҡалайтһын: "Мин, тик мин генә лайыҡлы!" - тип һөрәнләй алмай бит инде.

- Юҡ, абруй өсөн дә һеҙгә кәрәгерәк ул... Әҙерлә документтарҙы үҙ исемеңә, - Идеал ҡанатланып сыҡты кабинеттан. Хәйләһе батты - инде ысҡындым тигәндә, эре балыҡты ярға ялтыратып сығарып ташланы.

"Рәсәйҙең арҙаҡлы шәхестәре энциклопедияһы" тип аталған баҫма тарала башлағайны шул осорҙа. Әрһеҙ эшҡыуарҙар, кеше фиғеленең данға тотанаҡһыҙлығын оҫта файҙаланып, аҡса һуғыу эшен яйға һалды шулай. Бик күп ойошма етәкселәренә ошондайыраҡ хат килде: "Хөрмәтле иптәш Фәлән Фәләнович! Һеҙҙең лайыҡлы хеҙмәтегеҙҙе, Ватаныбыҙ үҫешенә индергән ҙур өләшегеҙҙе иҫәпкә алып, абруйлы комиссия Һеҙҙе Рәсәйҙең арҙаҡлы шәхестәре энциклопедияһына индереү тураһында ҡарар сығарҙы. Үҙегеҙ тураһында ентекле мәғлүмәт һәм фотоһүрәт ебәреүегеҙҙе һорайбыҙ. Китапты сығарыуға бәйле сығымдарҙы ҡаплау өсөн нәшриәт иҫәбенә биш мең һум аҡса күсерергә кәрәк. Энциклопедияға ингәндәр "Арҙаҡлы кешеләр" махсус миҙалы менән дә бүләкләнә. Тиҙ арала яуап көтәбеҙ". Миҙал һүҙен уҡығас, Идеал икеләнеп торманы: аҡсаһын ебәрҙе, үҙе тураһында тәфсирләп, бер генә баһаламанамәһен дә ҡалдырмай, яуап хаты яҙҙы. Оҙаҡламай: "Котлайбыҙ, Һеҙ энциклопедияға индегеҙ", - тип яҙылған ҡыҫҡа хат алып ҡыуанды.

Йыл да үтмәне, миҙал тапшырыу тантанаһына саҡырыу килде. Идеал, мәғариф бүлеге иҫәбенә командировка алып, Мәскәүгә юлланды. Өҫ көн тигәндә, ҡулына көс еткеһеҙ ауыр энциклопедия тотоп, түшенә миҙал тағып ҡайтып төштө. Иртәгеһенә үк ҡала гәзитенә һәм телевидениеһына интервью бирҙе. Мәҡәлә сыҡҡас, хәбәрсене саҡыртып алды:

- Республика гәзите мөхәррире мәҡәлә менән ҡыҙыҡһына, әллә ҡайҙан ишетеп ҡалған. Ебәреүҙе үтенеп һорай. Бөгөн үк, мөмкин булһа, ташлайыҡ әле... Интернеттан, - тип үтенес-бойороғон еткерҙе уға.

Мөхәррирҙе күндереү өсөн Идеал бар сослоғон, булған бөтә бәйләнештәрен эшкә ҡушты. "Дәүләт наградаһы түгел. Ижтимағи ойошма булдырған уны. Уңға ла, һулға ла тараталар... Аҡсаһын ғына түлә... Төп гәзитте ундай награда кавалеры тураһында мәҡәлә менән бәҫеҙләй алмайым", - тип аяғын терәп ҡаршы төштө гәзит етәксеһе. Бихисап тос наградалар тураһында ла әйткәс, уҡытыусылар араһында гәзиткә яҙылыуҙы ойоштороуға вәғәҙә биргәс, күндә: "Тик мәҡәлә "Арҙаҡлы кешеләр" миҙалы хаҡында бармаясаҡ. Гөмүмән, һеҙҙең турала яҙырбыҙ, ә миҙалды һүҙ ыңғайында ғына телгә алырбыҙ", - тигән шарт ҡуйҙы.

Шулай итеп, данын республикаға таратыу йәһәтенән беренсе аҙым эшләне Идеал.

* * *

Хакимиәт башлығы урынбаҫарын ҙурлап хаҡлы ялға оҙаттылар. Урынына кем, тигән һорау торманы - кабинетты Хәбөтдинов биләйәсәге әллә ҡасан билдәле ине.

Гәзиттә, "йылы" урын бушауы тураһында хәбәр кәм тигәндә ярты йыл алдан тарала. Әлбиттә, шунда уҡ кем уҙарҙан уны биләрҙәй лайыҡлы кешеләрҙе барлай башлайҙар. Тәүҙә тиҫтәләгән исем атала. Йәйләп исемлек ҡыҫҡара бара, сонторлана. Аҙаҡтан күп тигәндә ике-өс дәғүәсе ҡала. Был осраҡта, ниш-ләптер, барыһының да фекере беректе: "ХИС ултыра", - тинеләр бер төптән. Мәҙәниәт, һаулыҡ һаҡлау, башҡа тармаҡтар етәкселәре лә төшөп ҡалғандарҙан булмаһа ла. Хәбөтдинов үҙен танытып өлгөргәйне шул халыҡҡа. Тиҫтә йылдан ашыу тартты ауыр йөктө, уның ҡулы аша бөгөнгә ҡала йәштәренең барыһы ла үтте. Ата-әсәләрен дә ҡушһаң - ҡала халҡының яртыһы. Уны ипле, юғары мәҙәниле, талапсан һәм гүзәл хужа итеп белделәр һәм беләләр. Фырт кейенеүе, үҙен олпат тотоуы, хәбәрҙе белеп һөйләүе барыһында ла Идеалға ҡарата тик ихтирам тойғоһо ғына уятты. Әгәр Хәбөтдинов та лайыҡ түгел икән урынбаҫар вазифаһына, ул саҡта кем һуң?..

Дөйөм фекер тылсым көсөнә эйә, һәм ул мотлаҡ гәмәлгә аша, тиҙәр. Үрҙә лә ике уйлап торманылар - шул көндө үк Идеалға яңы урынға күсеп ултырырға бойороҡ бирҙеләр. Мәғариф бүлегенә килгәндәге ише аҙап, албырғап ҡалманы Идеал. Ул - бешеккән, түрәлектең неско серҙәренә әллә ҡасан төшөнгән, тимер сым аша үрҙәгеләр менән мөғәмәлә итеү алымдарын еренә еткереп үҙләштергән, кәңәшмәләр үткәрә, кемдең кемлегенә ҡарап һөйләшә белгән тәжрибәле хужа. Креслола ныҡынып ултырыу өсөн уға хәҙер Алһыу Ғайнан ҡыҙы кеүек терәк-таяныс та кәрәкмәй. Ниндәй кабинетҡа индереп ултыртһаң да, дилбегәне шунда уҡ ҡулына ҡармап тотоп аласаҡ, талап ителә икән, ауыҙын ҡайырып булһа ла, атты кәрәк юлға төшөрәсәк. Мәғариф өлкәһендә сыныҡыу алған - бала-сағаны, бисә-сәсәне еңгән кешегә был моңмо ни?

* * *

Ҡытай түрәләре - мандаринары - тарихы беҙҙең эраға тиклемге ҡай заманға барып тоташҡан мең йыллыҡ ҡеүәтле империя терәге булып торған. Улар дөгө игеү, таш диуарҙар күтәреү, хәрби эштәр рәтен белмәгән, гөмүмән, ерҙәге тормоштан, ысынбарлыҡтан айырылған сәйер заттар булғандар. Ялҡынлы телмәр - бына етәксе асылдары, таһыллыҡтары, дан-шөһрәт ҡаҙаныр булмыштары. Әйтәйек, көслө ямғырҙан һуң, быуа йырылып, ауылды йыуып алып китеү ҡурҡынысы тыуҙы, ти. Мандарин, ҡайҙан таш-балсыҡ сығарырға, күпме кешене уларҙы тейәргә, күпмеһен ташырға ҡуйырға, быуаның ҡайһы урынын башлап нығытырға, бала-сағаны, мал-тыуарҙы тауға оҙатып торорға, тип күрһәтмәләр биреп, йәнфарман ауыл буйлап сабып йөрөмәгән. Ауыл майҙанына халыҡты йыйған да ошондайыраҡ телмәр тотҡан:

- Йыһан улы, ҡояштай салт йөҙлө бөйөк үә изге, үә миһырбанлы, үә сумарт һөйөклө императорыбыҙ, Ватаныбыҙ хаҡына алға! Алға - еңеүҙәргә! Ҡүктәрҙән беҙгә бәлә яуҙырған яуыз көстәргә - ләғнәт! Ләғнәт! Алға крәҫтиән: ҡарты һәм йәше, ире һәм ҡатыны! Алға! Ен-пәрейҙәрҙе енербеҙ, һөйөклө император үә уның аҫыл ғаиләһен, Ватаныбыҙҙы бәләләрҙән ҡурсаларбыҙ! Алға, тик алға! Ҡулдарығыҙға - көс-ҡеүәт, зиһенегеҙгә - сафлыҡ! Әләмдәрҙе юғары тотоп, алға!.. Ҡытай крәҫтиәне был ялҡынлы телмәрҙән һуң көрәгенә, тәпкеһенә тотонған, өс көн йоҡламай, ашамай быуа билен нығытҡан. Ауыл ҡырмыҫҡа иләүендәй ҡайнап торған. Һыу баҫыу ҡурҡынысы сигенгәс кенә өйөнә ҡайтҡан. Бөйөк Ҡытай стенаһын күтәргән халыҡ вәкиле бит ул!

Хәбөтдинов иһә - бөгөнгө заман башҡорт мандарины. Бына инде биш йыл хакимәт башлығы урынбаҫары, ә үҙе яуаплы ҡайһы бер учреждениеға инеп тә сыҡҡаны юҡ. Етәкселек иткән социаль өлкәнең бер генә тармағын да төбөнә төшөп белмәй. Белем биреү өлкәһендәге үҙгәрештәр менән даими танышып бармағас, хатта бөгөнгө мәктәп тормошон да сырамытып ҡына төҫмөрләй. Башы кәңәшмә үткәреүҙә бушамай - бөтә мәсьәләләрҙе лә кабинетынан сыҡмай хәл итә. Һәр осраҡта ла ҡул аҫтындағыларға бурысты сама менән ошолайыраҡ ҡуя:

- Проблеманы хәл итеүҙә ведомство-ара бәйләнештәр генә уңыш алып киләсәк. Мин быныҡ фәҡәт дөрөҫ булыуына тәрән ышанам, иманым камил... Мәсьәлә кисектермәй хәл ителергә тейеш! Һүҙем тамам, башҡа һорауҙар булмаһа - эшкә! - ти ул пафос менән.

Мандариндар араһы тағата алмаҫлыҡ бәйләнештәр ебе менән сырмалған булған. Аңлы рәүештәме, аңһыҙмы, Хәбөтдинов та, ҡул аҫтындағыларҙы өйөрөп, гел үҙ янында тота. Төрлө саралар үткәреүҙе әйтәһе лә түгел, тыуған көндәрҙе, байрамдарҙы ла бергә билдәләйҙәр. Иң ҡыҙығы шунда: бандиттар банданы ҡан менән бер бөтөнгә ойоштороһа, Хәбөтдинов үҙ тирәгеләрен - һүҙ ярҙамында. Ябай һүҙ менән түгел, ә маҡтау һүҙе аша.

- Идеал Салютович, һеҙ арабыҙҙа тиңе булмаған юғары мәҙәниле, тыйнаҡ, эшлекле, оло йөрәкле шәхес... - был Хәбөтдиновтың тыуған көнөндә йыл да әйтелгән маҡтау һүҙҙәренең, дифирамб йырҙарының остоғо ғына.

**(Дауамы. Башы 3-7-се һандарҙа).**

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# СЕРЛЕ ЙОМАҠ ИНДЕ УЛАР,

## тәүге ир кеше - Әҙәм дә аңлап етмәгәндер ҡатын-ҡыҙҙы

**Карап батҡас, дүрт ир бер утрауға йөҙөп барып, үлемдән ҡотолғандар. Көс-хәл туплап, тирә-яҡты күҙәтә торғас, алыҫ түгел арауыҡтағы күрше утрауҙа ҡатын-ҡыҙҙар барлығын шәйләгән былар. Утыҙ йәшлек ир шундуҡ, оҙаҡ уйлап тормай, ҡатын-ҡыҙҙар тупланған утрауға йөҙөп барыу ниәте менән һыуға сумырға йыйынған. "Ҡайҙа ашығаһың, бына хәҙер һал эшләрбеҙ ҙә, тыныс ҡына йөҙөп барырбыҙ", - тип, туҡтатҡан уны ҡырҡ йәшлек уҙаман. Илле йәшлек: "Һал нимәгә, ҡул болғаһаҡ, улар ни үҙҙәре йөҙөп килерҙәр", - тип, үҙ тәкдимен әйткән. "Йөҙөп килмәһәләр ҙә, улар бынан да һәйбәт күренә лә баһа!" - тигән алтмыш йәштәгеһе.**

Ер шарында көн иткән ирҙәрҙең тоҡом дауам иттереү буйынса тәбиғи инстинкттары оҡшаштыр ҙа, бәлки, ни тиһәң дә, беренсел, борондан килгән, үҙгәрмәй торған асыл бит ул, ә бына йәш иҫәбе артҡан һайын ирҙәрҙең ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата мөнәсәбәте үҙгәреүе бәхәсһеҙ. Уйлап ултырам да, бер аҙ көрһөнөңкөрәп, улар ни былай ҙа һәйбәт күренә, тигән һымағыраҡ, күреү һәләтемә шөкөр итеп, яҙып ултырмыш.

Бар ине дарья кискән саҡтар, һалын да тәҙәнәк, ҡатын-ҡыҙҙар ҡолағын матур һүҙҙәр менән иркәләгән саҡтар ҙа булғандыр - тормош бит. Һүҙемде уйынлы-ысынлы башлаһам да, ҡатын-ҡыҙҙар тураһында яҙғанда бик тә етди һәм ихлас булырға кәрәклеген аңлайым, сөнки ир кеше өсөн ҡатын-ҡыҙ образы өләсәйҙәргә, әсәйгә, апай-һеңлеләргә, еңгәйҙәргә, ҡоҙасаларға, бергә эшләгән ҡатын-ҡыҙ коллегаларға һәм, әлбиттә, һис шикһеҙ, ҡыҙ балаларыбыҙға ҡарата булған мөнәсәбәттәрҙең туҡымаһы бит ул - орнаменттары бай, сағыу - ир ғүмеренә бер бирелгән сихри донъя.

Аллаһҡа шөкөр, бала сағымда ике өләсәйемдең дә барлығын тойоп йәшәү мөмкинлеге булды. Йәшәгән ауылдарына ҡарап, уларҙы Һарт өләсәй (атайымдың әсәһе) һәм Хәлил өләсәй (әсәйемдең әсәһе) тип йөрөтә торғайным. Иң иҫтә ҡалғаны - ике өләсәйҙең урындыҡта көн оҙоно сөкөрләшеп һөйләшеп ултырыуҙары. Саф башҡорт телендә (уларҙың урыҫсалары икмәк-тоҙлоҡ ҡына булғандыр инде) бала ҡолағын иркәләп, ни тураһында һөйләшкәндәрҙер, әле улай уҡ иҫләй алмайым. Шуныһы ҡыҙыҡ: мин ишеткәндәй итеп ҡәҙимге һөйләшеп ултыралар ҙа, шыбырлашып ҡына (күрәһең, минең ҡолаҡҡа ятмаҫҡа тейешелер) сер бүлешеп алалар. Уларҙы тыңлап ята торғас, йоҡлап китәм. Уянһам, улар һаман һөйләшеп ултыра, әйтерһең дә, ваҡыт туҡтаған. Тағы тыңлайым: радио юҡ, телевизорҙы әле уйлап тапмағандар ҙа... Хәлил өләсәй беҙгә ҡунаҡҡа килгәндә була торғайны былдай хәл. Икәүләп көн һайын ҡунаҡҡа барып та йөрөп киләләр ине. Сыҙамһыҙлыҡ менән ҡайтыуҙарын көтәм, сөнки уларҙың камзул кеҫәләрендә тәмле-татлы күстәнәстәр ҡайта. Үҙем әсәйемдең тыуған ауылына барһам, эй ҡыуаныр ине Хәлил өләсәй. Шундай итеп ҡыуана: уның ҡыуанысынан күңелем тула, ҡанатланып осоп киткәндәй тоям үҙемде.

Әсәй - берәү! Күпме генә яҙһаҡ та, әсәй образын тулы кимәлдә сағылдыра алмаясаҡбыҙ барыбер. Ҙурайғас ҡына, тормош күргәс кенә аңлай башлайбыҙ улар ҡәҙерен. Бала саҡта әсәй туйындырыусы, кейендереүсе - һәр ваҡыт эргәндә булырға тейеш тауу һымаҡ ҡабул ителәһ. Бер бала әйткән ти бит:



"Әсәй, һинең үҙеңдән әсәң бар ҙаһа, нинә беҙҙең менән йәшәйһең?" - тип. Оҙаҡ сурытмай, һеҙгә бер кинәйә һөйләйем әле. Миненсә, әсәй образын сағылдырыуҙа бик тә мөһим ул:

"Бик борон заманда ҡуйы ботаҡлы бейек Алмағас йәшәгән. Бер бәләкәй малай уның эргәһенә килеп уйнарға яратҡан. Ул ағас башына менеп, тәмле алмалар ашаған, күләгәһендә йоҡлай торған булған. Малай Алмағасты яратҡан, емеш ағасы малайҙы яратҡан. Ваҡыт үткән, үҫкән һайын малай ағас эргәһенә һирәгерәк килә башлаған. Бер көн ул Алмағас эргәһенә бик күңелһеҙ генә килгән.

- Ни булды һиңә, нинә минең менән уйнамайһың? - тип һораған Алмағас.

- Ағас менән уйнарға мин хәҙер бәләкәй түгел, миңә уйынсыҡтар кәрәк, ә уйынсыҡ алырға аҡсам юҡ, - тигән малай.

- Ғәфү ит, минең аҡсам юҡ, әммә һин минең алмаларымды һатып, аҡса эшләй алаһың, - тигән Алмағас.

Бик ҡыуанған малай! Алмағастың емештәрен йыйып алып ҡыуанып ҡайтып киткән һәм юғалған. Алмағас бик һағынған уны. Бер көн ир ҡорона ултырған малай тағын Алмағас эргәһенә килгән. Эй ҡыуанған ағас!

- Кил, минең менән элеккеләй уйна, - тигән ул.

- Һинең менән уйнарға минең ваҡытым юҡ. Миңә эшләргә, ғаиләмде ҡарарға кәрәк. Әле беҙҙең йәшәргә өйөбөҙ ҙә юҡ. Һин ярҙам итә алаһыңмы һуң? - тип һораған ир кеше.

- Ғәфү ит, мин һеҙҙең өсөн ышыҡ була алмайым шул, әммә һин минең ботаҡтарымды бысып алып, өй эшләй алаһың, - тигән Алмағас.

Ир ағастың ботаҡтарын бысып алып, бик ҡәнәғәт ҡайтып киткән. Эй ҡыуанған Алмағас яратҡан кешеһенә ярҙам итә алғаны өсөн! Әммә ир тағы оҙаҡҡа юғалған. Йәйҙең бер йылы көнөндә дуҫы Алмағас эргәһенә килгән. Эй ҡыуанған ағас, ҡыуанысының сиге булмаған:

- Кил, мин һине һағынып көттөм! - тигән ул.

- Мин ҡартайҙым инде, миңә ял кәрәк. Кәмә менән сәйәхәт ҡылып, ят ерҙәрҙе күргем килә, - тигән ир кеше.

- Мине ауҙарып, бүрәнәмдән кәмә эшлә лә, әйҙә, сәйәхәт ҡыл, ял ит, - тигән Алмағас.

Ир кеше тағы оҙаҡҡа юғалған, әммә бер нисә йылдан тағы таныш урынға килгән.

- Ғәфү ит, балам, минең һиңә биргәндәй бер нәмәм дә ҡалманы, алмаларым да юҡ, исмаһам, - тигән Алмағас.

- Алма ашағандай теш тәрем дә ҡалманы инде, - тигән ир.

- Улайһа, минең түмәремә ултырып ял ит.

- Миңә хәҙер башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй, ултырып ял итһәм, шул етә, йәшәй-йәшәй ныҡ арыным мин.

- Яҡшы! Ултыр, ял ит.

Ир Алмағастан ҡалған түмәргә ултырған. Эй ҡыуанған Алмағас, күҙ йәштәре аша йылмайған".

Беҙҙең турала бит был кинәйә, хөрмәтле ирҙәр! Ирҙәр генә түгел, һәр балаға ҡағыла: малаймы ул, ҡыҙмы - бөтәбеҙгә лә! Әсә күңеле - балала, бала күңеле - далала, тип бушҡа әйтелмәгәндер. Алмағас - ул беҙҙең әсәй образы. Бала сағыбыҙҙа әсәй беҙҙең өсөн алыштырғыһыҙ йән. Йәнен дә бүлеп бирер ине лә бит, йәнһеҙ йәшәп булмай. Ҙурайған һайын әсәйҙәр эргәһенә һирәгерәк ҡайтабыҙ, был холҡобоҙға ҡырҡ һыйтау табабыҙ. Ни генә булмаһын, әсәйҙәр балаларына яҡшы булһын өсөн бөтәһен дә эшләргә әҙер. Эйе, малай Алмағасҡа ҡарата ауыһыҙ, ҡаты ҡыланғандыр. Ситтән ҡарап фекер йөрөткәндә был шулай күренә, шулай аңлашыла.

Эйе, үҙебеҙҙең эске торошобоҙға, әсәйгә ҡарата мөнәсәбәтебеҙгә лә ситтән ҡарап фекер йөрөтөргә өйрәнергә кәрәк беҙгә. Талха Ғиниәтуллиндың "Мәтрүшкә еҫе" хикәйәһенең йөкмәткеһен иҫкә төшөрөгөҙ әле. Үпкәһен пуля тишеп, үлем сигенә етеп ҡайтҡан улын әсәһе әжәл тырнағынан тартып ала. Эшкә ярһеҙ Хәбибулла аҙаҡ орденлы көтөүсе булып китә, һис бөтмәҫ колхоз эшендә йөрөп, әсәһенең барлығын да онота. Хикәйәнең бер абзацын тулыһынса килтерәм: "Хәбибулла мунсанан сығыуға, әсәһе күтәрмәнең икенсе баҫҡысында тора. Хәбибулла әсәһе ҡаршыһына килә, күҙҙәренә ҡарай. Әсәнең элеккеҫә тыныс, ҡырыҫ, талапсан ҡарашын күреп, ҡаушап ҡала, өйгә инергә ярҙам итергә теләй һәм әсәһен ике беләгенә күтәреп, өйгә индерә. Биш бала тапҡан, уларҙы күтәреп йөрөткән, бар ғүмере буйы балаларын кеше итер өсөн бик күп михнәттәр күргән әсәнең ҡауырыйҙан да еңел булыуына хайран ҡала".

Әсәләрҙең тулы ҡәҙерен бик һуң аңлайбыҙ шул! Әсәйҙәр тураһында яҙғандан һуң нимәләр өҫтәп, ҡатын-ҡыҙҙар тураһында яҙыуы ла яҙыҡ һымаҡ. Яҙғы килә лә ул, һәр күңелгә тиклем ғашиҡ булып, мөхәббәт утында яныу тураһында, мәсәлән. Мөхәббәттең, һүрелеп, тыныс һөйөү тойғоһона әйерелеүен дә яҙғы килә. Ҡыҙ балаларыбыҙға ҡарата булған тойғо тураһында ла яҙғы килә. Әммә күпме яҙһаң да, әсәйҙәргә ҡарата булған мөнәсәбәтебеҙҙең бәҫе китер кеүек.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бер һорау барыбер ҙә борсой: баяғы баштағы дүрт ир урынында 30-60 йәшлек дүрт ҡатын булһа, ни ҡыланырҙар ине икән? Яуап юҡ һәм булмаҫ та. Сихри, ғәжәйеп халыҡ бит ул ҡатын-ҡыҙҙар! Тәүге ир кеше - Әҙәм (ғ.с.) дә аңлап етмәгәндер. Аңлаһа, Ерҙәге артабанғы тормоштоң ҡыҙығы ла, йәме лә булмаҫ ине...**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН**
**фекер йөрөттө.**

ТАРИХТА - ШУЛАЙ!

# МАТУРЛЫҠ ҠАНУНДАРЫ...

## төрлө заманда төрлөсә



**Матурлыҡ ҡанундары даими үҙгәреп тора. Бөгөнгө Рәсәйҙә спортсыларса зифа буйлы, төҙ кәүҙәле ҡыҙҙар матур тип иҫәпләнһә, Петр I идара иткән осорҙа тулы, тығыҙ тәнле ҡыҙҙарҙы һайлағандар. Ул замандағы тулы кәүҙәле ҡатын-ҡыҙ матурлыҡтың бөгөнгө "90-60-90"стандартынан бик алыҫ булған, әлбиттә. Ләкин ул замандарҙа ҡатын-ҡыҙҙың физик матурлығынан бигерәк, бала табыу һәләтен күрһәтеүсе кәүҙә үҙенсәлектәре баһаланған.**

Ул осорҙағы медицина әсә үлеменең түбән күрһәткестәре менән бер ҙә маҡтана алмаған шул. Ҡатындарҙың бала тапҡанда сабыйын тыуҙыра алмай үлеп ҡалған осраҡтары йыш күренеш булған. Шул осор кешеләре был йәһәттән шундай үҙенсәлеккә иғтибар иткән: билдәле бер кәүҙә төҙөлөшлө ҡатындар, ғәҙәттә, баланы еңел, ҡатмарлыҡһыҙ таба алған, сабыйҙары ла сәләмәт һәм ныҡ булып үҫкән. Ирҙәр шуға күрә лә ҡатын һайлағанда тулы күкрәкле, киң янбашлы һәм эсе беленеп торған ҡыҙҙарға өҫтөнлөк биргән. Һәм, киреһенсә, зифа, ҡаҡса кәүҙәле ҡатын-ҡыҙ, ниндәй генә һөйкөмлө булмаһын, ирҙәр иғтибарынан төшөп ҡалған. Ябыҡ ҡыҙҙарҙы ҡатын итеп алырға теләмәгәндәр, сөнки бала тапҡанда уларҙың ғүмере фажиғәле өҙөлөп ҡалыу хәүефе ҙур булған.

Ҡаҡсалыҡ ул ваҡыттарҙа ялҡаулыҡ йәки сир билдәһе тип тә ҡаралған. Былдай ҡатын-ҡыҙҙың йә һаулығы насар, йә үҙе лә, туғандары ла ялҡауҙар, ыңдырышлы ерҙәргә була тороп та шунда уңыш үҫтерә, тамаҡ туйҙыра алмайҙар, тип ҡаралған һәм был ике ҡараш та ҡыҙҙы насар яҡтан ғына күрһәткән.

Петр Беренсе тәхеткә ултырғас, үҙенең Европа коллегаларынан күп нәмәгә өйрәнгән. Был шулай уҡ модаға ла ҡағылған. Шулай итеп, ҡапыл ғына аристократтарса аҡ йөҙ, корсет менән һыҡтырылған нескә бил һәм кәүҙә ябыҡлығы баһалана башлаған, ләкин был фәҡәт аристократтар һәм бай мещандар зауығына әүерелгән. Крәстиән ҡатын-ҡыҙҙарына элекке талаптар үҙгәрмәгән һәм был ҡараш йәмғиәттәге ярлы һәм бай ҡатламдар араһындағы айырманы тәрәнәйткән генә. Улай ғына ла түгел, юғары ҡатламдар өсөн ауыл кешеһенә оҡшашлыҡ кәмселек, хурлыҡ һаналған. Был оҡшашлыҡтан ҡурҡып, аристократ ҡатындары бала тапҡандан һуң шунда уҡ туштәрен һыҡтырып бәйләп, сабый өсөн һөт инәһе яллай торған булған. Был сара уларға кәүҙә ыҡсымлығын һаҡлап ҡалырға ярҙам иткән.

✔ *"Бәхетле ғаиләләрҙә ҡатындың аҡыллыраҡ булырға тейешлеге дөрөҫ, сөнки тап ҡатындар мөнәсәбәттәр ландшафтының хис-тойғолар өлөшө өсөн яуаплы", - ти мөнәсәбәттәр тураһындағы китаптар авторы Кейт Фиджес та.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАТЫНЫ ДЕПРЕССИЯЛА...

■ Ғаиләлә ир кешенең янъялсы, эскесе булыуы ҡатын-ҡыҙҙы депрессияға индереүе ихтимал. Америка ғалимдары быны күптән раҫлаған да инде. Тикшеренеүҙәр тағы ла бер ҡыҙыҡлы фактты асыҡларға мөмкинлек биргән. Баҡтиһәң, ирҙәргә ҡатындарының ҡылыҡтары бер нисек тә тәьҫир итмәй икән. Миссури университеты ғалимдары белдереүенсә, ирҙәрҙең антисоциаль ҡылыҡтары шунда уҡ ҡатындарының күңел торошонда күренә. Ир үҙен ни тиклем агрессив тота, ваҡыт үтеү менән ҡатында депрессия ла шул тиклем тәрәнерәк сағылыш табасаҡ. Ғалимдар әйтеүенсә, ире позитив ҡарашлы булған ҡатындарҙа психологик тайпылыштар бөтөнләй күҙәтелмәй. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ысынлап та ҡатындың антисоциаль ҡылығы һәм ирҙең депрессияһы араһында бәйләнеш асыҡланмаған. Тимәк, тауыш ҡуптарып, ирен ир булараҡ "юҡҡа сығарыусы" мыжыҡ ҡатын образы бары тик миф ҡына булып ҡала. Ирҙәр депрессияға һирәк осраҡтарҙа, мәҫәлән, эшен йәки туғандарын юғалтҡанда ғына бирелеүе ихтимал, ти ғалимдар.

■ Швейцария ғалимдары белдереүенсә, ғаилә союзы уңышлы булһын өсөн ир менән ҡатын ҡайһы бер критерийҙар буйынса тура килергә тейеш. Белгестәр фекеренсә, ҡатын ирҙең мәҙәни-социаль мөхитенә тап килергә һәм, иң мөһиме, унан күпкә аҡыллыраҡ булырға тейеш. Был осраҡта ғаиләнең бәхетле буласағы 20 процентҡа юғарыраҡ, ти Женева бизнес мәктәбе ғалимдары. Ҡатындың интеллектуаль мөмкинлектәре иренең интеллектынан 27 процентҡа юғарыраҡ булыуы, шулай уҡ ҡатындың юғары белемле булыуы, ә ирҙең булмауы - иң идеаль формула иҫәпләнә. "Бәхетле ғаиләләрҙә ҡатындың аҡыллыраҡ булырға тейешлеге дөрөҫ, сөнки тап ҡатындар мөнәсәбәттәр ландшафтының хис-тойғолар өлөшө өсөн яуаплы", - ти енестәр араһындағы мөнәсәбәттәр тураһындағы китаптар авторы Кейт Фиджес та.

■ Көн яҡшы үтһен өсөн, иртән яҡшы кәйефтә уянырға кәрәк. Сөнки иртәнге тойғолар һинең көн дауамындағы кәйефеңде билдәләй ҙә инде. Уянғас та киреләп-һуҙылып алығыҙ, был саҡта бәхет гормоны бүленәсәк, ә организм тынлыҡ торошонан хәрәкәт режимына күсәсәк. Бынан һуң шунда уҡ тороп, йыуынғас та бүлмә температураһы йылылығындағы бер стакан һыуға бал һалып эсергә кәрәк. Боронғо рецепт буйынса, балды һалҡын һыуға кистән үк болғатып ҡуйырға була.

■ Һөйләшкән ваҡытта телефонды нисек тотоуына ҡарап, уның баш мейеһенең ҡайһы өлөшө өҫтөнлөк алыуы тураһында белергә мөмкин. Америка ғалимдары асыҡлауынса, кешеләрҙең 70 проценты телефонды "эшсе" ҡулына тотоп һөйләшә. Мәҫәлән, уң ҡуллыларҙа телмәр һәм тел өсөн яуаплы һул яҡ мейе ярымшары өҫтөнлөклө була. Ундайҙар ике ҡолағы ла бер төрлө ишетеүгә ҡарамаҫтан, йышыраҡ телефонды уң ҡолағына ҡуйып һөйләшә. Уң яҡ мейе ярымшары алдынғы булған кешеләр телефонды һул ҡолағы менән тыңлай. Был асыш кешенең баш мейеһендә телмәр үҙәген тикшереүҙәрҙе асыҡларға мөмкинлек бирә. Быға тиклем быны асыҡлау өсөн кешенең йоҡо артерияһына анестетик индереп, бер ярымшарҙы "һүндереп" тороу кәрәк ине.

ҒАИЛӘ ӘКӘМӘТТӘРЕ

**Мин алтмыш бишенсе йәш менән барам. Үҙем иҫ белгәндән алып илебеҙҙә ҡатын-ҡыҙҙар хоҡуғы мәсьәләһе бер ҡасан да күҙ уңынан төшөп ҡалғаны юҡ, тип хәтерләйем. Советтар Союзы осорон да әле онотмағанмын. Ул саҡтағы үҙебеҙҙең тормошобоҙҙо гел генә ҡасандыр булған батшалыҡ королошо заманы менән сағыштыра инек. Ислам дине ҡануниәте буйынса йәшәгән боронғо ата-бабаларыбыҙҙы "наҙан башҡорттар" тип атап, ҡатын-ҡыҙҙың, йәғни, өләсәйҙәребеҙҙең бөтөнләйгә хоҡуҡһыҙ булып, "ирҙәренән иҙелеп ғүмер иткәнлеге" хаҡында ла һәр саҡ туҡып ҡына торҙолар. Шул уҡ ваҡытта, "Бөйөк Ленин партияһы етәкселегендә илдә батшаны ҡолатып, капиталист, бай-кулактарҙы, динде бөтөргәс, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ азатлыҡ алды ла, хәҙер гүзәл заттарыбыҙ барыһы ла ирекле, ирҙәр менән тиң хоҡуҡлы..." тип аңыбыҙға һеңдерҙеләр.**

# АТТА ЛА, ТӘРТӘЛӘ ЛӘ,

## йәки Көслө заттың көсһөҙ булыуы хаҡында фәлсәфә

Әммә бәғзе ғаиләләрҙә борон заманларҙа бөтөнләй булмаған эскелектең сәскә атыуы, шулай уҡ, ир-егеттең ғаиләләге абруйы төшә, "Ир - ғаилә башлығы" тигән төшөнсәнең әкренләп мәғәнәһен юғалта башлауы ла һиҙелә ине. Әлеге эскелек арҡаһында йә икенсе берәй сәбәптән ир-ҡатын араһындағы талаш-тартыштар ҙа әленән-әле килеп сыҡҡылай торғайны. Партия, комсомол һымаҡ ижтимағи-сәйәси ойошмалар, әлбиттә, тик ятманы, шундай ғаиләләргә ныҡ ҡына иғтибар бүлә ине. Ғаиләлә янъял сығарыусы йә иһә, өйөндә әҙәпле генә булып та, "һулаҡай яҡҡа" йөрөргә яратҡан ҡайһы бер "тәртипһеҙ" партия ағзаларын йыйылыштарҙа тикшергеләгән саҡтарҙы иҫләйем (ысын коммунист ғаиләлә лә өлгө булырға тейеш ине бит инде). Ҡатынының ғаризаһы буйынса партия йыйылышына саҡыртылған ир хатаһын башҡаса ҡабатламаҫҡа "ысын коммунист һүҙен" бирә. Партйыйылышта шелтә алып өйөнә ҡайтҡан был ирҙең хәләл ефетенә ҡарата тәрән ихтирам тойғоһо уянамы-юҡмы, уныһы, әлбиттә, билдәһеҙ... Ә инде берәй гүзәл зат "тәртип боҙған" осраҡта (ундайҙар ҙа була торғайны) ир кешенең партия ойошмаларына ярҙам һорап мөрәжәғәт иткәнен хәтерләмәйем. Ул заманда ла "ирлек намыҫы" тигән нәмә булғандыр инде, күрәһең. Шуға күрә лә, үҙ өйөндә үҙе тәртип урынлаштырырға маташҡан ирҙең хәлен аңлайым... Әммә, әлеге әйтмешләй, ҡатынын үҙаллы "тәрбиәләргә" йөрьәт иткән бындай ир тағы партком сәркәтибе алдына барып баҫа! Ҡыҫҡаһы, урыҫ әйтмешләй, "порочный круг" тигән нәмә килеп сыға... Бер ир үҙенең шундайыраҡ ҡатынына нисек тәьҫир итергә лә белмәй: "Их, әгәр ҙә мин КПСС ағзаһы булып тормаған булһам, күрмәгәнеңде күрһәтер инем!" - тип асыуланғас, уның һөйөклөһө: "Слава КПСС! Слава КПСС!"- тип шатланып ҡысҡырған имеш, тигән бер лаҡап та йөрөй торғайны...

Әле үҙәртеп, ҡабаттан капиталистик һымағыраҡ дәүләт төҙөй башлағандан алып та барыбер ошо турала һөйләшеүҙән бушанғаныбыҙ юҡ. Һуңғы осорҙар ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙы яҡлау тураһындағы айырым закон хаҡында һүҙ алып барыуҙар тағы йышайҙы. Хөкүмәт органдарында ултырған зыялыларҙың был ниәте ифрат та яҡшы, тип һанайым. Бындай мәсьәләне хуплаусылар, шул уҡ ваҡытта, тәнҡитләүселәр ҙә етерлек. Ҡайһы берәүҙәр хатта быға ҡаршы булыуын да йәшермәй...

Мин быға һис кенә лә ҡаршы түгелмен, әммә ошо хаҡта, ғәҙәтемсә,




бер аҙ стандарт булмаған рәүешле фәлсәфә ҡороп алырға ниәтем. Бәғзе ғаиләләрҙә булғылай торған "һауыт-һаба шылтыратыуҙар" илдә ҡатын-ҡыҙҙы яҡлаусы махсус закондың булыу йәки булмауынан торһа, беҙҙең яҡта әйтмешләй, ҡалай шәп булыр ине лә бит... Ифрат яҡшы маҡсатты күҙ уңында тотҡан бындай закон, миненсә, барыбер ғаилә татыулығына артыҡ үҙгәреш индермәҫ һымаҡ. Ни өсөн? Иғтибар итәйек: бик күптәр ундай ҡанунды белмәгән көйөнсә лә ғүмер буйы татыу ғына йәшәй ҙә баһа. Ә икенселәр, белә тороп та, уны үтәмәүе мөмкин.

Бына шундай хәлдә күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ әле. Властар ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәргә, әйтәйек, бөтөнләйгә күҙ йомдо икән, ти. "Теләһә ни эшләгеҙ", тигән һымағыраҡ. Ир-егеттәр шунда уҡ дәррәү рәүештә ҡатындарын туҡмай башлар инеме икән? Ғаиләлә ҡатын-ҡыҙ бөтөнләйгә яҡлауһыҙ ҡалыр инеме? Минең ныҡлы инаныуымса, бөгөн кемдең ғаиләһендә ниндәй мөнсәбәт булһа, ул шулай уҡ ҡаласаҡ. Бисә туҡмап ғүмер иткәндәр барыбер үҙҙәренең эшен эшләйәсәк, әлбиттә. Ә инде ир-егеттәрҙең тыныс холоҡлолары (хатта, әйтәйек, көс ҡулланыуға рәсми рөхсәт булған хәлдә лә!) барыбер ҡатын-ҡыҙҙы ҡыйырһытмаясаҡ. Ябайыраҡ итеп әйткәндә, ғаилә хәле тик ир менән ҡатындың үҙҙәренә генә бәйле, тимәксемен. Бала саҡтан миһырбанлы булып, ата-әсәһенең бер-береһенә ҡарата хөрмәтен күреп үҫкән малай, үҫкәс, бер ваҡытта ла ҡатынын буштан-бушҡа йәберһетмәйәсәгенә иманым камил.

Шулай уҡ миҙалдың икенсе яғын әйләндереп ҡарау ҙа кәрәктер ул, йәмәғәт! Бик күп нәмә ҡатын-ҡыҙҙың үҙенән дә торалыр, тимәксемен. Бола башлығы итеп һәр саҡ ир-атты ғына күреп ғәҙәтләнгәнбеҙ түгелме? Бәлки, күптәргә сәйер ҙә тойолоуы бар, әммә бер ҡыҙыҡ миҫалды килтермәк булдым әле шулай ҙа. Әҙәм балалары менән сағыштырыу өсөн. Телевизор ҡараусыларҙың ҡайһы берҙәренең хәтерендәлер: бер нисә йыл элек, һәр көн һайын тиерлек, яңылыҡтар программаһында бер юлбарыҫ йәшәгән һәм кәртәләп алынған заповедник биләмәһен күрһәтәләр ине. Заповедникта күпмелер ваҡыт уның менән бергә бер кәзә лә йәшәне. Ҡасандыр шул кәзәне аҙыҡ итеп йыртҡыс янына индергәндәр, әммә, ниндәйҙер сәбәп менән, юлбарыҫ был хайуанға теймәгән! Ул ғына ла түгел, хатта дуҫлашып та киткәндәр. Уларҙың йәнәшә ятып йоҡлауҙарын күреп кенә лә хайран ҡалырлыҡ. Кәзә үҙенә бирелгән бесәнде ашай, һис бер нәмәнән ҡурҡмай, ҡайғыһыҙ ғүмер итә. Бер нисә көндән шуны ла күҙәтә башланым: янында тик кенә ятҡан юлбарыҫҡа был мөгөҙлө хайуан тиктомалға килеп төкөп-төкөп ала. Тегенеһе нәк ҙур бер бесәй һымаҡ, йомшаҡ ҡына баҫып, икенсе урынға күсә һалып ята. Мин хатта был юлаҡлы януарҙы бер аҙ йәлләй ҙә башлағайным...Тик бер көндө шундай кадрҙы күрһәттеләр: тыныс ҡына йөрөгән әлеге юлбарыҫты буштан-бушҡа осло мөгөҙө менән сираттағы мәртәбә һөҙгөләй башланы был хайуан. Ә йыртҡыс үҙенән бер нисә мәртәбә кәүҙәгә бәләкәсерәк булған кәзәнең елкәһенән кинәт кенә тешләп алып, әллә ҡайҙа быраҡтырап та ебәрҙе. Был хәлдең нимә менән бөткәнен белмәйем, башҡаса уларҙы күрһәтмәнеләр. Нишләптер, миндә ана шул кәзәгә ҡарата йәлләү тойғоһо артыҡ ныҡ уянманы. Ни өсөн был ике хайуандың мөнәсәбәттән бәйән иткәнем бер аҙ һуңғараҡ аңлашылыр...

Гәзит-журналдарыбыҙҙа хикәйә, повесть-маҙарҙан да бигерәк, тормошта ысын булған хәлдәрҙә һөй-

✓ *Ғаиләләрҙә тыныслыҡ булыуын теләһәк, иң беренсе нәүбәттә, алкоголизмға ҡаршы көрәште көсәйтеү кәрәк. Ә хәмерҙән бөтөнләйгә ҡотолоуҙың иң ышанысл ы юлы - халҡыбыҙҙың иманға килеүе.*



ләгән мәҡәләләр уҡырға яратам. Күп кенә авторҙарыбыҙ төрлө ғаиләләге бәғзе ир-егеттең насар ҡыланыштары тураһында яҙырға ярата. Ә икенселәре ҡайһы бер гүзәл заттарыбыҙҙың да "китапҡа һыймаҫ" яҡтары хаҡында аптырарлыҡ итеп һөйләй. Шундай мәҡәләләрҙе уҡып, ҡатын-ҡыҙҙы ғына түгел, ә ҡайһы бер ир кешене йәлләргә лә мәжбүр булаһың. "Балалар хаҡы өсөн генә" тип, ҡатынынан ниндәй генә ғәҙелһеҙ, әсе һүҙҙәр ишетеүенә ҡарамаҫтан, ғаиләлә түҙеп йәшәгән ирҙәр ҙә була ул. Шундай ир-егеттең хәленә инеп, уны аңларға тырышып ҡарайыҡ әле, шулай ҙа. Әйтәйек, был көслө зат (физик яҡтан, ысынлап та көслө), хәләл ефетенән айырмалы, телгә лә әллә ни оҫта түгел, һүҙ байлығы ла самалы (ә бер аҙ телдәрерәк икән, ҡатыны шунда уҡ "бисә тел" тип, быдай ираттың ауыҙын яптыра...). Әлеге аңлашылмаусанлыҡ, бәхәс-фәлән килеп сыҡһа, шул мәлдә ул үҙен нисек тоторға, ерле юҡҡа "сытырҙап, өҫтөнә менеп, бөрөп алып барған" йәнкиҫәгенә нимә тип әйтергә тейеш? Шундай осраҡтарҙа ир-ат үҙен яҡлашырға тейешме икән? Физик яҡтан ғына көслө булыуы был осраҡта уға бөтөнләйгә ярҙам итмәй... Ҡул көсө ярҙамында, дөрөҫөн генә әйткәндә, ул тик үҙенең шул уҡ ҡатынын, балаларын ситтәрҙән яҡлаша ала, ғаиләһенә ашарға таба. Ә үҙен яҡлаша алмай! Нәҡ элегерәк күрһәткән "Чапаев" фильмындағы крәҫтиән һымаҡ: "Куда деться бедному мужику?.. Аҡтар килһә - талай, ҡыҙылдар килһә - талай..." Бындай ир-егеткә ятаҡан балаларын ташлап, өйҙөң ишеген шарт ябып сығып китергә, берәй тыныс ҡатын табып, башҡа ғаиләгә "эмиграцияға" күсергә генә ҡала... Кемдер әйтмешләй, "батып барыусыны ҡотҡарыу - уның үҙенең эше" тигән һымағыраҡ хәлдәге бындай ир сараһыҙҙан, үҙенең көҫһөҙ генә хәләл ефетен әлеге юлбарыҫ һымаҡ ажарланып, "тешләп алып бырактырып" ҡуймағайы! Бына нимә!

Үҙем шәхсән яҡындарым, таныштарым араһында ҡатынын туҡмап ғүмер иткән ир-атты әллә ни күп белмәйем. Ике ғаиләнән башҡа. Берәүҙәре йәш сағында бер-береһен ныҡ һөйөшөп ҡауышҡан. Апай кеше ауылында иң һылыу ҡыҙ булған (ағай уның хаҡында шулай тип һөйләгәйне). Башҡа егеттәрҙе иш итмәй, ҡыҙ ҙа был ағайҙы ғына һайлаған. Әммә, ҡыҙғаныҫҡа, мин уларҙың тик ыҙғышып йәшәгәндәрен генә күрә торғайным. Башҡа кешеләргә алсаҡ, мөләйем булған апайҙың күҙ төбө күгәреп йөрөгән мәлдәрендә уны гел генә йәлләгәнем хәтеремдә. Ағай үҙе лә күңелсәк, кешегә ярҙамсыл, эшлекле ир ине... Үҙем бер аҙ үҫә биреп, егет ҡорона еткәс, был ағайҙан һораным: "Икегеҙ ҙә шундай пар килгәнһегеҙ. Фәлән ағай, һин бит хатта себен үлтерергә лә йәлләй торған кешеһең. Нисек ана шул һылыуҙарҙан һылыу еңгәйгә ҡулың күтәрелә ул?" "Эх, ҡустым, - тине ул, - барыһы ла яҡшы булыр ине. Тик бер генә нәмә татыу йәшәргә бирмәй - еңгәндең теле..." "Ул телгә генә түҙергә була ла баһа! Уның ҡарауы, ниндәй сибәр ҡатынды эләктереп алғанһың!" "Балаларымды уйлап, түҙергә тырышып йөрөгән булам да ул, ҡустым. Ҡайһы берҙә үҙемде тотоп ала алмайым..." Был ағай менән апай хаҡында уйлай башлаһам, тағы ла әлеге кәзә меҫкен иҫкә төшә. Кәзә - кәзә инде, аҡылһыҙ мал. Ә тел сарларға яратыусы ҡатын-ҡыҙ аңра кәзә түгел бит, үҙенең "көсһөҙ зат" икәнлеген бер аҙ ғына таныһа, үҙе өсөн үк яҡшыраҡ булмаҫ инеме икән? Физик яҡтан көслө ир ҡаршылаша башлауы ла ихтимал, тип уйлап, телен бер аҙ тыйып торһа, бәлки, ир кешенең дә уға ҡулы күтәрелмәҫ ине... Ғөмүмән, балалары үҫеп етеп бөткәс, олоғайған көнөндә улар барыбер башҡалаштылар. Уларҙы иҫләгән һайын мин, ни өсөндөр, апайҙы ғына түгел, ағай кешене лә йәлләйем...

Ә икенсе бер таныш ғаиләлә ир кеше йәш сағында ныҡ ҡына "төшөрөргә" яратты. Иҫереп ала ла, һис бер урынһыҙ ҡатынын ҡыҙғанып, йә башҡа сәбәп табып, болара башлар ине. Шул арҡала хатта айырылышыу хәленә барып етә яҙҙылар. Әммә күпмелер ваҡыттан ир кеше кинәт кенә хәмер менән мауығыуын ҡуйҙы. Ошо көнгә тиклем уларҙы беләм. Хәҙер инде олпат йәшкә еткән был ағай менән апай бала-сағa, ейән-ейәнсәрҙәр үҫтереп, хатта бер-береһен маҡтап, хуплап, гөрләтеп тормош көтә. Ире ҡатынын өрмәгән ергә ултыртмай тиерлек...

Эскелек, ғаилә болалары хаҡында, әлбиттә, әле лә ишеткеләп йөрөйөм. Хатта таныш ике ирҙең ҡатындары тарафынан үлтерелгәне хаҡында ла ишетеп тетрәнгәйнем. Ә бер ир ҡатынын быуып үлтергән... Оҙаҡ ваҡыттар ситтә йәшәүем сәбәпле, был кешеләрҙең үҙ-ара нисек йәшәгәнен белмәйем. Әлбиттә, ал да гөл булмаған инде ул. Кемеһе хаҡлы булғаны хаҡында ла һүҙ йөрөтә алмайым. Әммә, ни генә булыуына ҡарамаҫтан, был парҙарҙың эскелек менән булышыуы һис шикһеҙ! Иҫерек кеше ниндәйҙер бер закон хаҡында уйларлыҡ хәлдә лә булмай... Кемеһе генә ғәйепле булыуына ҡарамаҫтан, әҙәм ғүмерен ҡыйыуҙы һис кенә лә аҡлап булмай инде ул. Шунлыҡтан, ғаиләләрҙә тыныслыҡ булыуын теләһәк, иң беренсе нәүбәттә, алкоголизмға ҡаршы көрәште көсәйтеү кәрәк. Ә хәмерҙән бөтөнләйгә ҡотолоуҙың иң ышанысл ы юлы - халҡыбыҙҙың иманға килеүе.

Иман хаҡында, ғөмүмән, динебеҙ тураһында һүҙ сыҡһа, бәғзе берәү шунда уҡ, баштараҡ әйткәндәй, Ислам динендә ҡатын-ҡыҙҙың хоҡуҡһыҙлығы хаҡында һөйләнә башлай. Йәнәһе лә, нәфис заттарыбыҙҙы дин "ҡыҫа". Был хәбәрҙәр - барыһы ла динебеҙҙе белмәгәнлектән килә. Аллаһ илсеһе саллаллаһу ғәләйһи үәс-сәләм ҡатын-ҡыҙҙы йәберләүҙе тыйған. Бер мосолман ир ҡатыны менән бәхәсләшеү осрағында ни эшләү кәрәклеген һорағас, Бәйғәмбәр с.ғ.с. "Асыуыңды тый", тип әйткән. "Әгәр ҡатын хаҡ булмаһа?.." тигән артабанғы һорауына ул тағы: "Асыуыңды тый!" тип ҡабатлаған. Шәриғәт, шулай уҡ айырым осраҡтарҙа, айырылышыуҙы ла рөхсәт итә, әммә никах тарҡатыуҙы Аллаһ Тәғәләнең яратмауы хаҡында риүәйәт бар. Боронғо ата-бабаларыбыҙҙың (байҙарының) динебеҙ ҡанундары рөхсәтенә ярашлы хатта бер-нисә (дүрткә тиклем) ҡатын алып та йәшәүен беләбеҙ. Әммә хәҙерге күҙлектән сығып ҡарап, быны дөрөҫ аңлай алырлыҡ хәлдә булғандар, әлбиттә, бик аҙ. Әммә динде яҡшы белгән ҡартатай һәм ҡәртәсәйҙәребеҙ үҙҙәренең тормошонан зарланмай, Аллаһ Тәғәләгә, Уның яҙған тәҡдиренә һәр саҡ риза булып, һин дә мин йәшәп ятҡандар. "Ирҙе ир иткән дә, ер иткән дә - ҡатын" тигән әйтем дә юҡтан ғына килеп сыҡмағандыр. Ир кеше "ут" булған саҡта ла уға ҡаршы "һыу" була белгән беҙҙең өләсәйҙәребеҙ. Ә инде, әлеге әйтмешләй, эскелек, шуға бәйләнгән айырылышыу, боларышыу һымаҡ нәмәләр борон бөтөнләйгә булмаған. Раббыбыҙ халҡыбыҙҙың дини асылына ҡайтыуын насип ҡылһын, барыбыҙҙың йөрәктәребеҙгә ныҡлы иман күндерһен. Амин.

Үҙемә килгәндә, хәләл ефетем менән инде 45 йылға яҡын бергә йәшәйбеҙ. Уға тырнаҡ осо менән дә тейгәнем булманы. Ғаиләлә дүрт малай үҫтек. Иң оло ағайым һикһәнен ҡыуып бара, иң кесе ҡустыбыҙ алтмышты аша атланы. Барыбыҙҙың да ҡатындарыбыҙ - йәштән алған кәләштәребеҙ. Беребеҙ ҙә "бисә туҡмап" ғүмер уҙғармайбыҙ, әлхәмдүлиллаһ. Атайым да бер ҡасан да әсәйемде ҡыйырһытманы. Ә әсәйемә килгәндә, ул ғәжәп аҡыллы, тыныс, баҫалҡы ҡатын ине...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА

# НИМӘ ЙӘШӘРТӘ ҺӘМ ҠАРТАЙТА?



**Ниндәй генә йәштә булмаһын, һәр ҡатын-ҡыҙ матур һәм йәш булып күренгеһе килә. Ҡайһы берәүҙәрҙең был уйы килеп сыға, ә икенселәрҙеке - юҡ. Сәбәбе нимәлә тип уйлайһығыҙ? Эш шунда: үҙен нимә йәшәртеүен, нимә ҡартайтыуын белгән гүзәл зат һәр ваҡыт йәш булып күренә.**

**Нимә ҡартайта?** Сырайҙағы ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо, тормошҡа пессимистик ҡараш, асыулы йөҙ - быларҙың барыһы ла ҡатын-ҡыҙҙы үҙенең йәшенән оло итеп күрһәтеүсе төп сәбәптәр. Һүнгән күҙле, шатлана белмәгән, битараф булып күренгән кеше лә ҡарт булып күренә. Эргә-тирәләге ваҡиғаларға, кешеләргә кире мөнәсәбәттә булыу, ғәйеплеләрҙе эҙләү ғәҙәте, көнсөллөк тойғоһо ла гүзәл затты ҡартайта. Төшөнкөлөккә бирелгән, гел кемделер әрләгән, тәнҡитләгән кешеләр ҙә ваҡытынан алда олоғая. Ауыр уйҙары, киҫерештәре сиргә юлыҡтырыуы ла мөмкин.

Тағы ла ҡатын-ҡыҙҙы сал сәсе оло күрһәтә. Уны буяп йөрөгән осраҡта төбөнән үҫеп сыҡҡас та буятырға кәрәк. Әгәр тигеҙ генә ағарған булһа һәм уны буятырға теләмәһәгеҙ, һәр ваҡыт йыуып, таҙа һәм матур итеп йөрөткәндә йәш булып күренергә мөмкин.

**Нимә йәшәртә?** Йөҙөнән йылмайыу китмәгән ҡатын-ҡыҙ тиҫтерҙәренә ҡарағанда йәшерәк күренә. Ихлас йылмайған ваҡытта күҙҙә барлыҡҡа килгән осҡон йәш һәм матур итә. Йылмаймауының сәбәбен ҡайһы берәүҙәр йәшәйештең ауыр булыуына бәйләр. Эйе, тормош булғас, барыһы ла була. Әммә килеп сыҡҡан проблеманы, ҡаршылыҡты, башҡаларҙы ғәйепләмәй генә, унан сығыу юлын эҙләү, табыу кешене көслөрәк итә. Ә рухы, ихтыяры ныҡтар бер нәмә алдында ла ҡаушап ҡалмай, алға бара, ышанысл ы була.

Үҙен һәр ваҡыт ҡарап, тәрбиәләп, йәғни сәсен матур итеп йөрөткән, еңелсә биҙәнгән, биҙәүестәр таҡҡан, кәүҙәһенә, төҫөнә тура килгән кейем кейгән ҡатын-ҡыҙ йәш сырайлы була. Килешкән төҫлө әйбер йөҙгә яҡын булырға тейеш. Мәҫәлән, шарф, блузка, кофта, ирен буяғыс һәм башҡалар.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Маҡсат - аңдың иң юғары кимәленә күтәрелеү

Йыһанда ла аңлы тормош булыуҙың иң хаҡ билдәһе булып уның вәкилдәренең береһенең дә беҙҙең менән бәйләнешкә инергә тырышмауы тора, тиҙәр. Ысынлап та, үҙебеҙҙе рухи йән эйәләренә лайыҡлы тотоу өсөн оҙайлы юл үтергә кәрәк. Был йәһәттән ҡайһы бер боронғо мәҙәниәттәр беҙҙе уҙып киткән. Ошо юлдарҙы яҙырға ярҙам иткән үткәндәрҙең күтәренке рухлы кешеләре Юғары аң менән аңлы рәүештә бәйләнгәнлектең асыҡ миҫалы була ала.

Суфыйҙарҙың төп маҡсаты - кешенең камиллашыуы һәм Аллаһ менән берлеге була. Суфыйсылыҡтан Исламдың рухи бай һәм яҡшылыҡтың ҡәҙерен белгән вариҫтары сыҡҡан. Улар һәр саҡ үҙҙәренә Аллаһ ихтыярына буйһоноу зарурлығына отчет биргән. Дәрүиштәр суфыйсылыҡта мистик туғанлыҡ ағзалары була. Уларҙың башлығы үҙенең тәрән эзотерик аҡылы менән башҡаларҙан айырылып торған шәйех була. Был белем уға ерҙәге сығанаҡтарҙан түгел, ә интуиция аша бирелгән. Ошо аҡылдың бер өлөшө булып ҡыуаныстың ни тиклем мөһим икәнлеген аңлау тора. Шуға ла дәрүиштәр күңелле бейеүҙәрҙе һәм йырҙарҙы ятаҡан. Сит кешеләргә бик йыш улар гипноз йәки экстаз тәьҫирендә кеүек күренгән. Әммә был йыһандан килгән ҡыуаныс тулҡыны булған.

Быға тиклем яҙылғандар һеҙгә аңдың яңы кимәленә күтәрелергә ярҙам итеүгә арналғайны. Ғәмәлдә был Тәңрегә оҡшаш булыу, Аллаға яҡынайыуҙы аңлата. Әммә был, һеҙ диндар булып китәһегеҙ, тигәнде аңлатмай. Бәлки, кемдер шул юл менән диндар булып киттем, тиер. Нигеҙҙә һеҙ бары тик барлыҡ киңлекте тултырған ҙур аңдың өлөшө генә. Бына хәҙер ҙә беҙ һеҙҙе аңығыҙҙы хатта тын тотолоу кимәленә күтәреү серенә өйрәтәсәкбеҙ.

Ошо тәңгәлдә уңыш ҡаҙаныу өсөн мин һеҙҙе матди донъя тарафынан тыуҙырылған стресты еңергә өйрәттем. Кире артҡа аҙым яһамаҫ өсөн алға тағы бер аҙым яһарға кәрәк. Бының өсөн үҙегеҙҙә кире эмоциялар табыу менән уларҙы программағыҙҙан юйып, улар урынына ыңғайҙарын яҙырға кәрәк буласаҡ.

Сигенеүгә юлды ябабыҙ. Шулай итеп, тыныслһыҙланыу, рух төшөнкөлөгө, көсһөҙлөк, саманан тыш арыу, пассивлыҡ, дәғүә белдереүгә әүәҫлек, тәнҡитләү, аралашмаусанлыҡ, түҙемһеҙлек кеүек сифаттарығыҙҙы ҡағыҙға яҙғандан һуң юйып ташлағыҙ ҙа, улар урынына ошо сифаттарҙы яҙып ҡуйығыҙ: ныҡлы ышаныс, күңел көрлөгө, көс, юҡҡа-барға бошонмау, маҡсатҡа ынтылышлылыҡ, хеҙмәттәшлеккә әүәҫлек, түҙемлек, тирә-яҡтағыларға ихтирам, аралашыусанлыҡ һәм башҡалар.

Ҡыуанысҡа күрә, һеҙ асылышҡа, матур яңы тормошҡа кәртә ҡуйыусы сифаттарҙы үҙ программағыҙҙан юя алаһығыҙ. Бының өсөн ни бары өс көн дауамында бер минутҡа көсөргәнештән арынып, идара итеп булған өндәге төш сеансын үтергә генә кәрәк.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



## 7 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
## РОССИЯ 1

5.25 Х/ф "Невезучая". [12+]
7.05 Х/ф "Жених для дурочки". [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.30 Х/ф "Мама поневоле". [12+]
14.30 Х/ф "Самая любимая". [12+]
16.55 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20 Х/ф "Я всё начну сначала". [12+]
1.30 Х/ф "Женщины". [12+]
4.54 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 Үткән ғүмер. [12+]**
**8.45 Автограф. [12+]**
**9.15 Д/ф "Народная писательница". [6+]**
**10.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**10.45 "Гора новостей". [6+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Бирешмә. Йырла! [6+]**
**12.30 Спектакль "Женская сюита". [12+]**
**14.15 Х/ф "Берегите женщин". [12+]**
**15.00 Әлләсе… [12+]**
**15.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.30 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**17.00 Д/ф "АтАй ҡыҙы". [6+]**
**17.45 Ради добра. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**18.15 "Образцовая башкирская семья". [12+]**
**19.00 "Здравствуй, Маэстро!". Концерт композитора, заслуженного деятеля искусств БАССР, народного артиста РБ, почетного гражданина г. Уфы Рима Хасанова. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**23.00, 4.30 Күстәнәс. [12+]**
**23.30, 5.00 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Привет, Джули!" [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**2.45 Спектакль "Гайфи агай, женись давай!". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 8 МАРТА
## ВТОРНИК
## РОССИЯ 1

5.40 Х/ф "Завтрак в постель". [12+]
9.40, 11.30 Х/ф "Москва слезам не верит". [12+]
11.00, 20.00 Вести.
13.05 Х/ф "Большой". [12+]
17.00, 2.20 Х/ф "Служебный роман". [0+]
21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.20 Х/ф "Серебряные коньки". [16+]
0.00 Х/ф "Лёд-2". [6+]
4.57 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "С праздником, милые женщины!" [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 Хазина. [6+]**
**8.45 Учим башкирский язык. [6+]**
**9.00 Ап-асыҡ. [12+]**
**9.30 Д/ф "Бишек. Колыбельные мамы". [6+]**
**10.00, 4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**10.45 "Гора новостей". [6+]**
**11.00 Спектакль "Юсуф и Зулейха". [12+]**
**13.15 "Дарю песню". [12+]**
**15.20 Хоккей. "Сибирь" (Новосибирск) - "Салават Юлаев" (Уфа). 1/4 финала коференции "Восток". 4 матч.**
**18.15 "Образцовая башкирская семья". [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Коко до Шанель". [16+]**
**2.30 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Озеро моей души". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 9 МАРТА
## СРЕДА
## РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Зацепка". [16+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
2.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [6+]**
**15.45 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Спортивная история. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Друзья из Франции". [12+]**
**3.00 Спектакль "Любовница. [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 10 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
## РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Зацепка". [16+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Т/с "Годунов. Продолжение". [16+]
2.55 Т/с "Пыльная работа". [16+]
4.36 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Теге өсәү! [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә.Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 23.45 История одного села. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 Республика live #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**0.00 Х/ф "Развод по-французски". [12+]**
**2.45 Спектакль "Заноза". [12+]**
**4.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 11 МАРТА
## ПЯТНИЦА
## РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 12.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Зацепка". [16+]
21.20 Т/с "Елизавета". [16+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00 Х/ф "Серебряные коньки". [16+]
3.20 Х/ф "Ночная фиалка". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Улыбка пересмешника". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 21.00 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика live #дома. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 "Тамға". Финал II Международного конкурса мастеров башкирского национального костюма. [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15, 3.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Автограф". [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**19.45 Специальный репортаж. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45, 3.30 История одного села. [12+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 Караоке по-башкирски. [12+]**
**0.00, 4.30 Х/ф "Помни меня". [16+]**
**2.00 Спектакль "Кадриль". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 12 МАРТА
## СУББОТА
## РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
8.55 "Формула еды". [12+]
9.20 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 "Доктор Мясников". [12+]
12.30 Х/ф "Синдром недосказанности". [12+]
14.30 Т/с "Я всё помню". [12+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Срок давности". [12+]
1.10 Х/ф "Любить и верить". [12+]
4.34 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [0+]**
**8.45 Д/ф "Батыр. Харис Юсупов". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "КультУра". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]**
**11.30 Детей много не бывает. [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.00 Автограф. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Д/ф "Аксаков и Башкирия". [12+]**
**17.45 Конкурс скрипачей В. Спивакова. [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**19.45 Ради добра. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00, 5.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 2.00 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры". [12+]**
**0.00 Х/ф "Я украду тебя у всего мира". [16+]**
**2.45 Спектакль "Пролетая над гнездом кукушки". [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 13 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
## РОССИЯ 1

5.25, 3.10 Х/ф "Гостья из прошлого". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 "Доктор Мясников". [12+]
12.30 Х/ф "Счастливая серая мышь". [12+]
14.30 Т/с "Я всё помню". [12+]
17.50 "Танцы со Звёздами". Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Альпинист". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

## БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Д/ф "Большая просьба". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Сулпылар". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Ай текә". [6+]**
**11.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.15 М/с "Нурбостан". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Культура малой Родины. [12+]**
**17.45 М/ф "Северные Амуры". [12+]**
**18.15 "Любезники, любизар". Концерт, посвященный 210-ой годовщине Победы в Отечественной войне 1812 года. [12+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Әлләсе… [12+]**
**21.00, 22.30 Республика live #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.Яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.30 Х/ф "Музыка крыш". [16+]**
**1.00 Спектакль "Анфиса". [12+]**
**5.00 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**8 март "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 18.00 12+
**9-10 март "Кара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 16+
**11 март "Февраль. Буран"** (З. Бураҡаева). 12+
**12 март "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама. 18.00 16+
**13 март "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), музыкаль комедия. 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**7 март "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 12.00, 14.00 0+
**"Аҡса булһа бер муҡса"** (М. Багаев), музыкаль комедия. 18.0012+
**8 март "Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт. 12.00 6+
**10 март "Униженные"** (З. Биишева), драма. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**Өфө балалар филармонияһы сәхнәһендә:**
**7 март "Приключения Доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 11.00, 13.00 0+
**8 март "Кошкин дом"** (С. Маршак). 11.00, 13.00 0+
**12 март "Знаменитый Незнайка"** (Н. Носов). 11.00, 13.00 0+
**13 март "Большой секрет"** (А. Рахманкулова). 11.00, 13.00 0+
**Башҡорт опера һәм балет театрының Бәләкәй сәхнәһендә:**
**7-8 март "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 12.00, 14.00 0+
**12 март "Гадкий утенок"** (Г.-Х. Андерсен). 12.00, 14.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**8 март "Онотма!"** И. Гәзизовтың концерты. 18.00 6+
**9 март "Нелюбовь: Брамс и Чайковский великие антагонисты"**. 6+
**10 март "Чистый Бах"** М. Шёнхайт. 6+
**11 март** Нур Дауытов музыкаһы. 6+
**12 март "В ожидании чуда. Фимбо"** буласаҡ әсәйҙәр өсөн концерт. 13.00 0+
**13 март "Weekend с камерным оркестром"**. 15.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**9 март Премьера! "Тоғролоҡ"** (М. Ҡунафин), драма. 16+
**11 март "Кисер мине, әсәй!"** (Р. Батулла), моңһоу комедия. 12+
**12 март "Золушка"** (Д. Голубецкий), әкиәт. 13.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 март "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р. Шарт), комедия. 16+
**11 март "Минең йөрәк һиндә тибә"** (Р. Ҡуйбағаров), драма. 12+
**12 март "Ҡараулы! Атай өйләнә?!"** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия. 18.00, 12+
**13 март "Супер Заяц"** (И. Чернышев), әкиәт-комедия. 12.00 0+
**"Ҡатын түгел - аждаһа!"** (Д. Сәлихов), комедия. 18.00 12+

### А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**9-10 март "Кар аҫтында ҡайнар шишмә"** (А. Ғиләжев), мелодрама. 14.00 12+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 7 (6) дүшәмбе | 6:23 | 7:53 | 13:30 | 17:06 | 19:01 | 20:31 |
| 8 (7) шишәмбе | 6:20 | 7:50 | 13:30 | 17:08 | 19:03 | 20:33 |
| 9 (8) шаршамбы | 6:18 | 7:48 | 13:30 | 17:09 | 19:05 | 20:35 |
| 10 (9) кесе йома | 6:16 | 7:46 | 13:30 | 17:11 | 19:07 | 20:37 |
| 11 (10) йома | 6:13 | 7:43 | 13:30 | 17:13 | 19:09 | 20:39 |
| 12 (11) шәмбе | 6:11 | 7:41 | 13:30 | 17:14 | 19:11 | 20:41 |
| 13 (12) йәкшәмбе | 6:08 | 7:38 | 13:30 | 17:16 | 19:13 | 20:43 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 8 МАРТҠА БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ЙЫРҘАРЫ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**8-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сәләм. Мағазов. Нанай. Күмер. Икмәк. Зыян. Хөкүмәт. Әрмәк. Мәхмүт. Әсе. Ҡот. Тарма. Дауа. Ғәфү. Рикша. Вахта. Нужа. Тромбон. Ҡарға. Еҙғорт. Аҡбашев.

**Вертикаль буйынса:** Хәсәнов. Кикерек. Матбуғат. Мәке. Ракета. Ритм. Саған. Ҡәүем. Бола. Низаметдинов. Ун. Ут. Вий. Инә. Тараҡ. Рота. Әләм. Күк. Абаға.

ҺЫНАМЫШТАР



# МАРТТА...

Март башында тамсы тамһа, йәй яҡшы килә.

Март сыҡмай - дәрт сыҡмай.

Мартта йылы булһа, йыл һалҡын була.

Мартта көн менән төн тиңләшә.

Марттың шартын апрель сығарыр.

Яҙ иртә килһә, ашлыҡ уңыр.

Марттың берендә аяҙлыҡ - йәй көнө ҡыярға туҡлыҡ.

Март башында сәпсек эсерлек һыу булһа, йәй яҡшы килер.

Мартта ҡар өҫтөндәге һалам ҡарға ирееп инһә, бер айҙан ҡар китер.

Беренсе мартта ел иҫеп торһа, бөтөн йәй елле булыр.

Көн ҡояшлы, елһеҙ булһа, яҙ, йәй яҡшы булыр, иген уңыр.

Ҡар ағасҡа йәбешеп торһа, көн епшетер.

Мартта күк күкрәһә - һыуыҡҡа.

Артыҡ дымлы март - насар уңышҡа.

Мартта ямғыр яуһа, бәшмәк күп булыр.

Мартта һыуыҡ һәм ҡоро булһа - икмәк мул булыр.

Һирәк кенә ҡаты һыуыҡтар булһа - уңыш муллығына.

Мартта ҡар өҫтө ҡытыршы булһа - уңышҡа, тигеҙ булһа - уңыш әҙ булыр.

Был айҙа боҙбармаҡтар оҙон булһа - яҙ оҙаҡ килер.

Мартта томан йыш булһа ямғырлы йәйгә.

Март аҙағында ҡар тиҙ ирееп гөрләүектәр шәп аҡһа - ямғырлы йәй көт.

ТАМАШАСЫ ҠОЛАҒЫНА...



# УЙҒА БАТЫРЫРЛЫҠ...

**Салауат башҡорт дәүләт драма театры артистары тамашасыларын яңы миҙгел асылғанда ғына түгел, ә йыл әйләнәһенә премьералар менән шатландырып тора. Ошо көндәрҙә тамашаһы Мөнир Ҡунафиндың "Кешелеккә тоғролоҡ" хикәйәһе буйынса "Тоғролоҡ" спектаклен сәхнәлә күрәсәк. Инсценировка авторы - Зөһрә Бураҡаева, ҡуйыусы режиссеры - Лиана Ниғмәтуллина. Яңы спектакль тураһында театрҙың баш режиссеры Лиана НИҒМӘТУЛЛИНА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

➔ **Ни өсөн тап ошо әҫәрҙе һайланығыҙ?**

- Тәү сиратта әҫәрҙең темаһы ҡыҙыҡһындырҙы. Гонаһһыҙ кеше бармы икән ул был донъяла? Юҡтыр, моғайын. Әҫәрҙе уҡып сыҡҡас, автор еткерергә теләгән төп фекер күңелде йылытты. Был бик көнүҙәк. Әҫәр Нәфисә исемле ҡатын һәм уның ире Иҙристең ғаилә тарихы тураһында. Ситтән ҡараһаң, өлгөлө ғаилә, барыһы ла яҡшы кеүек. Әммә уларҙы бер оло мәсьәлә борсоуға һала - тиҫтә йыл бергә ғүмер кисерһәләр ҙә, балалары юҡ. Асыҡланыуынса, сәбәп Иҙристә. Ағасһыҙ йортҡа ҡош ҡунмаҫ, балаһыҙ йортҡа ҡот ҡунмаҫ, тиҙәр. Был хәҡиҡәттең әсеһен үҙ башынан үткәндәр яҡшы аңлайҙыр. Ғаиләлә сабый тауышы сыҡһын өсөн әҙәм балаһы ниндәй аҙымға бармаҫ. Нәфисә әсә булыу бәхетен татырға бик теләй, төрлө юлдарын эҙләп ҡарай һәм ул иренән бер генә тапҡыр хыянат итергә рөхсәт һорай. Тейешле кандидатураны - йәш, әммә телһеҙ Рәсүлде табып та ҡуя. Серҙәрҙең барыһын да асып бөтмәйем, юғиһә, ҡыҙығы ҡалмаҫ. Нәфисә был аҙымға барырмы-юҡмы, ҡылған гонаһтары өсөн уны ниндәй яза көтөүен спектаклде килеп ҡарағас белерһегеҙ.

➔ **Сәхнәләштереүгә ҡасан тотондоғоҙ?**

- Яңы йыл каникулдарынан һуң әҫәр өҫтөндә эшләй башланыҡ. Хикәйә буйынса бик күп фекер алышыуҙар, бәхәсләшеүҙәр, анализлау булды. Нимә ул гонаһ, уның ҙуры, бәләкәйе бармы, гонаһ ҡылмайынса йәшәп буламы - ошондайыраҡ һорауҙарға яуап эҙләргә кәрәк ине. Әҙерлек әле тулы көс менән бара. Еңел тип әйтеп булмай, сөнки һаҡсыл мөнәсәбәт талап иткән бик сетерекле тема алынған. Автор уҡыусыларға бер генә гонаһтың да эҙһеҙ үтмәүен, уның өсөн үҙенә булмаһа, балаларына яуап бирергә кәрәк буласағын еткерергә теләй.

➔ **Спектаклдә нисә кеше уйнай?**

- Артыҡ күп кеше ҡатнашмай. Нәфисә ролендә - Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Нәүфилә Яҡупова, Наҙгөл Иҫәнбаева, Минзилә Ҡотошева, Иҙрис - Рамир Дәүләтбаев, Юнир Мансуров, Рәсүл - Әмир Үтәбаев, Рафаэль Ғәйнуллин, Сара инәй - Башҡортостандың атҡаҙанған артистары Гөлфирә Сафиуллина, Нәүфилә Яҡупова, Хәсән ҡарт - Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рөстәм Фазылов. Театрға яңы килгән йәш актерҙарыбыҙ Лилиә Байгилдина, Элвира Йәрмөхәмәтова, Нәфисә Мәжитова, Йәнгүзәл Халикова, Гөлфинә Ибәтуллина күп кешеләр ҡатнашҡан күренештәрҙә уйнаясаҡ.

**Шулай итеп, Салауат башҡорт дәүләт драма театры "Тоғролоҡ" спектакленең премьераһын 9 март көнөнә билдәләгән һәм был көнүҙәк, фәһемле, уйландырырлыҡ тамашаға көтөп ҡала.**

**Динә ҒӘЛИЕВА.**

ҠОТЛАУ ҺҮҘЕ...

# АҒИНӘЙҘӘРГӘ АРНАЛА

**Ҡатын-ҡыҙҙар көнө байрам итеп билдәләнә икән, был байрамда ҡотлауҙар, маҡтау һүҙҙәре ҡабул итеүгә һис шикһеҙ иң тәүҙә ағинәйҙәр - милләт ҡотоно, башҡорт ҡатын-ҡыҙы асылын, рухын, йолаларын, әләсәйҙәр кәсептәрен тергеҙергә тип ең һыҙғанған апай-инәйҙәр, һылыуҙар лайыҡ. Республикабыҙҙа һәм Силәбе, Ырымбур, Ҡурған өлкәләрендә киң хәрәкәт алған был ойошма ағзаларына - оло хөрмәт, күтәрмәләүҙәр, иң изге теләктәр. Байрам менән!**

## Ил инәһе барҙа...

*Ағинәйҙәр күңеле - талир тәңкә,*
*Шуға нурлы минең баш йортом.*
*Милләт рухын бөрләр*
*Ил инәһе барҙа*
*Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!*

*Ағинәйҙәр аҡылы - алтын һандыҡ*
*Ябай түгел улар: ир-ҡатын!*
*Ирҙә иңен терәр*
*Ил инәһе барҙа*
*Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!*

*Ағинәйҙәр рухы - изге бетеү*
*Ят күҙҙәрҙән һаҡлар ил ҡотон.*
*Ил, тип, доға ҡылыр*
*Ил инәһе барҙа*
*Йәшәр әле, йәшәр башҡортом!*

**Зөлфиә ХАННАНОВА.**

## Ҡот ҡояһын бөгөн халыҡҡа

*Асмандарҙан тороп ете ҡыҙ ҙа*
*Әйҙәп торған сакта сафлыҡҡа,*
*Ҡан хәтерен йәндә терегеҙһәң,*
*Ҡот ҡояһын бөгөн халыҡҡа.*

*Асылыңдан алып күҙ һалаһың,*
*Йөрәгенә һәр бер башҡорттоң.*
*Әй, Ағинәй,*
*Шомло был заманда*
*Ҡәүемемдең йөҙөн балҡыттың!*

*Ата-бабаларҙан ҡеүәт алып,*
*Тупраҡтарҙа тойоп ал ҡанын,*
*Урал тәғлиматен еткерҙең һин,*
*Йәншишмәләй ғәмде сайҡаның.*

*Һәр бер һүҙең һинең - үҙе доға,*
*Һәр ишараң иман нығыта.*
*Һомайғоштан ғына ялрадыңмы,*
*Милләтемә булып аҡ бата.*
*Әйткәндәрең беҙҙе йырлата ла,*
*Һәр кинәйәң йәнде илата!*
*Аһ, Ағинәй!..*

**Лариса АБДУЛЛИНА.**

## Ағинәйҙәр һымаҡ булһын...

*Ҡаушап ҡалып, юҡҡа-барға "аһ" тимәйҙәр,*
*Ауырлыҡтар уртаһында баш эймәйҙәр.*
*Арабыҙға насарлыҡты индермәйҙәр,*
*Милләт хәлен яҡшы яҡҡа әй көйләйҙәр,*
*Аҡ күлдәкле, аҡ яулыҡлы ағинәйҙәр!*

*Юл ярырҙай юлбашсылар артта ҡалған,*
*Ярты йортто ғәфләт-йоҡо баҫып алған.*
*Алдатмаһын аңыбыҙҙы хәйлә-ялған,*
*Заманыбыҙ иңебеҙгә бурыс һалған.*

*Ишеккә иш түгел ажар аттарыбыҙ,*
*Илгә хужа булыр затлы заттарыбыҙ.*
*Иманына килер әле ҡарттарыбыҙ,*
*Уңыш бирер сиҙәмдәрҙе аҡтарырбыҙ.*

*Уянайыҡ, беҙҙе йоҡо баҫып алған,*
*Әй дуҫтарым, көнөбеҙмә шуға ҡалған?*
*Тыңлашһен тим бөркөттәргә ир-егеттәр,*
*Ағинәйҙәр һымаҡ булһын аҡһаҡалдар!*

**Рауил БИКБАЕВ,**
**Башҡортостандың халыҡ шағиры.**



АФАРИН!

# "ТАМЫР" ЮБИЛЕЙЫН БИЛДӘЛӘЙ

**"Тамыр" балалар телерадиостудияһы 1992 йылдың 2 мартында асылды. 30 йыл эсендә "Тамыр" радиола һәм телевидениела берәр тапшырыуҙан "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының ҙур телерадиоструктураһына әүерелде. Башҡортостан юлдаш телевидениеһында, компанияның радиоканалдарында балалар өсөн тиҫтәләгән сифатлы тапшырыуҙар күрһәтелә. 2010 йылдың 2 декабрендә республиканың кабель селтәрҙәрендә тәүлек әйләнәһенә "Тамыр" балалар-үҫмерҙәр телеканалы эшләй башланы.**




"Тамыр" Рәсәйҙә тыуған телдә һәм тыуған мәҙәниәткә нигеҙләнгән тәрбиәнең сағыу өлгәһе булып тора. Илдә "Тамыр" телеканалын сифатлы контент булдырған профессиональ оҫтахана булараҡ беләләр һәм баһалайҙар. Балалар телеканалы төшөргән фильмдар һәм программалар тиҫтәләрсә халыҡ-ара фестивалдәрҙә еңеү яуланы. "Тамыр" "ТЭФИ-Төбәк" Рәсәй юғары телевизион премияһының тыуғы Бронза Орфейы менән бүләкләнде. 2016 йылда "Тамыр" телеканалы спутник, кабель һәм интернет-телевидение өлкәһендә "Алтын нур" милли премияһының "Балалар телеканалы" номинацияһында еңеүсе булды. Һуңғы йылдарҙа "Тамыр" яңы һулыш кисерә - республика бюджеты сиктәрендә үҙенсәлекле проекттар әҙерләй. Үҫмерҙәр өсөн "Бирешмә!", "Ышан" сериалдары; "Нурбостан" анимация сериалы; беренсе башҡорт классик музыкаһын башҡарыусыларҙың "Елкән" телевизион конкурсы; "Бирешмә!" беренсе балалар премияһы, "Бишек" бишек йырҙары телевизион конкурсы; "Ҡош юлы. Балалар" йәш бардтар конкурсы, документаль фильмдар, телеконкурстар, фильм-әкиәттәр - былар барыһы ла балалар донъяһын йәнле итә, уларҙы тыуған телгә, тыуған моңға ылыҡтыра.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.

# БӨЛГӘН ИЛГӘ...

## бөкрө билле бей килер

Башһыҙ өйҙә ата тороп, ул һөйләр, инә тороп, ҡыҙ һөйләр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙеңдән алда башҡаларҙы сығарыу - иң маҡтаулы ҡылыҡ.

**(Уильям Блейк).**

Уңыш күптәрҙе уңышһыҙлыҡ кисерергә мәжбүр итә.

**(Синди Адамс).**

Һәр төрлө дан ҡурҡыныс: изгеһе - көнләшеү, аламаһы оялыу тыуҙыра.

**(Томас Фуллер).**

Мауығыу үткер күҙҙе лә һуҡырайта, һаңғырау итә һәм аҡылың ҡушмағанды ҡылырға мәжбүр итә.

**(Бируни).**

Ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәттең ысын архитекторҙары.

**(Гарриет).**

Һәр кемдең үҙ фекере булырға мөмкин, әммә закон һәр кем өсөн берәү.

**(Теренций).**

Үткәндәге хаталарҙы төҙәтеүгә ҡарағанда тәңкитләүе еңелерәк.

**(Джованни Боккаччо).**

Уйҙарыңды үҙгәрт - шул саҡта донъяң да үҙгәрер.

**(Норманн Пиль).**

Иң намыҫлыһы - ул ваҡыт, ти итальяндар. Шулай булғас, кем миңә изгелек, кем яуыҙлыҡ теләй икәнен ваҡыт күрһәтер.

**(Пьер Бомарше).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡһаҡалға йәш кеше килә һәм: "Һеҙҙең һымаҡ аҡыллы булыу өсөн миңә нимә эшләргә?" - тип һорай. Аҡһаҡал: "Урамға сыҡ та, шунда баҫып тор..." - тип яуап бирә. "Урамда баҫып тороу миңә нисек итеп ярҙам итә ала икән?" - тип икеләнә егет, ә шулай ҙа аҡһаҡалдың әйткәнен үтәп, урам уртаһына сығып баҫа. Бына ҡойоп ямғыр яуа башлай, йәш кеше үтәнән-үтә һыулана. Бер аҙҙан түҙмәй, аҡһаҡал янына яңынан инә һәм: "Мин урамда баҫып торҙом, унан ниндәй файҙа булды һуң?" - тип һорай. "Урамда баҫып торғанда башыңа ниндәйҙер уй килдеме?" - тип һорай аҡһаҡал. "Ниндәй уй килһен, ти! Мин үҙемде бер алйот хәлендә тойҙом..." - ти йәш егет. "Бына был асыш! - ти аҡһаҡал. - Был аҡылға табан тәүге аҙым. Әгәр ҙә һин үҙеңдең алйот икәнеңде беләһең икән, тимәк, һин дөрөҫ юлда һәм һин яҡшы яҡҡа үҙгәрә башлағанһың..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22009

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ"
нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
4 март 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3387
Заказ - 271